ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 июнь (һөтай) 2025

№22 (1166)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Беҙ башҡортса һөйләшәбеҙ!



5

Һәр ғаиләлә "коммунизм" булдырайыҡ,

йәки Барына шөкөр итеп йәшәйек!



6

Йондоҙҙарға илткән юл



8-9

Ашыҡ уйындарымы?

Ул сослоҡ һәм отҡорлоҡ тәрбиәләй!



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 3 июндән 13-нә тиклемгә ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индексլы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 872 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Бөгөн балалар ниндәй уйындар уйнай?

**_Ринат СИБӘҒӘТУЛЛИН, Өфө ҡалаһы Нуғай ҡасабаһы:_** Минең 5 улым үҫеп килә. Олоһона - 15, иң бәләкәйенә 4 йәш. Икәүһе игеҙәк. Быны айырым әйтәм, сөнки уларҙың үҙ-ара ғына уйнаған уйындары бар, ағалары да, ҡустылары да ҡыҫтырмайҙар, бары тик икәүһе генә уйнай.

Әйткәндәй, бер тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, хәҙерге балаларҙың 38 проценты компьютер уйындарын, төрлө приставкаларҙы һәм телефонда ултырыуҙы хуп күрә икән. 18 процент балалар өҫтәл уйындарына өҫтөнлөк бирһә, 17 проценты төрлө спорт уйындарын үҙ итә. Унда тағы ла бер нисә пункт бар, онотҡанмын уларын.

Мин үҙем балаларҙың уйындарын ҡаты контролдә тотам, компьютер һәм смартфонда көнөнә 2 сәғәт кенә уйнарға рөхсәт итәм, киске 21 сәғәттә бөтә техника һүндерелә. Бер сәғәт әҙәби китап уҡыуға бүләбеҙ һәм артабан - йоҡлау. Балалар буш ваҡыттарында йәйгеһен - футбол, көҙөн волейбол уйнайҙар, ҡышын ҙурҙары саңғыла йөрөйҙәр. Бәләкәйе уйынсыҡ машиналарға әүрәй. Ихатағы бөтә майҙан футбол уйыны өсөн тәғәйенләнгән. Бөтә тирә-яҡта йәшәгән малайҙар беҙҙең ихатала туп тибә. Футбол уйнап ялҡып китһәләр, тиҙ генә волейбол селтәрен һуҙып ебәрәләр. Шулай итеп, улар көнө буйы урамда саф һауала йүгереп, һикереп кинәнәләр.



Өйҙә өҫтәл уйындары ла күп. Шахмат, шашка, "Монополия", "Мемо", финанс грамотаға өйрәткән өҫтәл уйындарын яраталар. Улар менән бергә беҙ ҙә уйнайбыҙ. Был уйындар уйларға, фекерләргә, анализлап өйрәнергә, сослоҡҡа, хәтерҙе яҡшыртырға булышлыҡ итә.

Әлбиттә, иркенгә ҡуйһаҡ, бәлки, беҙҙең малайҙар ҙа телефон ҡосаҡлап ултырыр ине. Ләкин беҙ, атай-әсәйҙәр, балаларҙың һаулығын, киләсәген уйлаһаҡ, быға юл ҡуймаҫҡа тейешбеҙ.

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЫҢҒАЙ ТОЙҒОЛАРҘА БӘҮЕЛТӘ



**Әле 2025 йылдың икенсе ярты йыллығына ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу кампанияһы бара. Ә был аҙнанан башлап ташламалы хаҡ менән яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителгән.**

Бындай мәлдә һәр кемдең алдында әллә нисә тиҫтә гәзит-журнал араһынан ҡайһыһына яҙылырға икән, тигән һорау торалыр. Мин дә, һәр бер ваҡытлы матбуғатты күҙҙән үткәреп, күнелемә яҡын булғандарын барлап йөрөйөм. Әлбиттә, район гәзитенә яҙыласаҡмын. Һәм тәүгеләрҙән булып төрән белемле, зауыҡлы, мәҙәниәтле "Киске Өфө" гәзитенә яҙылам. Әллә күпме йылдар алдырам инде уны. Бер ҡасан да яҙылмай ҡалғаным юҡ. Почтальондар ҙа теүәл генә итеп, ваҡытында килтереп тора, рәхмәт уғырҙары.

"Гәзитте ни өсөн яратып уҡыйһың?" - тигән һорау бирҙе бер ваҡыт каникулға ялға ҡайтҡан студент улым. Уға тиклем былхакта уйлап йөрөмәһәм дә, яуап үҙенән-үҙе урғылып сыҡты. Әйтеп үтеүемсә, "Киске Өфө" - мәҙәниәтле гәзит. Уҡыусы иғтибарын яулау өсөн әллә ниндәй түбәнлеккә төшмәй, үҙ йәйына ғына, һәүетемсә генә гәзит уҡыусының күңеленә ыңғай тойғолар, ышаныс орлоктары сәсә. Был баҫманы уҡыған һайын уҡығы килә. Зиһен асыла төшкәндәй була, төрлө сырмалсыҡ уйҙар тотҡононан ҡотолоп, иркен тын алып ҡалғандай тоям үҙемде гәзитте уҡып сыҡҡас.

Ә бирелгән мәғлүмәттең күплеге һәм төрлөлөгөнә һуң! Әйтеп, баһалап бөткөһөҙ ҙә инде! "Киске Өфө"нөң биттәрендә "булды, үтте, шулай эшләнде, был башҡарылды", тип кенә мәғлүмәт бирелмәй, ә ваҡиғалар, саралар төплө итеп анализлана, ниндәйҙер һығымталар эшләнә.

Баш ҡала тураһындағы фекерҙәрҙе уҡырға яратам. Өфөгә яҡын йәшәһәк тә, юл йыш төшмәй, шуға күрә ҡайһы бер үҙгәрештәр хаҡында гәзиттән дә уҡып белеп ҡуям. Шулай уҡ республикабыҙ хаҡында яҙылған бәләкәй, әммә "мыҡты" ғына мәҡәләләр ҙә донъя күрә. Беҙҙең Бөрө районы тураһында ла булыр әле берәй хәбәр, тип көтөп йөрөйөм.

Һәр бер кешенең әйтер фекере, йөрәгендә йөрөткән уй-хыялдары була бит инде. Гәзит хәбәрселәренең әңгәмәләрҙә үҙ ҡунаҡтарының, геройҙарының ошо фекерҙәрҙән матур, төплө итеп еткерә белеүе лә һоҡландыра. Тел ҡеүәһе көслө гәзит журналистарында, авторҙарында. Бай, һутлы тел менән яҙалар. Ҡоро-һары, еңел-елпе, йөкмәткеһеҙ әйберҙәр бирелмәүе менән дә оҡшай гәзит. "Киске Өфө"гә уңыштар теләйем. Беҙ был гәзитте яратабыҙ һәм хөрмәт итәбеҙ.

**Зәлиә ЙӘНБӘКОВА.**
**Бөрө ҡалаһы.**

12+

МӨҺИМ ВАҠИҒА

# САЛАУАТҺЫҘ - ИКЕ ЙЫЛ



**Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объекты булған Салауат Юлаев һәйкәле тураһында һөйләне.**

Республика Башлығы үткән аҙнала Рәсәй Художестволар академияһы президенты Василий Церетели менән осрашыу үткәнен, унда Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау мәсьәләһе тикшерелеүен әйтте. "Барығыҙ ҙа беләһегеҙ, беҙ ике йыл дауамында Салауат Юлаев һәйкәле торошона бәйле хәлде тикшерәбеҙ һәм анализлайбыҙ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, һәйкәлдең йөшө лә, атмосфера йоғонтоһо ла, технологик үҙенсәлектәр ҙә реставрация яһауҙы талап итә, - тине Радий Хәбиров. - Әлеге ваҡытта эштәрҙең графигын билдәләнек, финанслау сығанаҡтары бар".

Реставрация этаптары тураһында Хөкүмәттең вице-премьеры Рөстәм Ғәзизов һөйләне. Унын һүҙҙәренсә, Башҡортостандың тарихи символын һаҡлап ҡалыу маҡсатында комплекслы фәнни тикшеренеүҙәр үткәрелгән: тарихи-архив, библиографик, архитектура-археологик үлсәүҙәр, инженер-химик-технологик тикшеренеүҙәр. Һәйкәл материалдарының торошо, аэродинамик характеристикалары өйрәнелгән, инженер тикшеренеүҙәр үткәрелгән. Эксперттар һығымтаһы буйынса, һәйкәлде һаҡлау өсөн тиҙ арала эштәр башҡарыу талап ителә.

Һәйкәлде һаҡлау өс этапта үтәсәк. Беренсе этап - әҙерлек: майҙанды ҡойоу, төҙөлөш ҡоролмаларын урынлаштырыу, махсус техника йыйыу, скульптураны демонтажға әҙерләү. Был этап 2025 йылдың сентябрендә тамамланасаҡ.

- Эштәр өсөн ауыр техника кәрәк буласаҡ, шуға күрә 30 июндән майҙанға инеү тулыһынса ябыла һәм бөтә эштәр тамамланғансы ябыҡ буласаҡ, - тине Рөстәм Ғәзизов. - Икенсе этап (2025 йылдың октябренән 2027 йылдың апреленә тиклем) - иң мөһиме һәм ҡатмарлыһы: һәйкәлде демонтажлау, реставрациялау һәм яңыртып ҡуйыу. Реставрация Өфө ҡалаһындағы махсус цехта үтәсәк.

Өсөнсө этапта (2027 йылдың апреленән сентябренә тиклем) фонтанды һәм Салауат Юлаев майҙанын яңыртыу ҡаралған. Вице-премьер билдәләүенсә, майҙан һуңғы тапҡыр 2007 йылда яңыртылған, шуға яңыртыу кәрәк.

План буйынса, яңыртылған һәйкәлде һәм майҙанды тантаналы асыу 2027 йылдың октябрендә, скульптор Сосланбәк Тавасиев эшләгән һәйкәлдең 60 йыллығына тура киләсәк.

Радий Хәбиров бөтә эштәрҙе Рәсәй Художестволар академияһы эксперттары һәм йәмәғәт комиссияһы күҙәтеүе аҫтында башҡарырға ҡушты.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

БЫНЫҺЫ ЛА МӨҺИМ!

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ КӨНӨ




**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең указы менән 8 июндә "Урал батыр" эпосы көнөн булдырҙы.**

- Үҫеп килгән быуынды тәрбиәләү эше халҡыбыҙҙың бай мәҙәни мираҫына нигеҙләнергә тейеш. Айырыуса донъя әҙәбиәтенең үҙенсәлекле боронғо әҫәре - үҙебеҙҙең "Урал батыр" эпосы тураһында әйтергә теләйем. Башҡорт халҡының аҫыл ҡомартҡыһын артабан да һаҡлап ҡалыу, үҫтереү өсөн йыл һайын июнь айында "Урал батыр" эпосы көнө үткәреләсәк, - тине Радий Хәбиров.

"Урал батыр" эпосы - башҡорт әҙәбиәтенең иң боронғо ҡомартҡыһы, ул 4576 шиғри һәм 19 прозаик юлдан тора. Эпос күп меңәр йылдар дауамында формалашҡан. Текст быуындан-быуынға күсә килгән. Мөхәмәтша Буранғолов эпосты 1910 йылда Ырымбур губернаһы Этҡол волосы (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районы) Иҙрис ауылында Ғәбит Арғынбаев һәм Бөләкәй Этҡол ауылында Хәмит Әлмөхәмәтов исемле ике сәсән-ҡурайсынан яҙып алған. Төп нөсхәһе (ҡулъяҙма) һаҡланмаған.

Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова хәбәр итеүенсә, "Урал батыр" эпосы тәүге тапҡыр 1968 йылда "Ағиҙел" журналында баҫылған. Башҡорт телендәге тулы баҫмаһы "Башҡорт халыҡ ижады" китабының беренсе томында донъя күргән. "Урал батыр" күп телдәргә тәржемә ителгән. Эпос фәнни яҡтан өйрәнелә, эпосты яттан һөйләү конкурсы үткәрелә, спектаклдәр, анимация фильмдары бар.

Әйткәндәй, 8 июндә "Урал батыр" китабының күсермәһе Евразия күсмә цивилизациялар музейы коллекцияһына тапшырыла. Башҡортостан Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ошо турала белдерҙе.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Бөгөн балалар ниндәй уйындар уйнай?



***Әсмә МӨХӘМӘТОВА, Әбйәлил районы Асҡар ауылы:*** Беҙҙең балалар бәләкәйҙәр, уларҙың уйнай, уйындар аша донъяны танып-белә торған саҡтары. Ике ҡыҙыбыҙ ҡурсаҡ уйнарға бик тә ярата. Ҡәйнәм уларға башҡорт кейемдәре кейгән ҡурсаҡтар бүләк итте, иртәнән кискә тиклем ҡулдарынан төшөрмәйҙәр. Башҡортса һөйләшкән ҡурсаҡ, йомшаҡ уйынсыҡтар бар икәнлеген дә беләм, шуларын да алырға уйлап торам. Ҡурсаҡтарының сәңгелдәктәре, коляскалары, сәй эсергә һауыт-һабалары, аш-һыу әҙерләргә уйынсыҡ кухнялары бар. Ғөмүмән, "өй" уйнай торған уйынсыҡтар әлегә өҫтөнлөклө беҙҙең ғаиләлә.

12 йәшлек малайыбыҙ компьютер уйындарын ярата. Бер мәл айырыуса ныҡ ылығып киткәйне, бар тырышлыҡты һалып, айырып алдыҡ. Ҡышын атаһына өй тирәһендә ярҙамлашҡандан һуң, компьютерҙа төрлө өйрәтеүсе фильмдар ҡарай. Ә хәҙер, көндәр йылынғас, күбергән дуҫтары менән урамда була. Бер яҡтан, әлегә бала ғыналар бит улар, баҫтырышалар, йәшенмәк уйнайҙар, велосипедта йөрөйҙәр. Икенсе яҡтан ҡарағанда, үҫмер ҡорона инеп барыуҙары иҫтәренә төшәләр инде, йәшенмәк кеүек уйындарҙы ҡуйып торалар һәм башҡа төрлө шөғөл табалар.

***Фиданур ҒӘЛИН, Учалы районы:*** Беҙҙең бала саҡта телефон булманы, телевизорҙан әкиәт, "Хайуандар донъяһы" кеүек тапшырыуҙар ҡарап үҫтек. Иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем урамда уйнайбыҙ, әсәй биш-алты тапҡыр саҡырмайынса, өйгә ҡайтмаҫ инек. Хатта ҡышын да ҡайтарып алыуҙары ҡыйын ине беҙҙе.

Минең йәшлек йылдарым, бәләкәй ҡустыларымдың бала сағы башкөллө телефон, компьютер донъяһында үтте. Һәм, әйтергә кәрәк, беҙ әле булһа ошо бойондороҡлоҡтан ҡотола алмайбыҙ. Ләкин беҙҙең балалар яйлап ул ҡоллоҡтан арына бара, тип әйткем килә. Бер быуын (беҙҙең бала саҡ) төрлө уйындар уйнап үҫте, унан һуң виртуаль донъяла буй еткергән балалар быуыны булды, ә хәҙер тағы ла спорт һәм башҡа төрлө хәрәкәтсән уйындарға өҫтөнлөк бирәләр. Мәҫәлән, минең 8 йәшлек ҡыҙым әхирәттәре менән урамдан ҡайтмай уйнайҙар. Уларҙың беҙҙең бала саҡта ҡыҙҙар уйнаған уйындарҙы уйнауы, уйын өсөн шул уҡ япраҡ, сәскә, бысла ярсыҡтарын, төрлө муйынсаҡтарҙы ҡулланыуҙарын ҡарап тороуы ҡыҙыҡлы.

Әлбиттә, халҡыбыҙҙың матур хәрәкәтсән уйындарын уйнаһалар, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине. Ләкин уларҙы өйрәтеүсе кеше юҡ. Беҙ үҙебеҙ ҙә белеп еткермәйбеҙ, белгәнен өйрәтергә лә ваҡыт тапмайбыҙ. Шулай ҙа өйҙә башҡортса өҫтәл уйындарын бергәләп уйнайбыҙ. "Әлләсе", "Бишбармаҡ", "Зирәк", "Бесәй, сәй, айыу, бал, май" уйындары бик ҡыҙыҡлы: башҡортса матур һәм дөрөҫ итеп фекерләргә өйрәтәләр, телмәрҙе үҫтерәләр. Был уйындар балаларға ғына түгел, ололарға ла бик килешле. Тик уларҙы Өфөнән алыҫ районда табып булмай тиерлек, мин үҙем баш ҡалала уҡыған туғаным аша ғына алдырҙым. Ә был уйындар һәр ерҙә һатылырға, Яңы йыл һәм башҡа байрамдарға бүләк итеп бирелергә тейештәр, тигән фекерҙәмен.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Дәүләт Думаһының хеҙмәт, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитеты рәйесе Ярослав Нилов менән осрашты. Осрашыуҙа социаль өлкәне үҫтереү, шул иҫәптән Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү мәсьәләләре тикшерелде, тип хәбәр итә республика етәксеһенең матбуғат хеҙмәте. Башҡортостанда әлеге ваҡытта республиканың социаль яҡлау системаһында 11 меңдән ашыу белгес эшләй.

✓ РФ Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығы начальнигы, эске хеҙмәт генерал-майоры Марат Латипов отставкаға китте. Рәсәй Президенты указы менән ул биләгән вазифаһынан бушатылды. 19 майҙан Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының башлығы отпускыла, ведомство етәксеһе вазифаһын начальниктың беренсе урынбаҫары Эдуард Иҙрисов башҡара.

✓ Рәсәй Президенты указы менән Башҡортостан буйынса эске эштәр министры итеп полиция генерал-майоры Александр Воронежский тәғәйенләнде. 2022 йылдан ул Свердловск өлкәһе буйынса Эске эштәр министрлығының Баш идаралығы начальнигы урынбаҫары булып эшләй. Александр Валерьевич Воронежский 1975 йылдың 4 авгусында Ҡаҙаҡ ССР-нең Алма-Ата өлкәһендә тыуған. 2001 йылдан РФ Эске эштәр министрлығы органдарында эшләй. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының элекке башлығы Александр Прядко мартта отставкаға китте.

✓ Башҡортостанда июндәге байрам көндәренә бәйле пенсия һәм пособиелар түләү графигы үҙгәрҙе. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 6 июнь - Ҡорбан байрамы ял көнө тип иғлан ителде, 12 июндә Рәсәй көнө билдәләнә. Социаль фондтың төбәк бүлексәһенән хәбәр итеүҙәренсә, ҡайһы бер пособиелар һәм пенсиялар тәғәйен көндәрҙән алдан түләнә. 12 июндә кредит ойошмалары аша күсерелгән пенсия иртәрәк - 11 июндә килә, почта аша аҡса ғәҙәти график буйынса - 3 июндән 25-нә тиклем таратыла. Пособие һәм пенсия тураһында өҫтәмә мәғлүмәт алыу өсөн 8-800-100-00-01 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Өфөнән Алтай республикаһының баш ҡалаһына асылған рейстың тәүге пассажирҙары менән бергә Таулы Алтайға барып етте. Андрей Назаров үҙенең телеграм-каналында тәьҫораттары менән уртаҡлашты ."Баш ҡалаларыбыҙ араһында тура рейс Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса асылды. Уҙған йылдың ноябрендә Алтай Республикаһы етәксеһе Андрей Турчактың Башҡортостанға сәфәре барышында ошо турала килешелгәйне", - тип яҙа Андрей Назаров.

**✓ Рәсәй - Украина тыныс һөйләшеүҙәре иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, Украина Рәсәй территорияһына үлемесле дрондар осороуын дауам итә. Улар хатта Мурманск һәм Себер төбәге Иркутск өлкәләренә килеп еткән.**



*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҺӨЙЛӘШЕҮҘӘР ДАУАМ ИТӘ



**Үткән аҙна баштарында донъя кимәлендә әллә ни ҡыҙыу ваҡиғалар күҙәтелмәһә лә, осор аҙағына табан күңелһеҙ хәлдәр тағы ла Украина конфликты фажиғәләрен үҙ башынан үткәреүгә дусар ителгән, күпте күргән Курск менән Белгород өлкәләре тирәләй ҡуйырҙы.**

Белгород өлкәһендә 31 майҙа Мәскәү ваҡыты менән 22 сәғәт 41 минутта һәм 1 июнгә ҡарай төндә Курск өлкәһендә бер-бер артлы күперҙәр шартлатылыу сәбәпле, Климов-Мәскәү пассажирҙар поезы менән Тросна-Калиновка йөк локомотивы ҡыйралып, емереклектәр аҫтында ҡалды. Һуңғыһында машинист һәм уның ике ярҙамсыһы йәрәхәттәр алһа, пассажирҙар поезы ҡорбандары байтаҡ: 7 кеше һәләк булып, 71-е, шул иҫәптән, йәше лә тулмаған сабый йәрәхәтләнгән. РФ Тәфтиш комитеты был шартлатыуҙарҙың террористик акт һөҙөмтәһе булыуын таныны һәм ошо айҡанлы енәйәт эше ҡуҙғатты. MK.RU сайты яҙып сығыуынса, Дәүләт Думаһы депутаты, Һамар университеты профессоры Михаил Матвеев фекеренсә, украин террористарының диверсияһы Зеленский һәм уның Европа спонсорҙары етәкләгән "һуғыш партияһы" менән бәйле. Профессор Матвеев кисекмәҫтән Зеленскийҙы туҡтатыу кәрәклеге, юғиһә, илде "терактттар серияһы" баҫып алыу ихтималлығы хаҡында иҫкәртә. Ул шулай уҡ был акттарҙың Рәсәй-Украина тыныс һөйләшеүҙәре алдынан (2 июнь) ҡылыныуын ике ил араһындағы диалогты өҙөргә маташыу тип тә баһаланы.

Ысынлап та, Украина Ҡораллы көстәрененң бөтөн сиктәрҙе ашатлап, уғата аяуһыҙ ҡыланыуы тап ошоно раҫлай һәм Рәсәй яғын провокацияға этәрергә маташыуы хаҡында һөйләй түгелме? Әсирлеккә төшкән украин боевигы һөйләүенсә, Украина Ҡораллы көстәре командалығы тыныс граждандарҙан үс алырға тырыша: ҡоралһыҙ халыҡҡа ҡаршы көрәш - ул фәҡәт ҡурҡаҡтар, көсһөҙҙәр һәм фашизм идеологияһы менән ағыуланған әҙәм аҡтыҡтарының ҡылығы. Әсир һалдат Украина боевиктарының Часов Ярҙан арыраҡ, хәүефһеҙ урынға эвакуацияланыу ниәтендә ҡулдарына аҡ флаг тотоп сыҡҡан тыныс халыҡты аяуһыҙ утҡа тотоп ҡырыуҙары хаҡында һөйләгән. Ә инде осраҡлы килеп юлыҡҡан айырым кешеләрҙе атып китеү улар өсөн бер ни түгел, ти боевик. РФ Ҡораллы көстәре яугирҙары, билдәле, бындай баш-баштаҡлыҡтарҙы тыныс күҙәтеп тора алмай: 1 июндә Киев тарафтарында тәүлегенә дүрт тапҡыр, шулай уҡ Киев ҡарамағындағы Запорожьела көслө шартлауҙар яңғыраған. Ҡалаларҙа һауа тревогаһы иғлан ителгән.

Рәсәйҙең БМО-лағы даими вәкиле урынбаҫары Дмитрий Полянский белдереүенсә, Украина теләһә ниндәй юлдар менән АҠШ президенты Дональд Трампты, Рәсәй тыныслыҡ теләмәй, тип ышандырырға маташа. Уның самаһыҙ шашыныуҙары хатта ки үҙенекеләрҙең дә һарыуын ҡайната, буғай. Киев мэры, донъяға билдәле боксер Виталий Кличко Зеленскийҙы авторитаризм көсө менән власты ҡулында тотоп ҡалырға маташыуҙа ғәйепләне. Был хаҡта Times гәзите лә яҙып сыҡты. "Был демократия принциптарын һәм институтын хәрби хәрәкәттәр шаршауы артында юҡҡа сығарырға маташыу, - тип белдергән Кличко әлеге баҫма хәбәрсеһенә.- Бер ваҡыт мин, илдә авторитаризм еҫе аңҡый, тип әйткәйнем. Әле иһә ул "һаҫый башланы". Зеленскийға минән ҡотолорға боксерлыҡ карьерам арҡаһында билдәлелегем генә ҡамасаулай, тип тә өҫтәгән Киев мэры. Сәйәси эксперт, Норвегия университеты профессоры Гленн Дизель үҙенең социаль селтәрендә яҙып сығыуынса, Виталий Кличконың белдереүе Украинаға сәйәси бүленеү менән янай һәм Зеленскийҙың власть ресурстары көсһөҙләгөө хаҡында һөйләй, ти. Рәсәй - Украина тыныс һөйләшеүҙәре иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, Украина Рәсәй территорияһына үлемесле дрондар осороуын дауам итә. Улар хатта Мурманск һәм Себер төбәге Иркутск өлкәләренә килеп еткән. Дрондар бер үк сценарий буйынса - йөк машиналарынан (фураларҙан) осоролған. Шундай уҡ фура Амур өлкәһендә лә йөрөгән. Уларҙың бер нисә водителе тотолған.

Рәсәй - Украина һөйләшеүҙәре алдынан Киев Мәскәүгә утты туҡтатыу хаҡында украин һәм инглиз телдәрендә яҙылған меморандумын ебәргәйне. Украина яғы 30 көнгә утты тулыһынса туҡтатыу, хәүефһеҙлек гарантияһы һәм Евросоюз менән НАТО составына инеү хоҡуғы хаҡында һүҙ алып барһа, Мәскәү иһә конфликттың төп сәбәптәрен бөтөрөүҙе маҡсат итеп ҡуя. Беҙҙең ниәт - Киевты үҙ теләге менән Махсус хәрби операцияның бөтөн маҡсаттарын үтәүгә ризалаштырыу һәм кешеләр ғүмерен һаҡлап ҡалыу. 2 июндә ике яҡ һөйләшеүҙәре булып үтте, ул ни бары бер сәғәт тирәһе барҙы. Был юлы яҡтар әсирҙәр менән алмашыуҙың яңы этабы хаҡында ғына түгел, утты ваҡытлыса туҡтатыу тураһында ла һөйләште. Рәсәй делегацияһы етәксеһе Владимир Мединский белдереүенсә, ике яҡтан да меңәрләгән ауыр яраланған, сирле әсирҙәр һәм йәш һалдаттар алмаштырыласаҡ. Артабан Рәсәй вәкиллеге фронт һыҙығының айырым биләмәләрендә һәләк булғандарҙың кәүҙәләрен йыйып алыу өсөн ике-өс көнгә хәрби хәрәкәттәрҙе туҡтатырға тәҡдим итте, сөнки эҫе һауа шарттарында эпидемия таралыу ихтималлығы бар. Һөҙөмтәлә 6 меңләп Украина Ҡораллы көстәре һуғышсылары кәүҙәһе Украинаға тапшырыласаҡ. Һуғыш уты эсенән ҡотҡарылған Рәсәйҙәге украин балаларын ҡайтарыу хаҡында ла һүҙ барҙы.

Һөйләшеүҙәр барышында Украина яғы конфликтты көйләү буйынса Рәсәй меморандумын ҡабул итеп алды. Унда Рәсәй яғы утты туҡтатыуҙың төп шарттары хаҡында белдерә: Донецк һәм Луганск республикалары, Запорожье һәм Херсон өлкәләренән украин хәрби көстәрен сығарыу, Киевҡа сит илдәр ярҙамын, мобилизацияны һәм Рәсәй менән уның тыныс халҡына ҡаршы диверсиялар һәм емергес эшмәкәрлекте, илдә нацизм һәм неонацизмды пропагандалау һәм данлауҙы туҡтатыу һәм башҡалар хаҡында һүҙ бара. Бынан тыш, Украинала хәрби хәл режимын туҡтатырға һәм властар тарафынан президент менән Верховный рада депутаттарын һайлау көнөн билдәләргә, тиелә документта. Әйткәндәй, Украина президенты офисы башлығы Андрей Ермак был документ менән танышҡас, Рәсәйгә ҡаршы яңы санкциялар иғлан итергә саҡырған. Һөйләшеүҙәр барышында ҡатнашҡан Төркиә оборона министры Хакан Фидан фекеренсә, ике яҡлы осрашыу эшлекле шарттарҙа үткән. Өсөнсө осрашыу ай аҙаҡтарына планлаштырыла, сөнки тыныс килешеүгә өлгәшеү хаҡында һөйләшеүҙәр - оҙайлы процесс. Яҡтар ике илдең лидерҙары кимәлендә осрашыуҙы әҙерләргә лә ҡарар иткән.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!*

# УЙЫНСЫҠТАР, УЙЫНДАР...

**Өфөлә "Айда/Әйҙә уйнарға" Бөтә Рәсәй уйынсыҡтар һәм уйындар фестивале программаһы билдәле булды. Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә сараға әүҙем әҙерлек хаҡында Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова һөйләне.**

Фестиваль Өфөлә Совет майҙанында 5 июндән 8-нә тиклем икенсе тапҡыр уҙғарыла. Рәсми асыу 5 июнь 11 сәғәттә планлаштырылған. Фестивалде 8 июндә 17 сәғәттә ябыу планлаштырыла. Йәрминкәнең эше көн һайын иртәнге сәғәт 10-дан 22 сәғәткә тиклем ойоштороласаҡ. Дүрт көн дауамында Совет майҙанында Рәсәй етештереүселәренең уйынсыҡтар күргәҙмәһе, балаларҙың иң яҡшы уйын тәжрибәләрен күрһәтеү, уйынсыҡтарҙың тест-драйвы ойоштороласаҡ.

Фестиваль ҡунаҡтарын һәм ҡатнашыусыларын шулай уҡ тематик конкурстар, лекция һәм оҫталыҡ дәрестәре, спорт турнирҙары, популяр Рәсәй артистарының сығышы көтә. Көн һайын "Союзмультфильм" майҙансығы эшләйәсәк, унда йәнһүрәттәр күрһәтеү, "Хәйерле төн, балалар" телетапшырыуҙары программаһы, шулай уҡ оҫталыҡ дәрестәре һәм 25-тән ашыу тематик майҙансыҡтың эшләүе көтөлә.

Көн һайын республиканың алдынғы театрҙары иң яҡшы балалар спектаклдәрен күрһәтеү ойоштораcаҡ. Беренсе көндә Мәскәүҙең "Дурацкий цЫрк" программаһы менән "Высокие братья" клоун-театры сығыш яһаясаҡ. "Авиапарк", "Космос буяуҙарҙа", "Технологик тәнәфес", "Уйын техникаһы" "Квиздар донъяһы", "Патриот", "Спорт", "Ышаныс киңлеге" тематик майҙансыҡтары һәм биләмәләре эшләйәсәк. Мәҫәлән, спорт биләмәһендә баскетбол, футбол, хоккей, шулай уҡ роллер спорты саралары ойоштороу ҡаралған. "Ышаныс киңлеге" зонаһында социаль хеҙмәткәрҙәрҙең, психологтарҙың консультациялары үтәсәк. Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы "Салют" балалар реабилитация-белем биреү үҙәге менән берлектә өс майҙансыҡ эшен ойоштораcаҡ. Квиздар Башҡортостан Республикаһы Ауыл хужалығы министрлығының колонналар залында үтәсәк.

Республика халҡы өсөн "Смеш band", "Смешарики", "Волшебники двора" музыкаль төркөмдәренең (Мәскәү), Рәсәйҙең халыҡ артисы Дмитрий Маликовтың һәм Бөтә Рәсәй һәм Халыҡ-ара конкурстар лауреаты Әмирхан Батабаевтың (Amirchik) сығышы бүләк буласаҡ. Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн биләмә лә эшләйәсәк һәм унда тактиль уйынсыҡтар тәҡдим ителәсәк, ата-әсәләр өсөн оҫталыҡ дәрестәре үтәсәк.

- Бөгөнгө көнгә етештереүселәрҙән, һөнәрселәрҙән 150 ғариза бирелгән, - тип белдерҙе Әминә Шафиҡова. - Фестиваль бөтә илдән уйынсыҡтар етештереүселәр, уҡытыусылар, ғалимдар, сауҙа ойошмалары, ата-әсәләр берләшмәһе вәкилдәре өсөн интеграцияланған майҙансыҡ буласаҡ. Эшлекле программа сиктәрендә Балалар тауарҙары индустрияһы предприятиелары ассоциацияһының һәм Рәсәйҙең Милли уйынсыҡтар ассоциацияһының ҡатнашыуы планлаштырыла. Пленар ултырыш фестивалдең эшлекле программаһының төп мәле буласаҡ, унда тармаҡты үҫтереү перспективалары тикшереләсәк. Фестивалдең абруйлы ҡунаҡтары иҫәбендә - Балалар тауарҙары индустрияһы предприятиелары Ассоциацияһы президенты Антонина Цицулина.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Радий Хәбиров республиканың социаль хеҙмәткәрҙәренә Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы. Бүләкләү тантанаһы уларҙың 8 июндә билдәләнгән һөнәри байрамы алдынан уҙҙы. Билдәләнеүенсә, республиканың социаль яҡлау системаһында 11 меңдән ашыу хеҙмәткәр эшләй.

✓Башҡортостанда был эш аҙнаһы бер көнгә ҡыҫҡараҡ була, тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостандың Дәүләт хеҙмәт инспекцияһында. Йома, 6 июндә, Ҡорбан байрамы билдәләнә, ул республикала ял көнө булып иҫәпләнә. Йыллыҡ түләүле отпуск алғанда 6 июнь календарь ял көндәре иҫәбенә индерелмәй, йәғни отпуск бер көнгә оҙайтыла. Кесаҙна, 5 июндә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Башҡортостандың Дәүләт хеҙмәт инспекцияһынан әйтеүҙәренсә, Ҡорбан байрамында эшләгән хеҙмәткәрҙәргә (график буйынса, вахта һәм башҡалар) икеләтә эш хаҡы түләнергә тейеш.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы 2025 йылға республика бюджетына үҙгәрештәр индерҙе. Республика бюджетының килеме 0,1 миллиард һумға, 337,6 миллиард һумға тиклем арттырылды. Сығымдар 347,4 миллиард һум (+5,9 миллиард) тәшкил итте. 2026 һәм 2027 йылдарҙың бюджеттары үҙгәрмәй. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, һөҙөмтәлә республика коммуналь инфраструктураны яңыртыуға өҫтәмә аҡса алды. Бюджетҡа үҙгәрештәр "һуғыш балаларына" түләүҙәрҙе, МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә социаль ярҙам күрһәтеү өсөн өҫтәмә ресурстарҙы һәм башҡаларҙы күҙ уңында тота.

✓Башҡортостан Башлығы әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы тураһында положениеға үҙгәрештәр индереү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, комиссияға документтар тапшырыу ваҡыты үҙгәрҙе. Быға тиклем 15 июндән 15 июлгә тиклем генә ҡабул итһәләр, хәҙер 1 июндән 1 авгусҡаса тапшырырға була.

✓Бөрйән районында урман янғыны һүндерелгән. Был хаҡта Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов хәбәр итте. "Уҙған тәүлектә урман янғындары теркәлмәгән, Бөрйән районындағы янғын һүндерелгән, Ауырғазы районында ҡоро үлән янып китеү осрағы теркәлгән", - тип яҙа ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Хәбәр иткәнебеҙсә, йыл башынан республикала бөтәһе 25 гектарҙан ашыу майҙанда 10 урман янғыны һәм 1200 гектарҙан күберәк майҙанда 271 ҡоро үҫемлек янғыны теркәлгән.

✓ Быйыл ғаризалар һаны сираттағы рекордты уҙып китте: 2024 йылда 100 эш булһа, быйыл иһә 130. Ҡатнашыусыларҙың географияһы ла киңәйҙе: Рәсәйҙең 19 төбәгенән һәм сит илдәрҙән 38 нәшриәт.



*ҠЫҪҠАСА*

# ҠОРБАН БАЙРАМЫНА...

**Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә 6 июндә мосолмандарҙың мөһим дини байрамы - Ҡорбан байрамы булыуын иҫкә төшөрҙө.** "Шуны иҫкәртәм: муниципалитет башлыҡтары байрамды ойоштороу өсөн бөтә шарттар булдырырға тейеш. Беренсенән, диниҙәргә ярҙам күрһәтегеҙ, байрам сараларын ойоштороғоҙ, бөтә хеҙмәттәр дежурҙа булһын. Икенсенән, ветеринария хеҙмәттәре менән килешеп, мал салырға махсус урындар булдырығыҙ, санитария талаптарын үтәгеҙ. Өсөнсөнән, биологик ҡалдыҡтарҙы махсус контейнерҙарға йыйып, уларҙы утилләштереүҙе ойоштороғоҙ. Байрам - ҙур эш, шуға көс һалырға кәрәк", - тине ул муниципалитет етәкселәренә. Ветеринария дәүләт комитеты етәксеһе Азат Йыһаншин әйтеүенсә, Ҡорбан байрамына республика буйынса 60 махсус майҙансыҡ әҙерләнә, шул иҫәптән Өфөлә - 2. Алдан 9 мең баш мал салынмаҡсы, шуларҙың 3 меңе Өфөлә. Мал махсус майҙансыҡтарҙа, ветеринария хеҙмәте контроле аҫтында салына, тик теркәлгән малдар ғына булырға тейеш.

✓ **Баймаҡ районының Граф күленә 21 мең 640 суртан селбәрәһе ебәрелде.** "Уҙған йылдың июнендә Балыҡсылыҡ буйынса Федераль агентлыҡ менән килешеү сиктәрендә Йылайыр һыу һаҡлағысына - 4 мең, Быҙаулыҡ һыу һаҡлағысына 20 мең суртан ебәрелде. Ни өсөн тап Граф күле тип һораусылар ҙа юҡ түгел. Бынан биш йыл элек күлдең балығы билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында үлгән. Бөгөнгө көнгә тиклем күлдә йыртҡыс балыҡтар булмаған, был ротан кеүек файҙаһыҙ балыҡтарҙың нығ үрсеүенә килтергән. Белгестәр әйтеүенсә, күлдәге табан балыҡтар хәҙер эре булып китәсәк, ә ҡоротҡос ротандар, гәмәлдә, юҡҡа сығасаҡ, сөнки суртандар уларҙы күпләп ашай", - тип яҙа социаль селтәрҙә ошо эштәрҙе башлап йөрөгән Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров.

✓ **Башҡортостанда "Олотау йыйыны" турниры үткәрелә. Мини-футбол буйынса чемпионатҡа тотош Рәсәйҙән һәм БДБ-нан спорт һөйөүселәр килә.** Рәсәйҙең иң сағыу һәүәҫкәр футбол турнирҙарының береһе 3-6 июлдә Учалы районының Ҡотой ауылында ойоштороla. Тирә-яҡ ауылдарҙан тиҫтәләгән команда төп бүләк - башҡорт тоҡомло сабыш аты өсөн көс һынаша. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ҙур спорт байрамы 2019 йылдан башлап Олотау янында йыл һайын үткәрелә, унда төрлө йәштәге уйынсылар осраша. Бында футболдан тыш, спорт байрамында ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар яндан уҡ ата, былау менән һыйлана ала. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Олотау йыйыны" - ауыл командалары араһында мини-футбол буйынса традицион турнир, уны ойоштороусылар булып Учалы районының Ҡотой ауылы халҡы сығыш яһай. Фестивалдең (2023 йылға тиклем турнир) тарихы 2019 йылдың 19 июленән башлана. Хәҙер ул Башҡортостанды ғына түгел, күрше төбәктәрҙе лә берләштерә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЯҘЫУСЫЛАРҒА - ЯҢЫ БИНА



**Өфөлә "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһе барышында Башҡортостандың төҙөкләндерелгән Яҙыусылар йортон асыу тантанаһы булды.**

Уны ремонтлау эштәре 2024 йылдың сентябрендә республика етәксеһе Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса башланды. "Республикабыҙҙың Яҙыусылар союзы - абруйлы йәмәғәт ойошмаларының береһе. 1934 йылдан ул йөҙләгән һәләтле авторҙы берләштерә, уларҙың әҫәр-ҙәре Башҡортостандың ғына түгел, тотош илдең байлығына әүерелде. Бөгөн беҙҙең яҙыусылар - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеүселәр араһында. Күптәрегеҙ алғы һыҙыҡҡа командировкаға барҙы, яугирҙар менән осрашты, ә ҡайһы берҙәре әле алғы һыҙыҡта. Яҙыусылар союзына "Үҙебеҙҙекеләрҙе ташламайбыҙ" циклы өсөн рәхмәтлемен", - тине Радий Хәбиров.

Башҡортостан Башлығы билдәләүенсә, һуңғы өс йылда республиканың Яҙыусылар союзына ярҙам күрһәтеүгә һәм уны үҫтереүгә 25 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән. Тантанала Радий Хәбиров республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы.

Рәсәй китап союзы президенты Сергей Степашин да республика халҡын иҫтәлекле ваҡиға менән ҡотланы. Радий Хәбиров Сергей Степашин менән Яҙыусылар йортон ҡарап сыҡты, МХО-ға барған яҙыусылар менән аралашты.

Бина янында "Өфө йүкәләре" әҙәби скверы барлыҡҡа килде. Был республиканың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең иҫтәлегенә хөрмәт күрһәтеү билдәһе булып тора. Ул "Өфө йүкәләре" йырының һүҙҙәрен Яҙыусылар йортонда эшләгән ваҡытында кабинеты тәҙрәһе янында үҫкән ағастарға ҡарап ижад иткән.

# ДӨРӨҪ КИТАП УҠЫЙЫҠ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Мәскәү ҡунағы, Рәсәй китап союзы президенты Сергей Степашин Өфөлә үткән Китап байрамында ҡатнашты.**

Тәүҙә Радий Хәбиров һәм Сергей Степашин, башҡа абруйлы ҡунаҡтар китап йәрминкәһе майҙансығын ҡарап сыҡты, ҡатнашыусылар менән аралашты. "АСКИ" китап нәшер итеүселәр ассоциацияһы президенты Константин Чеченев шулай тип билдәләне: "Ошо федераль кимәлдәге күргәҙмәлә 100-ҙән ашыу нәшриәт ҡатнаша. Был күп нәмә тураһында һөйләй. Төрлө төбәктәрҙән милли нәшриәттәрҙең байтаҡ булыуы ҡыуандыра. Башҡортостан иң күп уҡыған төбәк тигән статусын раҫлай". Ул шулай уҡ республика Башлығына совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышында еңеүенең 80 йыллығы уңайынан әҙерләнгән "Еңеү йылъяҙмаһы. 1418 көн һәм төн" китабын бүләк итте.

Быйыл форумға 400-ҙән ашыу ҡатнашыусы килде. Улар араһында Рәсәй төбәктәренән, шулай уҡ Белоруссия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан һәм Ирандан 100-гә яҡын нәшриәт бар ине. "Беҙ Китап байрамында икенсе тапҡыр ҡатнашабыҙ. Үҙебеҙ менән 2,5 тонна китап алып килдек. Башҡортостанда китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу ҙур, шуға быйыл китаптарыбыҙ күберәк. Белорус телендә генә 200 китап. Китап байрамы халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөнә тура килә, шуның өсөн балалар өсөн әҙәбиәт күп", - тине Белоруссияның "Макбел" нәшриәте генераль директоры Дмитрий Макаров.

Башҡортостан "Китап" нәшриәте етәксеһе Эльмира Хәйретдинова һүҙҙәренсә, быйыл китап йәрминкәһендә улар Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына ҡарата донъя күргән яңы баҫмалар менән таныштыра. Дәүләт ярҙамы менән "Китап" илдең алдынғы төбәк нәшриәттәренең береһе булып ҡала һәм быйыл йәрминкәлә 300-гә яҡын китап тәҡдим итә.

Радий Хәбиров һәм абруйлы ҡунаҡтар патриотик зонала маскировка селтәре үргән ирекмәндәр, шулай уҡ уҡ МХО ветерандары һәм Махсус операцияла һәләк булған яугирҙарҙың ғаиләләре менән аралашты. "Дөрөҫ китап - әхлаҡ сығанағы, рухи көс сығанағы. Шуға күрә дөрөҫ китаптар уҡыһаң, ваҡытында уҡыһаң, гармониялы шәхес формалаша тип иҫәпләйем", - тигән фекер еткерҙе Радий Хәбиров.

"Китап байрамы"нда йыл китабын һайланылар. "Урал батыр ерендә йыл китабы" конкурсында Башҡортостан Башлығының махсус призына "Аҡ ҡала" нәшриәт йортоноң (Мәскәү) "Еңеү йылъяҙмаһы 1941-1945" тарихи баҫмаһы лайыҡ булды. Рәсәй китап нәшриәтселәре ассоциацияһы президенты Константин Чеченев етәкселегендәге жюри ете номинацияла еңеүселәрҙе билдәләне. Улар араһында Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең продукцияһы ла бар. "Белеүемсә, жюри көсөргәнешле эшләне, - тине республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев. - Беренсенән, быйыл ғаризалар һаны сираттағы рекордты уҙып китте: 2024 йылда 100 эш булһа, быйыл иһә 130. Ҡатнашыусыларҙың географияһы ла киңәйҙе: Рәсәйҙең 19 төбәгенән һәм сит илдәрҙән 38 нәшриәт. Икенсенән, конкурсҡа бик күп ҡыҙыҡлы, сифатлы нәшер ителгән китаптар тәҡдим ителде, уларҙың араһынан иң яҡшыларын һайлап алырға тура килде".

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# АҒЫУЛАНАЛАР!

Башҡортостанда быйыл ғинуарҙан апрелгә тиклем 54 кеше спиртлы эсемлектәр менән ағыуланып вафат булған, тип хәбәр итә Роспотребнадзорҙың республика идаралығы. Үлем күрһәткесе 100 мең кешегә 1,3 тәшкил иткән. Сағыштырыу өсөн: былтыр ошо осорҙа 59 кешенең ғүмере ҡыйылған. Ағыуланыу осраҡтарының күбеһе Өфөлә (147), Белоретта (30) һәм Стәрлетамаҡта (27) теркәлгән. 2025 йылдың 4 айында 997 химик этиологиялы киҫкен ағыуланыу осрағы күҙәтелгән (этанол, дарыу, наркотик һәм галлюциногендар менән ағыуланыу). Уҙған йыл менән сағыштырғанда наркотиктан ағыуланыу осраҡтары артҡан. Дүрт ай эсендә 65 осраҡ теркәлгән, 30-ы үлем менән тамамланған. Йыл башынан 69 кеше һөрөм газы менән ағыуланған, 50-һе яҡты донъя менән хушлашҡан.Башҡортостанда хәмер эсеүҙе кәметеү буйынса эш беренсе йыл ғына алып барылмай. Әйтәйек, легаль булмаған алкоголь әйләнешенә ҡаршы көрәш, суррогат етештереү нөктәләрен асыҡлау һәм ябыу, шулай уҡ төрлө акциялар, шул иҫәптән "Айыҡ ауыл" конкурсы. Проект сәләмәт йәшәү рәүешен һәм алама ғәҙәттән баш тартыуҙы пропагандалауҙан тыш, социаль әһәмиәтле бурыстарҙы бойомға ашыра: ғаиләләрҙе нығыта, ауыл халҡын берләштерә, ауылдарҙы төҙөкләндерергә ярҙам итә.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы балалар ялы сифаты буйынса ҡыҙыу бәйләнеш ойоштора. Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, халыҡтан шылтыратыуҙар 2 июндән 30-на тиклем 8 (347) 218 09 78 номеры буйынса ҡабул ителә. Осрашып һөйләшеү йәки дәғүәләр төҙөү өсөн ҡулланыусылар министрлыҡҡа мөрәжәғәт итә ала. Адресы: Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 13, 703-сө бүлмә. Билдәле булыуынса, быйыл республикала 1899 балалар лагеры эшләй. Балаларҙың йәйге ялына 3,3 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә.

✓ Башҡортостан райондарында һабантуй ойошторолған көндәрҙә алкоголь һатыу тыйылды, тип иҫкә төшөрҙөләр республиканың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығында. "Был тыйыу дөйөм туҡланыу предприятиеларына - кафеларға һәм ресторандарға ҡағылмай", - тиелә хәбәрҙә. Билдәле булыуынса, республикала тәүге һабан байрамдары 31 майҙа Ауырғазы, Бишбүләк, Йылайыр, Бөрйән, Ҡырмыҫҡалы, Күгәрсен, Стәрлетамаҡ, Ҡалтасы, Яңауыл һәм Шишмә райондарында булды.

✓ Әлшәй районы башлығы Наил Әбелғужин ғаиләһенә килгән ҡайғы менән уртаҡлашты. Ҡустыһы Рафаэль МХО биләмәһендә алғы һыҙыҡта һәләк булған. Билдәле булыуынса, ул штурм төркөмө составында хәрби бурысын үтәгән. Яугирҙы тыуған төйәгендә ерләгәндәр. "Уның ғүмере ҡапыл һәм фажиғәле өҙөлөүе бик аяныслы. Ләкин ҡустымдың һуңғы һулышына тиклем ысын ир-егет, Ватаныбыҙ һағына баҫҡан яугир булып ҡалыуы миңә, атай-әсәйемә, туғандарыма уның менән ғорурланыу хоҡуғын бирә", - тип яҙа Наил Әбелғужин.

✓ Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы сиктәрендә июндә "Сәләмәтлек поездары"ның эш графигын билдәләне. Күсмә медицина комплекстары Әбйәлил, Архангел, Баҡалы, Бүздәк, Бөрйән, Дыуан, Дүртөйлө, Илеш, Ишембай, Ҡалтасы, Кушнаренко, Мәсетле, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ һәм Учалы районларына килә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Сәләмәтлек поездары"ның яңы эш миҙгеле 21 апрелдә башланды. "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы 16 сентябргә тиклем дауам итә.

✓ Башҡортостанда быйыл да Республика ҡымыҙ конкурсы уҙғарыла. Үткәреү көнөн ойоштороу комитеты билдәләйәсәк, тип хәбәр итәләр республика Хөкүмәтенән. Сара йылҡысылыҡ, ҡымыҙ эшләүҙең милли традицияларын һаҡлау, "Башҡорт ҡымыҙы" брендын үҫтереү һәм ҡымыҙ менән дауалауҙы популярлаштырыу маҡсатында ойошторола. Ҡымыҙ етештереүселәр үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлаша аласаҡ. Конкурста шәхси хужалыҡтарҙан тыш, предприятиелар һәм фермерҙар ҡатнаша ала.

**✓ Балаларҙы боронғо башҡорттарҙың йәшәү рәүеше, тарихы, мәҙәниәте менән таныштырыу маҡсатында башҡорт тирмә-музейы булдырылған. Йыш ҡына дәрестәр ошо тирмәлә үтә.**



АФАРИН!

# БЕҘ БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘБЕҘ!

## "Аҡбуҙат"та һәм...

**Өфө районы Шамонино биҫтәһендә "Аҡбуҙат" исемен йөрөткән матур балалар баҡсаһы бар. Бөтә Башҡортостандан йыйылып, бюджет өлкәһендә эшләүсе талантлы, ижади кешеләрҙең балалары йөрөй бында. Башҡорт төркөмдәре лә ошо балаларҙың ата-әсәләренең инициативаһы менән асылды.**



Баҡсала юғары белемле, башҡорт телен яҡшы белгән, һайлаған һөнәренең нескәлектәрен тулыһынса үҙләштергән, ижади ҡарашлы 18 педагог эшләй. Башҡорт төркөмдәре программалар, әсбаптар, дидактик материалдар менән тулыһынса тиерлек тәьмин ителгән. Етмәгәнен уңған тәрбиәселәр үҙ ҡулдары менән эшләй, йырлы-бейеүле, хәрәкәтле, сюжетлы өҫтәл уйындарына атрибуттар, мәҫәлән, тәрбиәселәр һәм ата-әсәләрҙең ҡулдары менән булдырылған. Шулай итеп, баланы үҫтереүсе мөхит йылдан-йыл байый. Баҡсала китапхана ла бар, унда башҡорт телендәге балалар әҙәбиәте тупланған.

Балаларҙы боронғо башҡорттарҙың йәшәү рәүеше, тарихы, мәҙәниәте менән таныштырыу маҡсатында башҡорт тирмә-музейы булдырылған. Йыш ҡына дәрестәр ошо тирмәлә үтә. Физик тәрбиә, музыка буйынса ла башҡорт телендә аңлайышлы, мауыҡтырғыс дәрес алып барырға һәләтле белгестәр бар. Был учреждениела илһөйәрлек рухын үҫтереү буйынса ла эш алып барыла: Шайморатов төркөмдәре булдырылған. "Ҡар һыуына барыу", "Шәжәрә", "Ете ырыу, "Ҡаҙ өмәһе", "Ҡарға бутҡаһы" кеүек фольклор байрамдары үткәреү баҡсала ғәҙәти күренешкә әйләнгән.

Әлбиттә, проблемалар ҙа юҡ түгел, балаларын был баҡсаға йөрөтөргә тырышыусы ата-әсәләр күп, һәр төркөмгә бөгөн уртаса 40-ар бала теркәлгән. Был бик күп һәм бындай тығыҙлыҡ балаларҙы тейешенсә үҫтереүгә ҡамасаулай. Ата-әсәләргә рәхмәт: улар педагогтарҙың ауыр һәм шул уҡ ваҡытта яуаплы хеҙмәтен аңлай һәм һәр саҡ ярҙамға килергә әҙерҙәр.

Башҡорт төркөмдәренә йөрөгән балалар Шамонино һәм Өфө мәктәптәренең башҡорт кластарында уҡыуҙарын дауам итәләр. Был да ҡыуаныслы беҙҙең өсөн.

**Дания ВӘЛИЕВА,**
**"Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы мөдире.**

## ..."Ысыҡҡай"ҙа

**Өфө районының Шамонино биҫтәһендә тағы бер "Ысыҡҡай" тип аталған балалар баҡсаһы һәм уның "Урман әкиәте" тигән филиалы бар.**



Ошо йылдар эсендә беҙҙең балалар баҡсаһы сабыйҙар өсөн уңайлы һәм хәүефһеҙ иң изге йортҡа әйләнде. Беҙҙең төп йүнәлеш - мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы әхлаҡи-патриотик, ил ҡаҙаныштары өсөн ғорурлыҡ, тыуған илгә һөйөү, үҙ халҡының йолаларына хөрмәт рухында тәрбиәләү. Ә бындай тәрбиә, әлбиттә, төрлө саралар, йолалар, осрашыуҙар ярҙамында тормошҡа ашырыла. Мәҫәлән, беҙҙә "Ҡаҙ өмәһе", "Исем ҡушыу", "Өләсәйем һандығы", "Ҡарға бутҡаһы" кеүек фольклор байрамдарын үткәреү матур йолаға әүерелгән.

Балалар баҡсаларында ун төркөм эшләй, уларҙың һәр береһе балаларҙың үҙенсәлекле ихтыяждарын күҙ уңында тотоп ойошторолған. Өс башҡорт төркөмөндә тәрбиә - башҡорт телендә, билингваль төркөмдә башҡорт һәм рус телдәрендә алып барыла. Тағы бер төркөм "Шайморатов төркөмө" тигән ғорур исем йөрөтә. Бындай төрлөлөк балаларға ике телдә аралашырға, төрлө халыҡтарҙың мәҙәниәте менән танышырға ярҙам итә. Эшебеҙҙең һөҙөмтәһенә ата-әсәләрҙең һәм педагогик коллективтың хеҙмәттәшлеге мөһим этәргес бирә. Ата-әсәләр өйҙә туған телде өйрәнергә ярҙам итеү буйынса тәҡдимдәр ала, саралар әҙерләүҙә ҡатнаша, балалары менән берлектәге ижади проекттар ойоштора. Бындай үҙ-ара эш итеү балаларҙың һәр яҡлап үҫешенә һәм ғаилә традицияларын нығытыу өсөн уңайлы мөхит булдырыуға булышлыҡ итә. Балалар баҡсаһының педагогик коллективы баланың үҫеше өсөн тел мөхитенең мөһимлеген яҡшы аңлай һәм шуға күрә балаларҙың башҡорт телен тәбиғи үҙләштереүенә булышлыҡ итеүсе шарттар булдырырға тырыша. Дәрестәр театрлаштырыу элементтарын, ҡул эштәрен, балаларға яңы мәғлүмәтте яҡшыраҡ ҡабул итергә һәм туған телде үҙләштерергә ярҙам иткән мультимедиа уҡытыу сараларын ҡулланыуҙы үҙ эсенә ала.

Балалар баҡсаһы коллективы юғары профессионаллек һәм үҙ эшенә тоғролоҡ менән айырылып тора. Тәрбиәселәр, музыкаль етәкселәр, педагог-психолог, уҡытыусы-логопедтар һәм физик культура буйынса инструктор бергәләшеп, берләшеп эшләй, уларҙың дөйөм тырышлығы менән балаларҙың гармониялы үҫеше өсөн шарттар булдырыла. Төп белем биреү программаһынан тыш, балалар баҡсаһында "Күңелле инглиз теле", "Йәш математик", "Янғырауыҡлы тауыш" һәм "Үксә" театр-музыка түнәрәктәре, "Изостудия" художество студияһы һәм "Футбол", "Шахмат" спорт секциялары ойошторолған. Был дәрестәр һәр балаға үҙенең ижади һәләттәрен үҫтерергә мөмкинлек бирә.

**Миңзәлә ҒАЙНУЛЛИНА,**
**өлкән тәрбиәсе.**

ҠЫҪҠАСА

# КЕМ ТҮЛӘЙ, ТҮЛӘМӘЙ?

**Өфө ҡала округы хакимиәтендә түләүле парковкаларҙы бушлай файҙаланырға хоҡуҡлы граждандар категорияһы тураһында иҫкә төшөрҙөләр.** Бына улар: Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары йәки ветеранды йөрөтөүселәр; хәрби хәрәкәттәр ветерандары; I-III төркөм инвалидтары; инвалид балаларҙың законлы вәкилдәре; күп балалы ғаиләлә ата-әсәләрҙең (уллыҡҡа алыусыларҙың) береһе йәки опекун (попечитель); электромобиль хужаһы. Быйыл июнь айынан Башҡортостандың баш ҡалаһында түләүле парковкалар эшләй башлай. Мостай Кәрим урамынан тыш, улар шулай уҡ Достоевский, Карл Маркс, Киров, Чернышевский, Октябрь революцияһы, Ленин, Пушкин урамдарында булдырыла. Түләүле парковкаларға бәйле һорауҙарҙы +7 (347) 246-68-66 номерына шылтыратып бирергә мөмкин.

✓ **Рәсәйҙең "Белем" йәмғиәте аудиторияны арттырыу һәм аң-белем эшен көсәйтеү маҡсатында Башҡортостанда эшмәкәрлеген киңәйтә.** "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһе барышында илдең төп мәғрифәтселек ойошмаһы менән йәмғиәттең республика бүлексәһе араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. 30 майҙа Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусында асылған Ижтимағи-ағартыу киңлеге презентацияһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Рәсәй китап союзы президенты Сергей Степашин ҡатнашты. Проект 2025 йылдың апрелендә үткән "Белем" йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе Күҙәтеү советы ултырышы йомғаҡтары буйынса республика етәксеһе ҡушыуы буйынса тормошҡа ашырылған. Киңлекте булдырыуҙың маҡсаты - Рәсәй "Белем" һәм Рус география йәмғиәттәре, Рәсәй хәрби-тарихи һәм Рәсәй тарихи йәмғиәттәре төбәк бүлексәләренең берлектәге мәғрифәтселек инициативаларын тормошҡа ашырыуға булышлыҡ итеү.

✓ **"Яндекс Һауа торошо" сервисы метеорологтары хәбәр итеүенсә, тотош Рәсәйҙә йәйҙең ғәҙәттән тыш эҫе һәм ҡоро булыуы көтөлә.** Синоптиктар фаразлауынса, илдә 2025 йылдың йәй айҙарында ғәҙәттәгенән 2-3 градусҡа эҫерәк булмаҡсы. Был миллионлы мегаполистарға, шул иҫәптән Өфөгә лә ҡағыла. "Уҙған йыл менән сағыштырғанда, бигерәк тә Алыҫ Көнсығышта: Чукоткала, Хабаровск крайында, Магадан өлкәһендә, Камчаткала, Сахалинда һәм Якутстандың көньяҡ-көнсығышында эҫелек көтөлә. Шулай уҡ, 2024 йыл менән сағыштырғанда, Көньяҡ һәм Урта Уралда, Ямал-Ненец һәм Ненец автономиялы округтарында эҫе һауа торошо фаразлана", - тиелә прогнозда. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр йәй Башҡортостанда ямғырлы булды. Һуңғы 30 йылда 2024 йылдың июле республикабыҙҙа ямғырҙар буйынса рекорд ҡуйҙы, тип белдерҙеләр Башгидрометта. Синоптиктар мәғлүмәттәре буйынса, бер айҙа 2,5 айлыҡ норма (251 процент) яуған. Яуым-төшөм күләме 142 миллиметр тәшкил иткән.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ҡорбан ғәйете айҡанлы Өфөлә 23 мәсеттә байрам саралары үтә. Бынан тыш, ҡорбан салыу өсөн билдәләнгән "Карауан" сауҙа үҙәге алдындағы (Пригородная урамы, 55) һәм Төньяҡ автовокзал биләмәһендәге (Кемерово урамы, 82) майҙансыҡтар 8:00 сәғәттән 20:00 сәғәткә тиклем эшләй. Шулай уҡ 8 июндә "Башҡортостан" лайфстайл үҙәге алдындағы майҙансыҡта "Ҡорбан Хәләл Фесы" уҙғарыла. Ҡатнашыусылар өсөн концерт программаһы, уйындар, йәрминкә һәм бушлай былау менән һыйлау ҡаралған.

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы июнь байрамдарында медицина учреждениеларының эш графигын билдәләне. 13 һәм 14 июндә поликлиникалар шәмбе графигы буйынса эшләй: иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 6-ға тиклем. Ашығыс стоматологик ярҙам 6 июндән 15-нә тиклем иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 6-ға тиклем күрһәтелә. 4-се һәм 5-се балалар поликлиникаларының, 17-се ҡала балалар клиник дауаханаһының травма пункттары штат режимында эшләйәсәк.

✓Башҡортостанда һыу инеү миҙгелендә 63 муниципаль берәмек биләмәһендә 192 рәсми пляж асыла. Был 2024 йылға ҡарағанда 18 пляжға күберәк, тип хәбәр итте республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Кирилл Первов. Пляж миҙгеле рәсми рәүештә 1 июндән башлана. Муниципалитеттарҙа ошо проблемалы мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдары видеобәйләнеш аша кәңәшмәлә тикшерелде. Республиканың һыу объекттарында кешеләрҙең һәләк булыуын иҫкәртеү мәсьәләһен тикшереүгә, атап әйткәндә, мәктәп каникулдары ваҡытында балалар хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә айырыуса иғтибар бүленде.

✓Башҡортостан юлдарында "Ҡаршы һыҙат" иҫкәртеү операцияһы үткәрелде, тип белдерҙе дәүләт автоинспекцияһы. Юл-транспорт ваҡиғаларын анализлауға ҡарағанда, республикала һәр дүртенсе водитель ҡаршы һыҙатҡа сығыуға бәйле фажиғәләрҙә һәләк булған. Тап ошондай ҡағиҙә боҙоу иң ауыр әҙемтәләргә килтерә, водителдәр һәм пассажирҙар ныҡ имгәнә, ҡайһы берҙә үлем осраҡтары теркәлә. Иҫкәртеү өсөн дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре аҙна буйына хәүефле юл участкаларында эшләне.

✓Башҡортостандан хәрби хирург Рөстәм Минһажев II дәрәжә "Ватан алдында күрһәткән хеҙмәттәре өсөн" ордены миҙалына лайыҡ булды. Указға Владимир Путин ҡул ҡуйған. Был МХО биләмәһендә яраланған һәм сирләгән яугирҙарҙы дауалаған өсөн юғары награда булып тора. Беренсе, тыныс тормоштағы награда уға фронтта тапшырыла. Өфөлә ковид-госпиталь ойоштарған өсөн яҡташыбыҙ Лука Крымский миҙалы менән бүләкләнә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һаҡау кәкүк**
**(Глухая кукушка)**



Кәкүккә оҡшаған, бары тик саҡ ҡына вағыраҡ, кәүҙәһенең аҫҡы өлөшөндәге буй-буй һыҙыҡтарының төҫө ҡарараҡ. Ҡанатының бөгөлгән ерендә ап-аҡ ҡауырһындары бар. Ата ҡоштоң тауышы тоноҡ, ғәҙәттә, өс ижектән тора: "ду-ду-ду", ә инә ҡош ҡырҡыу итеп ҡысҡыра.

Урал алдынан алып Курил утрауҙарына тиклем бейек ағастар үҫкән урмандарҙа йәшәй, урманлы далаларҙа һирәк осрай. Ябай кәкүктән айырмалы рәүештә, урманлы ергә ныҡ бәйләнгән, асыҡ урындарҙы үҙ итмәй. В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин (1988 й.) яҙыуынса, һаҡау кәкүк Кама йылғаһы үҙәндәрендә үҫкән урмандарҙа, Өфө платоһын алғанда иһә Ҡариҙел ҡасабаһы һәм Ҡорош ауылы тирәһендә осраған. Көньяҡ Уралда ул көньяҡтан Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығына тиклемге территорияла ғәҙәти ҡош. Июнь айҙарында хатта Шүлгәнташ мәмерйәһе тирәһендәге ҡатнаш урмандарҙа ла күренә. Беҙ иһә һаҡау кәкүкте Учалы районының Өргөн күлендә, Шишмә районының Ҡараяҡуп ауылы тирәһендә, Өфө районының Нуғай ҡасабаһында осраттыҡ. Ырымбур өлкәһендә осоп барышлай теркәлгән. Унда оя ҡороп йәшәүе билдәле түгел.

Ябай кәкүккән һуңыраҡ ҡайта. Уға оҡшап, йомортҡаһын сит ояға һала. Йомортҡалары аҡ төҫтә, һоро, һоро-ҡыҙыл йәки ҡара таптары бар. инкубация осоро - 11-12 көн. Һаҡау кәкүк балалары яланғас була, ояла 2-2,5 аҙна йәшәй, тағы ла 2 аҙна буйына "тәрбиәсе" ата-инәһе уны ашата. Ябай кәкүк балаларынан суҡыштарының ҡыҙғылт-һары булыуы менән айырыла, тәүгеләренең суҡышы - ҡыҙыл. Һаҡау кәкүк балаһының тел осо - аҡһылыраҡ.

Июль уртаһы - аҙағында кәкүк саҡырыуҙан туҡтай. Оя ҡороп йәшәгән еренән августа осоп китә. Индонезия, Яңы Гвинея, Австралияла ҡышлай. Көньяҡ Уралдың бөтөн территорияһында ла ябай ҡош иҫәпләнә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары"**
**китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ҺӘР ҒАИЛӘЛӘ "КОММУНИЗМ" БУЛДЫРАЙЫҠ,

## йәки Барына шөкөр итеп йәшәйек!



**Ҡасандыр "коммунизм - яҡты киләсәк", тип ана шул "бәхетле тормош"то илебеҙ, хатта бөтә донъя күләмендә төҙөү хаҡында хыялланып йәшәгән дәүер әле булһа онотолмаған. "Һәр кемдән - хәленән килгәнсә, һәр кемгә - кәрәгенсә", тигән принцип менән йәшәр ваҡыттар килеренә күптәребеҙ әллә ни ышанып етмәһәк тә, ни өсөндөр, ана шул мәлдәрҙе еткерәбеҙ тип тырыштыҡ бит инде.**

Шул саҡта бына ошо "иң юғары" булған йәмғиәти-иҡдисади ҡоролошто яҡынса түбәндәгесә күҙ алдына килтерә инек. Илдә бөтә кеше үҙаңлы, барыһы ла эшләй, тырыша. "Бер кеше - бөтә кеше өсөн, бөтә кеше - бер кеше өсөн" тигән принцип хөкөм һөрә. Аҙыҡ-түлек һәм башҡа тауарҙарға һис бер ҡытлыҡ юҡ. Аҡса тигән төшөнсәне берәү ҙә белмәй, магазиндарҙа бөтә нәмә - бушлай! Кеше бына шундай магазинға инә лә, үҙенә һәм ғаиләһенә күпме кәрәк, шуныса ғына нәмә алып сыға. Артығы уға кәрәкмәй, сөнки ул иртәгеһе көн өсөн борсолмай. Иртәгә лә, артабан да шулай буласаҡ... Бөтә ерҙә тыныслыҡ, татыулыҡ. Кеше - кешегә дуҫ, иптәш һәм туған... Бына шундай яҡты тормошто үҙебеҙ күрә алмаһаҡ та, бәлки, балаларыбыҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ күрер, тигән өмөтөбөҙ ҙә булманы түгел... Тик шул саҡтағы ҡайһы бер олораҡ быуын вәкилдәре - әле граждандар һуғышы, колхозлашыу мәлдәрен, Бөйөк Ватан һуғышын башынан үткәргән ағайҙар: "Әллә инде, балалар, ундай нәмәнең булыуы мөмкин түгелдер ул. Әҙәм балаһы һәр саҡ һәм бөтә нәмәне тик үҙенә тартырға ғына әҙер тора бит ул. Магазинға ингән кеше тауарҙы үҙенә кәрәгенсә генә күләмдә алып сығыуҙары - ай-һай, икеле бит..." - ти инеләр. Беҙ - пионерҙар, комсомолецтар, эстән генә икеләнеүебеҙгә лә ҡарамаҫтан, "Ул саҡта бөтә кеше "сознательный" буласаҡ бит", тип, ололар менән хатта бәхәскә лә ингеләй торғайныҡ. Уҡыу йорттарында "Научный коммунизм" тигән предмет уҡытҡан фән кандидаттары, хатта докторҙары булған фәйләсүфтар ҙа "марксизм-ленинизм"дың бына шундай тәғлимәтен беҙҙең күңелгә һеңдерәләр ине. Быға "мөкиббән" бирелеп, йәне-тәне менән тигәндәй ышанған кешеләр ҙә булды.

***Шул хаҡта уйҙарға бирелә башлаһам, мин, ни өсөндөр, ана шул "коммунизм" тигән нәмәне иң башта бер ғаилә эсендә төҙөргә кәрәктер, тип уйлай торғайным.*** Татыу, эшсән булған һәр ғаиләлә, ысынлап та, шуға оҡшашыраҡ мөхиттең булыуы мөмкин бит. Миҫал итеп, тулы бер ғаиләне күҙ алдына килтерәйек. Ғаилә башлығы - ир кеше, көн дә үҙенең яратҡан кәсебе менән булышып, ғаиләһе өсөн аҡса таба. Уны быға һис кем мәжбүрләмәй. Иртә менән тороп, эшкә китә. Кәрәк икән - эшендә оҙаҡлауы ла мөмкин, ә ҡайһы саҡтарҙа - ял көндәрендә лә эшләй ул. Үҙенең яратҡан эшенән ниндәйҙер эске ҡәнәғәтлек кисерә. Ә өйөндә уның хәләл ефете - яратҡан ҡатыны тәмле аштар бешереп, уның эштән ҡайтыуын көтә. Ире эштән һуң йыуынып, кейенеп алһын өсөн, алмаш кейемдәр ҙә йыуылған, үтекләнгән. Балалары ла ҡараулы. Уларҙың дәрестәре әҙерләнгән, эштән ҡайтҡан атаһын һәр кемеһе ни менәндер шатландырырға әҙерләнә. "Атай, бөгөн мин математиканан контроль эште "бишле"гә яҙҙым", ти өлкән улы. Икенсеһе: "Ярышта мәктәп беренселегендә йүгереү буйынса беренсе урынды алдым",- тип һөйөнсөләргә ашыға. Ә балалар баҡсаһына йөрөгән төпсөк ҡыҙы уға яңы өйрәнгән шиғырын ятлап күрһәтә... "Атаһы, яңғыҙыңа ғаиләбеҙҙе ҡарап тороу ауырҙыр бит. Әллә үҙем дә берәй эшкә төшәйеме икән, тип торам", - ти хужабикә иренең тәрилкәһенә аш өҫтәй-өҫтәй. "Юҡ, әсәһе, ғаилә аҫырау - ир кешенең бурысы. Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм шулай ҡушҡан. Һинең йортобоҙҙоң йәме, йылыһы булып, балаларҙы бағып өйҙә ултырыуың хәйерлерәк", - ти хужа...

Хыялланыуҙың зыяны юҡ, тиҙәр бит әле урыҫтар. Бындай хыял - утопиямы, әллә тормошта ошондай ғаиләнең булыуы мөмкинме? Минеңсә, тап бына ошолай итеп йәшәгәндә, ысынлап та, һәр бер ғаилә эсендә бәләкәй генә "коммунизм" төҙөргә булыр ине. Ата-әсәһенән үрнәк алып, балалары ла ана шундай рухта тәрбиәләнеп үҫһә, үҙҙәренең тормош юлында тап үҙҙәре кеүек кешеләргә осрап, улар менән ғаилә ҡорһа, илебеҙ тулы "коммунистик" ғаиләләр булыр ине...

Кемдер (ә, бәлки, күпселек) бындай ысынбарлыҡтың булыуын шунда уҡ инҡар итергә тотонор. Уларҙың һүҙҙәрендә лә хаҡлыҡ булыр, тип уйлайым, сөнки, күп кенә әҙәм балаһының ҡулы "үҙенә ҡарай бөгөлгән" була шул. Ғаиләлә ир менән ҡатын араһына "шына" ҡаға торған "мин-мин"лек, бала-сағаларҙың йыш ҡына ата-әсәләрен һанламауы, икенсе кешеләрҙең (хатта яҡын туғандарының да) ғаилә эшенә ҡыҫылыуы, бәғзе сит ғаиләләрҙән насар өлгөләр алыу һымаҡ кире күренештәр бер ғаилә эсендә әлеге әйткән "коммунистик йәмғиәт"те төҙөргә ирек бирмәй. Ғаилә башлығының, йә иһә уның хәләл ефетенең "йәшел йылан" менән дуҫ булыуы хаҡында өйтеп тораһы ла юҡ...

Ҡасандыр "Марксизм-ленинизм философияһы" фәнен өйрәнгәндә Сен-Симон, Фурье һымаҡ утопик социалистарҙы тәнҡит утына тота торғайныҡ, ә хәҙер килеп "емерелмәҫ" коммунистик идеяларыбыҙҙың да бөтөнләйгә "буш ҡыуыҡ" булып сыҡҡанлығына инандыҡ. Ә мин шулай ҙа, ҡәҙерле яҡташтар, бына ошо мәсьәләгә оптимизм менән ҡарау яғындамын. Коммунизмдың "Кеше кешегә дуҫ, иптәш һәм туған" тигән принцибын, минеңсә, бөтә ил күләмендә түгел, әйтәйек, бер ғаилә эсендә урынлаштырыу - мөмкин булмаған нәмә түгел. Минең инаныуымса, баштараҡ бер аҙ фәлсәфәгә бирелеп, миҫал итеп килтергән һымаҡ өлгөлө ғаилә төҙөргә була. Тирә-яғыбыҙға яҡшылабыраҡ бағып ҡараһаҡ, башҡаларға өлгө булырҙай, татыуҙарҙан-татыу шундай ғаиләләр ҙә бар бит. Онотҡанда бер булып алған бәләкәй генә бәхәстәрҙән һуң, һәр кемеһе үҙенең "дөрөҫ булмағанын" танып, бер-береһенән ғәфү үтенеп, артабан да матур йәшәгән кешеләрҙе күргәнем бар. Тап ана шундай кешеләр хәҙер ысын коммунизмда йәшәй, тип һанағанда ла булалыр...

Инде онотолоп та барған "коммунизм" тигән терминды ошо мәҡәләмдә ҡулланыуымды, әлбиттә, һүҙмәһүҙ ҡабул итергә кәрәкмәй. Бер аҙ уңайыраҡ, күптәребеҙ өсөн таныш булған өсөн генә ҡулландым был атаманы. Ҡасандыр яҡташтарыбыҙ менән уларҙың иманы араһына кәртә ҡуйыусы, динебеҙҙе бөтөнләйгә инҡар итеүсе коммунизм хаҡында һүҙ бармай, әлбиттә.

"Эй, бына бит, ҡасандыр хыялланған коммунизм! Йәшәйем тиһәң - өйөң, ашайым тиһәң - ашарыңа бар, ни кейәйем, тигән проблема ла юҡ. Тик бына ғүмер генә үтеп киткән шул..." - тигән бер пенсионер бабайҙы хәтерләйем (мәрхүм инде ул). Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ысынлап та, хәҙерге көндә халҡыбыҙҙың бына ошо категорияһының йәшәү кимәле тап ана шул бабай әйткәнсә лә баһа! Пенсионерҙар хәҙер, ысынлап та, һәр яҡлап иң тәьмин ителгән кешеләр. Иң минималь пенсия алыусы ла, әрәм-шәрәм итмәй тотонһа, аҡсаһын киләһе айға тиклем һуҙып еткерә ала. Сыуаштар әйтмешләй, "сахал да читәть, нумай да петәть", йәғни, аҙ ҙа етә, күп тә бөтә. Булғаны өсөн Аллаһ Тәғәләгә шөкөр итеп йәшәһәң, ана шунан да яҡшы нәмә юҡ. Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләмдең "Әҙәм балаһына бер тау алтын бирһәң, ул икенсеһен теләр, ә икенсен бирһәң - өсөнсөһөн теләр. Ысынында, әҙәм балаһын тик ер генә туйҙыра", тип әйткән хәҙисе бар.

Бына ошо фекерләүҙәрем менән нимә әйтергә теләгәйнем, ҡәҙерле туғандар: йәшәү ҡәҙерен белеп йәшәгәндәр өсөн бер ғаилә эсендә бәхетле тормош ҡороу - фантазия һәм утопия түгел. Һәр кеше үҙ өйөндә "коммунизм" төҙөп йәшәй ала. Барына ҡәнәғәт булып йәшәй белеү ҙә - үҙе бер бәхет. Кемгәлер йәшәү өсөн айына ун биш-егерме мең етһә, ә кемгәлер - йөҙ мендең дә етмәүе мөмкин. Тәүгеләре, йәғни аҙ нәмәне етештереп, Аллаһы Тәғәләгә ана шуның өсөн шөкөр итеп йәшәгәндәр, шулай ҙа, күпкә бәхетлерәк.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ ***Автор фекеренсә, ҡәлғә батша Федор Иоаннович батшалыҡ иткән осорҙа, йәғни 1584 менән 1598 йылдар араһында, төҙөлгән. Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыу урыны итеп "Мең улысының башҡорт ере" территорияһы һайланған.***



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**А.П. Безак**

**(1860 - 1864 йылдарҙа губернатор булған)**

Ул Безакҡа бына нимә ти: "Һеҙ, Александр Павлович, миңә башҡорттарға яңы положение индереүҙе йөкмәттегеҙ, әммә һәләтле һәм тәжрибәле кешеләремде алаһығыҙ; мин кем менән эшләргә тейешмен һуң? Черновты ҡыуыу өсөн ул бер ни ҙә ҡылмаған бит". "Мин бөтөнләйгә башҡа бер сәбәптәр арҡаһында уның менән хеҙмәт итергә теләмәйем!" - тип әйтә Безак. Бер аҙ бәхәсләшкәндән һуң Безак икенсе бер ҡарарға килә: "Мин уны берәй икенсе урында кантон начальниги итеп ҡалдырырға ризамын, тик Ырымбурҙа түгел".

Богуславский быға ҡаршы булыуын белдерә: "Ул башҡа урында түгел, тап бында, минең эргәмдә кәрәк; ул саҡта мин яңы эштең нисек барышын ваҡытында белеп торасаҡмын; бигерәк тә күсепһәсеп йөрөүсе башҡорттар менән ауырлыҡтар буласаҡ, улар үҙҙәренең элекке йәшәү шарттарын һаҡлау яғында нығ тора". Ахырҙа Безак мине Ырымбурҙа ҡалдырыу менән ризалаша һәм Богуславскийҙан уға ярҙамсы итеп тәғәйенләнәсәк кенәз Трубецкой менән ҡәнәғәт булыу-булмауы хаҡында һорай.

Богуславский ошолар хаҡында һөйләр өсөн үҙе минең өйөмә килде. Кенәз Трубецкойҙы тиҙ генә раҫламаныҡлар. Милютин, уның тәжрибәһеҙлегенә һәм ошондай вазифаға әҙер түгел икәненә һылтанып, ризалыҡ бирмәй. Безак үтенесен яңынан ҡабатлай, атай булараҡ, ярат-ҡан ҡыҙынан айырылыуы арҡаһында ҡайғы-һағышҡа батасағы хаҡында батша ғали йәнәптәренә белдереүҙе һорай.

Ахырҙа, уның мөрәжәғәте ҡәнәғәтләндерелә. Кенәз Трубецкой 2 мең һум жалованиеы менән ярҙамсы вазифаһына тәғәйенләнә, ә мин беренсе Ырымбур кантоны башҡорттары начальниги итеп ҡуйылдым.

Июнь урталарынан урындарҙа ауыл йәмғиәттәре һәм олоҫтар ойоштороу, олоҫ судтарына һәм олоҫ идараларына барса вазифалы кешеләрҙе йәмғиәттәрҙең үҙҙәренән һайлатыу эштәрен башлап ебәрҙем. Был эште мин ике ай эсендә тамамланым. Олоҫтар ҙур итеп төҙөлдө, һәр береһендә 3 меңдән 5 меңгә тиклем кеше йәшәне.

Положениены индереүҙең тәүге осорonда эштәрҙе ниндәй тәртиптә башҡарыуым менән танышыр өсөн минә Верхнеуральск өйәҙенән кантон начальнигы, подполковник Броссе һәм Бәләбәй өйәҙенән капитан Редин килде, ә 1864 йылда Безак тарафынан барса кантондарға яңы положениеның башҡорттарҙа дөрөҫ эшләүен тикшереү маҡсатында чиновниктар ебәрелә. Безак чиновниктарҙан Плачковский, Рогали-Левицкий, Шульгин һәм Покровскийға минең кантонда олоҫтарҙы, суд һәм ауыл йәмғиәттәрен тикшереү бурысын ҡуя. Мин уларға урында Ырымбур өйәҙендә индерелгәндәрҙең барыһын да күрһәттем, һәм ошондай мәғлүмәттәр запасы менән улар башҡа өйәҙҙәрҙе лә тикшерергә китте.

Безактан минә уның шәхси рәхмәте белдерелде, ә һуңынан бик юғары наградаға - 2-се дәрәжә изге Анна орденына лайыҡ булдым. Минең үҙемә эшкә булышлыҡ иткәне өсөн отставкалағы подполковник Дәүләтшиндың бүләкләү мәсьәләһен хәл итеүҙе йөкмәттеләр, әммә былдай хәл булманы, сөнки ул үҙе йәшәгән Иманғол ауылында бер тапҡыр ғына сходта ҡатнашты. Дәүләтшин полковник чинын алырға теләй ине, сөнки шулай булғанда уның балалары дворяндар иҫәбенә инә ала, ә уға 2-се дәрәжә Станислав орденын бирҙеләр.

Яңы положениены индереү менән, полковник Богуславский башҡорттар менән идара итеүсе урынында ҡалырға теләмәй, сөнки килә-сәктә бынан үҙе өсөн бер фәтүә лә тапмай, шуға күрә 1864 йылдың яҙында Ырымбурҙан отпускаға китә һәм бында кире ҡайтмай. Артабан ул Кавказ армияһы штабы начальнигы ярҙамсыһы вазифаһын биләй, һуңынан казак ғәскәрҙәренең баш идаралығы начальнигы була, инфантериянан генерал дәрәжәһенә өлгәшә һәм хәрби совет ағзаһы итеп тәғәйенләнә; 1896 йылда вафат була. Уның хөрмәтенә Ырымбур казак ғәскәрҙәренең Угольная станицаһына Богуславский исеме бирелә.

Башҡорттар менән ваҡытлыса идара итеүсе статский советник Плачковский, ошо вазифа бөтөрөлгәс, генерал-губернатор ҡарамағындағы 5-се класлы айырым бурыстар үтәүсе чиновник урынында ҡалырға теләмәй (был вазифаны ул элегерәк биләгән) һәм Киевҡа генерал-губернатор итеп тәғәйенләнгән Безак янына китә, һуңынан Подольскийҙа вице-губернатор була, льготалы хоҡуғына таянып, 3 мең һум килем килтерә алған, конфискацияланған поляк имениеһын үҙенә ала. Безак вафат булғас, хәрби хеҙмәттән отставкаға сыға.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

### Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттар араһында һауыт тип аталған һуҡма тоҙаҡ киң таралыу таба. Ҡуян, төлкө тотоу өсөн ҙур һауыттар ҡулланыла, ә аҫ, шәшке, йәтсә өсөн бәләкәйҙәре ҡулланыла. Был тоҙаҡтың ҡоролошо ҡатмарлы була. Ул эсе соҡоп алынған һауыт көпсәктән (а) тора. Уның эсенә ике ептән үрелгән бау урынлаштырыла. Бәләкәй һауыттарҙа ул киндерҙән үрелә, ә ҙурҙарында - тарамыштан. Был үрелгән, ҡалаҡтарҙы (б) тарттырған бау һуҡма уҡ (д) өсөн пружина булып хеҙмәт итә. Цилиндрҙың урталығынан алғы яҡта талдан тар ғына дуға - бөгөл ян (в), ә арттан атҡыс ағас (г) урынлаштырыла. Бәләкәй йәнлектәргә әҙерләнгән тоҙаҡта дуға уҡ килеп тейгәс, йәнлек уның тишегенә барып төшмәһен өсөн һалабаш менән уратыла. Ҙур һауыттың бәләкәйенән икенсе айырмаһы шунан ғибәрәт: беренсеһендә уҡҡа ябай тимер сөйҙәр беркетелә, икенсеһендә - тимер тештәр (е) ҡуйыла. Һауыт ағас тәте (ж), төйәк ярҙамында урынлаштырыла. Тәте ат ялы (з) ярҙамында дуғаның башында нығытылған сыбыҡ (и) менән тоташтырыла **(һүрәт)**.




Был тоҙаҡтың ҡоролошо ҡатмарлы була. Ул эсе соҡоп алынған һауыт көпсәктән (а) тора. Уның эсенә ике ептән үрелгән бау урынлаштырыла. Бәләкәй һауыттарҙа ул киндерҙән үрелә, ә ҙурҙарында - тарамыштан. Был үрелгән, ҡалаҡтарҙы (б) тарттырған бау һуҡма уҡ (д) өсөн пружина булып хеҙмәт итә. Цилиндрҙың урталығынан алғы яҡта талдан тар ғына дуға - бөгөл ян (в), ә арттан атҡыс ағас (г) урынлаштырыла. Бәләкәй йәнлектәргә әҙерләнгән тоҙаҡта дуға уҡ килеп тейгәс, йәнлек уның тишегенә барып төшмәһен өсөн һалабаш менән уратыла. Ҙур һауыттың бәләкәйенән икенсе айырмаһы шунан ғибәрәт: беренсеһендә уҡҡа ябай тимер сөйҙәр беркетелә, икенсеһендә - тимер тештәр (е) ҡуйыла. Һауыт ағас тәте (ж), төйәк ярҙамында урынлаштырыла. Тәте ат ялы (з) ярҙамында дуғаның башында нығытылған сыбыҡ (и) менән тоташтырыла **(һүрәт)**.



**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# АҪАБАЛЫҠ ҺӘР САҠ ҺАҠЛАНҒАН

## Өфө ҡәлғәһе тарихы буйынса тағы бер сығанаҡ



XIX быуаттың 20-се йылдарында батша хөкүмәте феодаль системаны кризистан сығарыу юлын эҙләп, империяның көнсығыш губерналарын, шул иҫәптән Башҡортостанды ла, колониялаштырыуҙың варианттарын уйлай башлай. Ул саҡта тарихи Башҡортостан территорияһы Ырымбур, Пермь, Вятка һәм Һарытау губерналары составына ингән була. Был яҡҡа халыҡтар күсеп килеүен тәртипкә һалыу өсөн батша властары башҡорт ерҙәренең хоҡуҡи статусы менән бәйле мәсьәләләргә өйрәнергә ҡарар итә.

Шуның менән бәйле, Ырымбур губернаһының коллегия кәңәшсеһе Степан Мертваго Ырымбур межа контораһы документтары нигеҙендә материалдар туплай. Йыйылған мәғлүмәттәрҙе Мертваго "Башҡорттарҙың 1562 йылдан хәҙерге көнгә тиклем Ырымбур губернаһындағы ерҙәргә, ул ерҙәрҙәге бөтә нәмәгә һәм хоҡуҡтарға эйә булыуы тураһында ҡыҫҡаса тарихи күсермә" тип атай. Был эшен автор Сенаттың межа департаментына биргән, күрәһең, сөнки хәҙер ул Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй Дәүләт Тарихи архивы фондында һаҡлана.

Автор, башҡорттар Рус дәүләтенә "ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә" үҙҙәре теләп ҡушыла, бынын өсөн батша Иван Грозный башҡорттарға ергә мәңге хужа булыу хоҡуғы биреләүе тураһында грамота ебәрә, тип билдәләй. Дөйөм батша грамотаһынан тыш, һәр ырыуға батша "һаҡлау грамоталары" тапшыра. Һуңғы документтар барлыҡҡа килеүенең асылын С. Мертваго "...ундағы башҡорттарҙы үҙ биләмәләрендә бер кем дә ҡыҫырыҡламаһын өсөн" дәүләт яғынан гарантия булған тип аңлата. Ошонан һуң батша властары, башҡорттар дәүләт файҙаһына яһаҡ түләгәс, уларҙың ергә хоҡуҡтарын раҫлау сифатында "һаҡлау грамоталары"нан күсермәләр биргән. Мертваго, грамоталарҙың үҙенсәлекле текстары һәм уларҙан күсермәләр башҡорттарҙа һаҡланып ҡалған, тип раҫлай. Был эштә Өфө ҡалаһының барлыҡҡа килеү ваҡыты һәм урыны тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар. Автор ҡалаға ҡасан нигеҙ һалыныуының аныҡ ҡына датаһын әйтмәһә лә, ҡәлғә барлыҡҡа килеүенең яҡынса осорон күрһәтә. Уның фекеренсә, ҡәлғә батша Федор Иоаннович батшалыҡ иткән осорҙа, йәғни 1584 менән 1598 йылдар араһында, төҙөлгән. Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыу урыны итеп "Мең улысының башҡорт ере" территорияһы һайланған.

**Ирек АҠМАНОВ, тарих фәндәре докторы, профессор.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Уҡытыусы һөнәрен алайыҡ. Көрәк тотоп, физик эш менән шөғөлләнмәгәс, улар ҙа буш менән буламы ни? Уҡытыусы һөнәренең иң ауыр эштәрҙең береһе икәнен күптән аңларға ваҡыт.***

# ЙОНДОҘҘАРҒА

**Йома намаҙҙарының береһендә имам һөйләгән бер вәғәз күңелгә нығыраҡ уйылып ҡалды. Ғилем тураһында ине ул. Мөхәммәт Бәйғәмбәр с.ғ.с. бер көн иртәнге намаҙға мәсеткә килһә, шайтан мәлғүн тәҙрәнән ғибәҙәтхананың эсен күҙәтеп тора икән. Тағы кемде аҙҙырырға йөрөйһөң, тип һораған унан Бәйғәмбәр. Үҙе мәсет эсенә күҙ һалһа, бер кеше иҙәндә йоҡлап ята, икенсеһе намаҙ уҡый икән. "Кемен аҙҙыраһың, йоҡлап ятҡанынмы, әллә намаҙ уҡығанынмы?" - тип һорауын ҡабатлаған Мөхәммәт с.ғ.с. "Йоҡлап ятҡанын аҙҙыра алмайым, бигерәк ғилемле. Намаҙ уҡып ултырғанын әллә нисә тапҡыр насар юлға баҫтырҙым, әммә ғилемлеһе уны кире мәсеткә алып килә лә ҡуя",- тигән мәлғүн.**
**Эйе, тормош ығы-зығыһынан айырыла алмай, йә булмаһа, елкә төбө соҡорланып, белем эстәү, ғилем туплау тураһында уйлана һалып бармайбыҙ шул. Ә ғалимдар күктән төшкәндәй тойола, фән өлкәһе беҙгә ҡағылмаған һымаҡ. Шулай ҙа хөрмәт итәбеҙ ғилем эйәләрен. Ғалим-эколог, юғары мәктәп уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының һәм Рәсәй Тәбиғәт ғилеме академияһының академигы, биология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре ҺӨЙӨНДӨКОВ Йәлил Төхфәт улы менән һөйләшеүгә лә оло хөрмәт менән барҙым. Мине уның ябайлығы, ихласлығы арбаны. Тыңлағыҙ һеҙ ҙә уның һөйләгәндәрен.**

### Юл башы

Мин ябай ғына ауыл ғаиләһендә тыуып үҫтем. Тамырҙарым Йылайыр районына барып тоташа, ата-бабаларыбыҙ Исҡужа ауылыныҡы булған. Һуғыш алдынан атайым Баймаҡ районына күсеп килеп йәшәй башлаған. Беҙ биш бала - дүрт малай һәм бер ҡыҙ-Үрге Мәмбәттә донъяға килгәнбеҙ. Аллаһҡа шөкөр, бөтәбеҙ ҙә имен-һаубыҙ. Апайым Аҡморонда йәшәй, ҡалған дүртебеҙ Сибайҙа төпләнгәнбеҙ.

Фән тураһында бала саҡта ишеткән дә булманы, уйға ла инеп сыҡмағандыр. Беҙҙең Урал аръяғында ул ваҡытта юғары уҡыу йорто, фән учреждениелары бөтөнләй булманы. Баймаҡ тәжрибә хужалығы барлығын, шунда ауыл хужалығы буйынса төрлө тәжрибәләр үткәрелеүен генә ишетеп белә торғайныҡ. Тыуған ауылымда башланғыс мәктәптең өс класын тамамлағас, уҡыуҙы Аҡморон мәктәбендә дауам иттем. Мәмбәттәр Баймаҡ интернатына бара һалмаһалар ҙа, мин туғыҙынсы класҡа Баймаҡҡа юлландым. Урта белем алғас, Өфөләге ауыл хужалығы институтына уҡырға индем һәм 1983 йылда юғары белемле агроном һөнәре алдым. Ғаиләлә кинйә бала булғас, ауылға ҡайтып, атай-әсәй эргәһендә булырмын, тигән уйҙа инем, әммә яҙмышым бөтөнләй икенсе юлдан алып китте.

### Ике ҡулға бер эш

Институтта тупраҡ ғилеме буйынса беҙҙе профессор Айрат Шәрифҡол улы Ишемйәров уҡытты. Ул мине беренсе курстан уҡ ғилми эшкә йәлеп итте. Тәүҙә айырым бер тема буйынса кафедраһына лаборант итеп эшкә алды, аҙаҡ шул тема буйынса диплом яҡланым. Студент саҡта уҡ тәүге ғилми мәҡәләм баҫылып сыҡты, ул осорҙа ундай хәл бик һирәк була торғайны. Хәҙер иһә мөмкинлектәр киңерәк бирелә, хатта бөгөнгө студенттарға сығарылыш проекттары буйынса мәҡәлә яҙыу талабы ҡуйыла.

Шулай итеп, Айрат ағайҙың фатихаһы менән институтта эшкә ҡалдырҙылар. Әлбиттә, иң тәүҙә атай-әсәйҙең ризалығын алдым. Атайым, оҙаҡ уйламай, "Ҡал, беҙ әлегә, Аллаһҡа шөкөр, үҙебеҙҙе үҙебеҙ ҡарай алабыҙ, ауылға ҡайтһаң, ҡалаға китеү ҡыйын булыр, ә ҡаланын ауылға ҡайтыуы бер ваҡытта ла һуң түгел", тигәс, Өфөлә ҡалдым. Бер төркөмдә уҡыған курсташым, Стәрлебаш ҡыҙы Мөнирә менән өсөнсө курстан һуң ғаилә ҡорғайныҡ, бишенсе курста өлкән ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Ҡатыным да институтҡа эшкә урынлашты.

Ике йыл уҡытыусы булып эшләгәндән һуң, ассистент булып, институттың аспирантураһындағы көндөҙгө бүлеккә маҡсатлы рәүештә уҡырға индем, сөнки ситтән тороп уҡыу ҡыйыныраҡ, күптәр уҡыуын ташларға мәжбүр булалар. Ике ҡулыма бер эш, тинем дә, тотондом. Күп осраҡта эшләп тә йөрөйҙәр, уҡыйҙар ҙа, ә мин, кереһенсә, уҡып та йөрөйөм, эшләп тә йөрөйөм - быңдай йәшәү рәүешенең айырмаһы бик ҙур. Сирек ставкаға ла эшләргә лә тура килде, баянда уйнауым да ярҙам итте, төрлө байрам сараларында аҡса эшләнем.

### Баянсы ғалим

Аҡморонда уҡығанда Баймаҡ музыка мәктәбенең филиалын астылар, шунда баян класы буйынса уҡырға ингәйнем. Баймаҡ интернатына иртәрәк барырға тигән уйҙа булһам да, филиалды тамамларға ҡарар иттем. Интернатта уҡый башлағас ҡына унда ла музыка мәктәбенең филиалы булған икәнен белдем.

Музыка буйынса махсус уҡыу, әлбиттә, бик һәйбәт - мөмкинлектәр киңәйә, тормош бөтөнләй икенсе яҡтан балҡый башлай, тәжрибә туплана, ваҡытты дөрөҫ итеп файҙаланырға ла өйрәнәһең. Мәктәп йылдарында уҡ төрлө мәҙәни сараларҙа әүҙем ҡатнаша башланым, конкурстарҙы, концерттарҙы музыкаль яҡтан биҙәү күңелгә рәхәтлек бирә ине. Аҙаҡ, студент саҡта ла, аспирантурала уҡығанда ла, ғөмүмән, ғүмерем буйы баяндан айырылмайым. Һуңғы йылдарҙа йырҙар ижад итә башланым, Сибай институты уҡытыусылары һәм хеҙмәткәрҙәренән торған вокал ансамбле менән етәкселек итәм.

### Ғилем юлы

Аспирантурала уҡығанда иң ҡыйыны фатир мәсьәләһе булды. Сиратта алда торғандарҙың береһе булһаҡ та, көтә-көтә көтөк булып, Өфөнө ташларға тура килде. Икенсе сәбәбе - 73 йәшендә атайым үлеп ҡалды. Уның менән йүнләп рәхәтләнеп һөйләшеп тә өлгөрмәнем, үлер тигән уй бер ҙә генә лә юҡ ине. Был мәлгә диссертация яҡлап, биология фәндәре кандидаты булғайным. Тыуған яҡ тартты, Баймаҡ тәжрибә хужалығына эшкә ҡайттыҡ. Ул мәлдә бында Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшереү институтының тәжрибә хужалығы бик әүҙем эшләп килә ине. Өлкән ғилми хеҙмәткәр итеп эшкә алдылар, ҡатыным агроном булып урынлашты. Өфөлә йәшәгәндә ғаиләбеҙ тағы ике балаға артты, аспирантура тамамлауға беҙ өс балалы инек инде.

Тәжрибә хужалығында дүрт йыл эшләнек, шунан кафедра мөдире булып эшләгән биология фәндәре докторы Сәфәрғәли Искәндәр улы Йәнтурин Башҡот дәүләт педагогия институтының Сибай филиалына эшкә саҡырҙы. Башта өлкән уҡытыусы булдым, шунан доцент, кафедра мөдире, 1995-1998 йылдарҙа филиал директоры вазифаларын башҡарҙым. 1998 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институты менән Башҡорт дәүләт университеты филиалдары берләшеп, Сибай институты барлыҡҡа килгәс, директор урынбаҫары булдым.

Докторлыҡ диссертацияһы Сибайҙа йәшәү дәүерендә яҙылды. Университет ректоры Ғимаев Рәғиб Насретдин улы Сибай институтына бик ыңғай ҡараштa булды. Ул йыш ҡына "Егеттәр, һеҙ артабан да үҫешергә тейешһегеҙ", тип ҡабатлай торғайны. Нәҡ уның ярҙамында университеттың ғилми Советы ҡарары менән докторантураға уҡырға индем. Сибайҙа эшләп, Өфөгә консультанттарға йөрөп, тәжрибә хужалығында туплаған материалдарҙы, экспедицияларҙың һөҙөмтәләрен бергә туплап, ике йыл тигәндә диссертациямды яҙып бөттөм. Кандидатлыҡ диссертацияһын 1988 йылда Новосибирскийҙа яҡлағайным, докторлыҡты 2001 йылда Тольяттиҙа яҡланым.

### Сибай ғалимдары

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күптәр фәнде аңлап етмәй. Ике төрлө ҡараш йөрөй: берәүҙәр, фән ниндәйҙер айырым кешеләрҙең эше, тип һанаһа, икенселәр беҙҙе, юҡ нәмә менән булаша, тип уйлай. Фәндең башҡа эш төрҙәре һымаҡ уҡ эшмәкәрлек төрө икәнен ишеткеләре лә килмәй. Мәсәлән, уҡытыусы һөнәрен алайыҡ. Көрәк тотоп, физик эш менән шөғөлләнмәгәс, улар ҙа буш менән буламы ни? Уҡытыусы һөнәренең иң ауыр эштәрҙең береһе икәнен күптән аңларға ваҡыт. Фән дә шундайуҡ эш төрҙәренең береһе, быны бөтәбеҙ ҙә белергә тейешбеҙ.

Быйылдан башлап институтыбыҙҙың педагогия факультетында, ғилми эҙләнеүҙәр нигеҙе, белем биреү учреждениеларында ғилми-экспериментал эш, ғилми эҙләнеүҙәр методикаһы, тигән предметтарҙы уҡыта башланым. Студенттарға фән өлкәһенә аҡылы теүәл һәр ҡәҙимге кеше бара алыуын аңлатабыҙ, ғилми эш менән шөғөлләнергә уйҙары бар икән, рәхим итһендәр, ишектәр һәр саҡ асыҡ. 1993 йылдан башлап Сибайҙа төрлө йүнәлеш буйынса йөҙҙән ашыу фән кандидаты, 4 фән докторы сығарғанбыҙ икән, был ҙур ҡаҙаныш, тип һанайым. Беҙ бит студент сағынан уҡ кемдең фәнгә һәләте барлығын күрәбеҙ, ғилми эштәр тәҡдим итәбеҙ, диплом эштәре бирәбеҙ, контролгә алабыҙ. Ике биология фәндәре докторыбыҙ булып, шуларҙың береһе Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы икән, бер нисек тә Сибай институты көсһөҙ тип әйтә алмайҙар, сөнки беҙҙә ғилми көс күптән тупланған. Беҙ ғалимдар әҙерләйбеҙ, киләсәктә лә дауам итәсәкбеҙ.



### Уҡытыусы һәр саҡ үҙ урынында

Әлегә тиклем беҙҙә магистратура булманы. Быйыл биология һәм экология, педагогика һәм психология-педагогика буйынса лицензия алдыҡ. Тимәк, өмөт бар, бакалавр дипломы алып сыҡҡан егеттәр-ҡыҙҙар беҙгә килер, һайлау мөмкинлеге булыр, тигән уйҙабыҙ, сөнки лицензия булғас, уны тормошҡа ашырырға кәрәк. Һуңғы осорҙа йәштәрҙең фәнгә килмәүе ана шул бакалаврлыҡ арҡаһында туҡтап торҙо. Был - бер сәбәп. Икенсе сәбәп - фән өлкәһендә эш хаҡының түбән булыуы. Йәштәр күреп-белеп тора, эргәһендәгеләр йөҙ-ике йөҙ мең алып эшләгәндә, ниңә ул түбән хаҡҡа йөрөргә тейеш?

Фән эшенең еңел түгеллеген, ныҡ яуаплы икәнен дә аңлай улар. Электән дә ғилми

эшкә күбеһенсә ныҡышмалдар килә ине. Шулай ҙа специалитет киренән тергеҙелһә, шундай студенттар булыр, тип уйлайым. Әле йәштәр килмәү арҡаһында уҡытыусыларыбыҙҙың урта йәше арта бара. Уларҙың күпселеге үҙебеҙ уҡытып сығарған институттың патриоттары. Ваҡытында институтта эшләп, фатир алып, кире китеүселәр булды, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙы бында ҡалдырырға булған мөмкинлектәрҙе файҙаланманылар. Институттың йөҙө бөтөнләй икенсе булыр ине.

Үҙемә килгәндә, тыумышым менән ошо яҡтан, эш хаҡым да түбән түгел, Сибайҙа йәшәү, эшләү миңә оҡшай. Ошоға тиклем 15 фән кандидаты, 2 фән докторы әҙерләнем. Өфөлә йәшәп, Сибайҙа уҡыған аспиранттарым бар, Монголиянан докторантым бар. Ике аспирантым Тыва Республикаһынан. ...ҡурҡып, фән минең эш түгел, мин унда бер нисек тә эләгә алмайым, тип, шикләнеп йөрөһәң, шулай килеп сыға ла инде. Ҡуҙғалһаң, ынтылһаң, ныҡышмал булһаң, Троцкий әйтмешләй, "фән гранитын йәш тештәр менән кимерһәң", ябай кеше лә ҙур уңыштарға өлгәшә ала. Мәктәптә бөтә уҡыусылар ҙа отличник булып китмәй, өс-дүрткә уҡып та, аҙаҡ айырым бер өлкәлә уңышлы фән эшмәкәре булып киткән ғалимдар бихисап.

Студенттарға килгәндә, мин улар менән тиң күреп аралашам. Фән юлынан китерҙәй кешене табыу ана шул ябай һөйләшеүҙәрҙән башлана. Әлбиттә, талапсанлыҡ, яуаплылыҡ тойғоһо ла бик мөһим.

### Фән һәм тормош

Фән бер урында ҡатып ҡалмаған, төплө, тәрән фундаментль тикшеренеүҙәр менән бер рәттән көнөндә ҡаҙерле булған ғәмәли яҡтан кәрәкле фән дә бар. Уларҙың икеһе лә булырға тейеш. Фундаменталь фән яйлап-яйлап, этап артынан яңы этаптар үтеп, тәбиғәттең, кешенең, йәмғиәттең закондарын өйрәнә, ғилем туплай. Йыйылып килгән белем, ваҡыты етһә, ынғай, һәйбәт һөҙөмтә бирә. Кешеләр фәндең ҡаҙаныштарын аңлап та өлгөрмәй, улар үҙенән-үҙе йәмғиәттә, етештереү өлкәһендә ҡулланыла ла башлай. Шулай булған, буласаҡ.

Ә ғәмәли фәндәр төрлө процестарҙы камиллаштырыу өсөн кәрәк. Ундай ҡаҙаныштар тиҙ генә махсус рәүештә производствола ҡулланыла. Мәҫәлән, ер һөрөү буйынса ғына әллә күпме үҙгәрештәр булды. Әле нуленсе эшкәртеү киң ҡулланыла. Беҙ уны күптән тәҡдим иткәйнек, тик техникаһын эшләүсе табылманы. Шул сәбәпле беҙгә сит илдең техникаһы килде. Уларҙы күпләп һатып ала башланылар. Инженерҙар, яңы саҡ иҫенә килеп, үҙ тәҡдимдәрен индерә башланы. Фән эргәһендә мотлаҡ рәүештә ҡаҙаныштарҙы тормошҡа ашырыусылары ла булырға тейеш.

...кәлә ғилми кадрҙар әҙерләү буйынса Өфө икенсе урында тора, тип яҙа. Был ысынлап та шулай, сөнки беҙҙә Башҡорт дәүләт аграр университетында диссертацион Совет эшләй. Беҙ, Сибайҙан өс кеше, йәғни мин, Резеда Фирғәт ҡыҙы Хәсәнова, Ирина Николаевна Семенова шул Советтың ағзаларыбыҙ. Әлбиттә, сибайҙарҙы өфөләр менән сағыштырыуы ҡыйын, уларҙың матди яҡтан мөмкинлектәре киңерәк, күп һанлы юғары уҡыу йорттары, лабораториялары бар.

### Ғилми этика

Фәндә ғилми этика тигән төшөнсә бар. Ниндәй генә фән өлкәһен алһаң да, бөтәһендә лә ғилми ҡаҙаныштар абруйы ни тиклем юғары булыуына ҡарамаҫтан, расаһына, енесенә, йәшенә ҡарамай, тигеҙ баһаланырға тейеш. Мин йәш ғалимға, һин әле маңҡаһың, тип әйтергә тейеш түгелмен. Ул берәй ғилми фекер әйтә икән, уның асылына төшөнөргә тейешмен, бәлки, ул берәй асыш алдындалыр. Өлгәшелгән, булған-бөткән, артабан өйрәнергә кәрәкмәй, тип тә уйларға ярамай. Әлбиттә, велосипед уйлап табыуҙың мәғәнәһе юҡ, сөнки ул юл үтелгән, әммә уны камиллаштырыу өсөн нисек эшләнгәнен өйрәнергә, белергә кәрәк.

Бер үк мәсьәләгә сәйәси яҡтан да, тарихи, иҡтисади, экологик яҡтан да ҡарап була. Мәҫәлән, тупраҡты өйрәнеү йүнәлеше буйынса биология, ауыл хужалығы йә геология-минералогия фәндәре кандидаты йәки докторы тигән фәнни дәрәжә генә түгел, хатта тарих фәндәре кандидаты йәки докторы дәрәжәһен дә бирәләр, сөнки ул ентекләп был мәсьәләнең тарихын өйрәнгән. Фән бит ул күп ҡырлы эшмәкәрлек.

# ИЛТКӘН ЮЛ

публикаһынан. Кәрәк тип һанағандар эҙләп табалар.

### Фән граниты

Буласаҡ ғалимдарҙы мәктәптән үк фән юлына ҡыҙыҡһындыра башларға кәрәк. Баймаҡ интернатында химиянан, биологиянан беҙҙе Гөлсара Исҡәндәр ҡыҙы Йәнтүрина уҡытты. Ул агрохимия түңәрәге ойоштороп, төрлө ҡыҙыҡлы тәжрибәләр үткәрә торғайны. Ерҙең уңдырышлығын өйрәнәбеҙ, химик анализдар эшләйбеҙ, тупраҡтың составын тикшерәбеҙ. Шул ҡыҙыҡлы дәрестәр ҙә, бәлки, ғилем юлынан китеүемә йоғонто яһағандыр. Әлбиттә, ул осорҙа ауыл балаларына агроном һөнәрен үҙләштереү бик абруйлы һанала ине, әммә төпкө аң кимәлендә ғилми тикшеренеүҙәр шауҡымы һаҡланғандыр.

Беҙ әле мәктәптәр менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Мәҫәлән, үҙем уҡыған Баймаҡ интернат-лицейында шәхси грантымды булдырғанмын, йыл һайын алдынғы уҡыусыларға тапшырам. Мәктәптәр үҙҙәре лә, хәлдәренән килгәнсе, тикшеренеү эштәре менән шөғөлләнәләр, беҙ ярҙам итәбеҙ, кәңәштәр бирәбеҙ. Күптән түгел Сибайҙағы "Ирәндек" лицейынан минән тупраҡты өйрәнеү буйынса консультация алған уҡыусы шундай сараларҙың береһендә Башҡортостанда еңеп сыҡты. 8-се класта уҡыған Валеева Самира исемле ҡыҙ ул, Рәсәй командаһына эләгеп, Белоруссияға ярышҡа барып ҡайтты. Мин уға: ҙурайғас, фән менән шөғөлләнергә кәрәк һинә, тим. Уйлайым ул турала, ти. Бик етди ҡыҙ. Шулай бөртөкләп мәктәптән үҫтерһәк, әлбиттә, йәштәр фәнгә киләсәк.

Балаларҙың аңына, кешенең хәленән килмәслек нәмәләр булмай, тигән хәҡиҡәт һеңдерелергә тейеш. Буштан-бушҡа

### Юлдар үҙәккә илтә

Рәсми статистика юҡтыр, әммә фәнгә ҡарата мөнәсәбәт буйынса Мәскәү һәр саҡ үҙәк һаналды. Сөнки фәндәр академияһы ла, юғары уҡыу йорттары ла баш ҡалабыҙҙа, ҙур үҙәктәрҙә тупланған. Әйтәйек, тупраҡты өйрәнеү буйынса ла Мәскәү беренсе һанала, икенсе урында - Новосибирск, Өфө - өсөнсө урында. Быға тиклем шулай килде. Әле күптән түгел Мәскәүҙә урынлашҡан В.В.Докучаев исемендәге Тупраҡты өйрәнеү институты профессоры И.Ю.Савин үҙенең ғилми мәҡәләһендә Рәсәйҙә был өл...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Евгений Евтушенконың берҙән-бер сәсмә әҫәре һаналған "Еләкле урындар" ("Ягодные места") романында бик фәһемле эпизод бар. Үҙәктән ситтә Калугала йәшәп, космос караптары тураһында ғилми эҙләнеүҙәр алып барған Циолковкийҙы ҡараңғы тыҡрыкта бурҙар туҡтата. Уйҙары - уны талау. Алтын сәғәтен тартып алғас, бабай уларға: "Һеҙ минең сәғәтте урламайһығыҙ, ваҡытымды урлайһығыҙ, мин йыһан тураһында уйлайым, йондоҙҙарға осоу тураһында хыялланам", - тип асыулана башлағас, бурҙар алдарында кем тороуын аңлап, оло хөрмәт күрһәтеп, Циолковскийҙы оҙатып ҡуялар.**
**Шулай, йәмәғәт, ғалимдарҙы хөрмәт иткәндә генә кешелек цивилизацияһы алға барасаҡ.**

Радик ӨМӨТҠУЖИН
яҙып алды.

## УЙЛЫҒА - УЙ



# ХАҠЛЫҠ ЯҒЫНДА БУЛ!

● Әгәр ҙә һинең тик Аллаһы Тәғәләгә генә табыныу ниәтең бар икән, кемгәләр оҡшарға тырышыу мөһим түгел. Аллаһ алдындағы баһаң да еткән. Кешелек сифаттарыңдың үҙең кеүек үк Аллаһ ҡулдарынан маҡталыуын көтмә. Кешеләрҙең нимә уйлағаны һинең өсөн улай уҡ мөһим булырға тейеш түгел...

● Алдауҙан алыҫ тор. Бөгөнгө алдауһыҙ йәшәп булмаған йәмғиәттә ауыҙыңдан сыҡҡан һәр һүҙең тос һәм ҡиммәт булһын. Әйткән һүҙең кешеләрҙә ышаныс тыуҙырһын. Үҙ һүҙеңдең хужаһы бул. Йылан һымаҡ борғоланыу - түбән йәнлеләр эше.

● Иман, Ҡөрьән һәм намыҫ күрһәткән юлдан алға бар. Артҡа боролоп ҡарама, һул һәм уң яғыңда нимә бар икән тип тикшермә, тура юлдан барыуыңды дауам ит.

● Хаҡлыҡ һәм ғәҙеллек яғында булыу, Аллаһ ярҙамы гел йәнәшәңдә булған йәннәткә аяҡ баҫыу өсөн юлда ныҡышмалы булыу ҙа етә. Ләкин шуны онотма: был юл - ауыр юл, үҙеңде ҡулыңда баҙлап торған күмер тотоп йөрөгәндәй хис итәсәкһең. Ауырлыҡтар менән көрәшкәндә генә кеше шәхес булып формалаша, эштәре Аллаһ тарафынан баһалана.

● Еңел тормош кешене йоҡлата. Бәйғәмбәрҙәр тарихына күҙ һал әле, кемеһе еңел көн күргән? Йәннәт - арзан түгел, йәһәннәм - алыҫ түгел.

● Ауырлыҡтарҙы сыҙамлыҡ менән генә үтеп сығырға мөмкин. Кешеләр аңламаҫ, һинән мыҫҡыл итеп көлөүселәр ҙә булыр. Уларға асыу тотма. Доға уҡып, дөрөҫлөк уларға ла ҡапҡа асһын, тип һора. Ғорурлығыңды ситтә ҡалдыр. Нәфрәт һәм дошманлыҡ кеүек хистәр һинең өсөн ят булһын, улар сирләтә. Һине кемдер яратмай, тип борсолма, йөрәгеңде Аллаһы Тәғәләгә йүнәлт.

● Үҙеңде башҡаларҙан өҫтөн ҡуйма, ләкин кәм дә тойма. Нисек барһың, шулай бул, үҙ тормошоң менән йәшә. Кеше һөйләгәндә һөйләмә һәм тыңлама. Бары тик Аллаһтың әйткәнен тыңла, Уның менән мөнәсәбәттәреңде яйла. Иң мөһиме, хәрәкәттәрең, һүҙҙәрең, ҡылғандарың Аллаһы Тәғәлә оҡшарлыҡ булһын.

● Көн һайын етешһеҙлектәреңдең һанын әҙәйт. Мосолман һәм кеше булараҡ камиллашырға тырыш. Нәфсеңән - намыҫҡа, ерҙән Аллаһҡа күсеүеңдә дауам ит. Намыҫ - ул кеше йөрәгендәге Бәйғәмбәр кеүек.

● Кеше туҡтамай хеҙмәт итергә, киләсәк өсөн борсолмаҫҡа тейеш. "Мосолман киләсәге өсөн борсолорға тейеш түгел" тиеү, киләсәктән ҡурҡырға кәрәкмәй, тигәнде аңлата.

● "Хеҙмәт - ул ныҡлы таяныс. Йығылһаң да, уға тотоноп, аяғүрә баҫа алаһың".

● "Кем йәш сағында теләһә ниндәй урында йәшәй, шул ҡартлығында теләмәгән урында йәшәр".

● Халиф Али шулай тип әйтеп ҡалдырған: "Балаларығыҙҙы улар йәшәр заманға ҡарап тәрбиәләгеҙ".

● Аҡса һинең өсөн төп маҡсатты тәшкил итмәһен. Аҡса - ул изге эштәрҙе башҡарыуҙың бер сараһы ғына булып ҡалһын. Матди байлыҡты йөрәгеңә индермә. Бер йөрәккә ингән нимәне кире сығарыу бик ауыр ул. Мәңге булмаған әйберҙәр бер ҡасан да кешегә бәхет килтермәҫ.

● Халиф Омар: "Кеше һөйләмә. Ул - ауыр бер сир. Аллаһты иҫкә төшөр. Быны ул дауа!" - тигән. Ниндәй хаҡ һүҙҙәр! Бер тапҡыр ғына булһа ла кеше тураһында нәфрәт, насар тойғолар менән яман һүҙ әйтһәң, шундуҡ үҙеңде насар хис итәһең. Ләкин Аллаһты иҫкә төшөргәндә йөрәк тыныслыҡ, ихласлыҡ менән тула.

● Кеше ихлас кешеләрҙән белем һирпергә тейеш. Иғтибар менән тыңла, ләкин һәр нәмәгә ышанып барма. Кем һөйләгәненә түгел, нимә һөйләгәненә ҡара. Тирә-яғыбыҙҙа нимә булғанын аңларға тырышмаһаң, ғүмеребеҙ заяға уҙасаҡ. Үҙ ышаныуҙарыбыҙ, фекерҙәребеҙ булмаһа, юғаласаҡбыҙ.

● Дуҫым, шуға ышан: әлеге заманда күптәр үҙҙәренең көсһеҙлөгән еңә белмәй. Үҙ башың менән уйла. Һинең менән идара итмәһендәр. Барыһын да белеп, аңлап йәшә. Үҙеңде тормошоңдан ситләтер нимәләр күп ул. Кеше-робот менән идара итеүе еңелерәк тә.

**✓ *Баҡтиһәң, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында булған икән Дүшәмбе табиптары юлыҡҡан хәлгә тартым берҙән-бер осраҡ. Миномет минаһы һалдаттың тәненә ҡаҙалған, ләкин шартламаған.***

*Рәсүл БАЙГИЛДИН*

# КЫЛ ӨҪТӨНДӘ ҠАЛҒАН ӨС ҒҮМЕР

**Хикәйә**



***Белешмә.** Хәрби ярҙам тураһында мөрәжәғәт нигеҙендә, 1979 йылдың декабрендә Советтар Союзы Афғанстан Демократик Республикаһына Ҡораллы көстәренең сикләнгән контингентын индерә. Шул рәүешле туғыҙ йылдан ашыу осорға һуҙылған, рәсми телдә, "интернациналь бурыс", тип аталған һәм, тарихсыларҙың фекеренсә, бөйөк державаның, СССР-ҙың, емерелеүе сәбәптәренең береһе булған хәрби кампания башлана. Оҙайлы һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә Швейцарияның Женева ҡалаһында Совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарыу тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыла. Уның шарттары буйынса, 1988 йылдың 15 авгусына тиклем хәрби көстәрҙең яртыһы үҙ иленә ҡайтырға тейеш була. Һалдаттарҙың тәүге колоннаһы шул йылдың 15 майында дәүләт сиген кисеп үтә һәм тыуған еребеҙгә аяҡ баҫа.*

Рентген һүрәтен ҡулына алған хирург Хәсән Хәтип улы Айҙашев уйға ҡалды - аппарат нурына сит әйбер эләккәнме, әллә сәйер был ҡара тап һалдаттың тәненә инеп ултырған башҡа нәмәнең шәүләһеме?

- Сергей Петрович, инеп сығығыҙ әле, зинһар... - телефондан рентгенологты саҡырҙы.

Хәҙер инде һүрәтте икәүләп әйләндереп-тулғандырып ҡарарға тотондолар.

- Снаряд ярсығымы?.. Түгел... тигеҙ яҡлы теүәл формалы ярсыҡ булмай...

- Пулямы әллә?.. Калибрысы... утыҙ миллиметр тирәһе. Ул тейһә, кешенән нимә ҡалыр?.. Торба киҫәгенә оҡшаған был нәҫтә...

- Ул нисек һалдаттың умрау һөйәге тапҡырына инеп ултырған әҙһеҙ, ниһеҙ?.. Яраһы бит ҡорһағы тапҡырында, ә торба киҫәге, һеҙ әйтмешләй, ана, ҡайҙа...

Ярты сәғәттәй хитландылар төрлөсә фаразлап. Рентген һүрәтенә төшкән таптың нимәнән сағылыуына ҡарамай, операция яһарға, уны рядовой Ефремовтың тәненән алырға кәрәк ине. Госпиталгә килеп эләгеүенә ике аҙна инде уның. Яраһы төҙәлеп бара, ә уң яҡтан, нисек кенә дауалаһалар ҙа, ҡулбашының шеше ҡайтмай ҙа ҡуя. Тимәк, сәбәп ошо билдәһеҙ әйберҙә.

Ишек шаҡынылыр.

- Эйе, инегеҙ, - Хәсән Хәтип улы башын бормай ғына яуап бирҙе.

- Рөхсәтме, иптәш майор?..

- Үтегеҙ, үтегеҙ, иптәш капитан... Ни йомош?

- Йомош, тип ни, иптәш майор, выписканы тиҙләтеп булмаҫмы икән, тигәйнем... Яралар бөтәшеп бөткән һымаҡ... Тегендә, "йылға аръяғы"нда, көтәләр...

- Көтәләр, тисәле... Һин ашыҡма, форсат сыҡҡанда, ял ит оҙағыраҡ. Утҡа инергә өлгөрөрһөң... Әйткәндәй, капитан, мынау снимокҡа күҙ һал әле... Һин бит боевой офицер... Һүрәткә төшкән ошо тап, минеңсә, тимер киҫәгенә оҡшаған. Уның нимә булыуы ихтимал?

- Э-э-э, иптәш майор, был бер ниндәй ҙә тимер киҫәге түгел, ә АГС-17 гранатометының шартламаған гранатаһы!..

- Ә?.. - Хәсән Хәтип улы көтөлмәгән хәбәрҙән ултырған урынынан нисек һикереп торғанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

Афғанстандың Бадахшан аймағында булып үткән ҡаты бәрелештәрҙә яраланған рядовой Ефремов бында ике аҙна ята, хәл ингәс, тән яҙып госпиталь буйлап йөрөй башланы, хатта теннис уйнап маташа шикелле. Ул бит - тере бомба, баҡһаң. Эргәһендә күпме кеше, персонал! Ишеткән хәбәрҙән һикермәҫтән һикерерһең.

- Урынынан саҡ ҡына ҡуҙғалһа, шунда уҡ - бах. Ул нисек кеше тәненә эләккән. Иң ҡыҙығы: нисек быға тиклем шартламаған? Әллә был яралы ошондамы? - Капитан башлаған һүҙен әйтеп бөтөрҙө лә, майорҙың үҙен-үҙе белешмәй ҡуҙғып китеүенә аптырап, һорай ҡуйҙы, ике ҡулы менән киң ишара яһап.

- Беҙҙә шул... Беҙҙә!.. Так, срочно палатаңа, капитан! Коридорға сыҡмаҫҡа!.. Елена, сестричка, рядовой Ефремовтың палатаһынан барлыҡ пациенттарҙы ла эвакуировать! Ул үҙе урынында тик ятһын, ҡуҙғалмаһын. Отделениела бер кем дә коридорға сыҡмаһын! Йөрөүҙе туҡтатырға!.. Мин - госпиталь начальнигына! - Башынан мең төрлө уй үткән майор Айҙашев хәрбиҙәрсә анıҡ һәм киҫкен бойороҡтар бирҙе лә, уҡтай атылып, кабинетынан сыҡты.

Ах, һуғыш-һуғыш! Ҡасан әҙәми зат берен-бере үлтереүҙән туҡтар? Кемгә тар был Ерҙә, нимә бүлешә кеше һаман? Һуң XX быуатта, техник прогресс алға киткән, кеше ғүмере иң юғары ҡиммәт тип танылған, гуманизм идеологияһы алға һөрөлгән дәүерҙә йәшәйбеҙ ҙә баһа. Ошо ете йыл эсендә тәне йыртҡыланған, аяҡ-ҡулы өҙөлгән нисәмә кешене, әле йәшәргә лә йәшәргә тейеш егеттәрҙе, тормошҡа ҡайтарҙы. Ғазраил ҡулынан йолоп ҡалды ла ул, тик уларҙың күптәре - ғүмерлек имгәк, артабан яҡындарына ла, дәүләткә лә бәйнәт булып йәшәр ғәрип-ғөрәбә.

Тәүҙә ялан госпиталендә хеҙмәт иткәйне. Унда бигерәк ауыр. Яра әрнеүенән кисергән һыҙланыу ауаздары, ҡан, иҙелгән, йолҡолған тән ағзалары, мөлк-мөлк итеп ҡанһыраған асыҡ яраларҙы эшкәртеү, тегеү, ҡул аҫтындағы медицина сараларының сикле булыуы арҡаһында үлемесле йәрәхәтле һалдаттарҙың был донъялыҡтан китмәҫтән йән талашын күреп сараһыҙланыу, мәйеттәрҙе, цинк табуттарға һалып, "Ҙур Ергә" оҙатыу һәм йәшәү менән үлем араһының бер семтем мәл генә икәнен тойоу ғазапҡа һала, күңелде иҙә, булмышты ғажиз итә унда. Юҡ-юҡ та, халыҡ ҡорал тотоп ҡаршылаша икән, беҙ бында нишләп көсләшеп, ҡорбандар аша, үҙ тәртибебеҙҙе урынлаштырырға ынтылабыҙ һуң, тигән уй килә ине башына. Дүшәмбегә, үҙәк хәрби госпиталдәрҙең береһенә күскәс кенә, арынды унан. Эйе, беҙ хәрби интернационалистар, афған халҡының демократик ынтылышын яҡлайбыҙ, душмандарға ҡаршы уларҙың азатлығы өсөн көрәшәбеҙ, ғәҙел ҡоролош төҙөргә ярҙам итәбеҙ. Беҙ инмәһәк, унда Америка хакимлек итер, урта арағა оса торған үҙҙәренең "Першинг" ракеталарын ҡуйырҙар һәм Советтар Союзының бөтә Урта Азия төбәген сәпкә алырҙар ине. Икеләнергә лә, СССР-ҙың изге ниәттәр менән һәм, үҙ халҡы хәүефһеҙлеген ҡурсалап, күрше илгә ғәскәр индереүенә шикләнергә лә түгел. Был турала гәзиттәр яҙа, радио һөйләй, телевизор күрһәтә...

Подполковник Пушковтың кабинетына Айҙашев, ишеген бәреп асып тигәндәй, рөхсәт һорап тормай барып инде.

- Беҙҙә ЧП, иптәш подполковник!.. - тине ул, көс-хәлгә тынын алмаштырып.

Ишеткән хәбәрҙән госпиталь начальнигының ҡобараһы осто. Ышынманы ул. Хәрби медицина тарихында булған хәл түгел. Булһа, академияла уҡығанда миҫал итеп килтерерҙәр, гранатаны кеше тәненән хәүефһеҙ алыу өсөн ниндәй алымдар ҡулланғандар, операцияны нисек эшләгәндәр - барыһын да һөйләрҙәр, күрһәтерҙәр ине.

Пушков Хәсән Хәтип улы алып килгән рентген һүрәтен ентекләп ҡарап сыҡты ла, саперҙарҙы ла саҡырып, госпиталь хирургтары консилиумын йыйырға кәрәк, тигән һығымтаға килде. Бер ыңғай Мәскәүгә, Оборона минстрлығына, шылтыраттылар. Күп тә үтмәй, Бурденко исемендәге хәрби клиник госпиталенән профессор Бахмутов бәйләнешкә инде. Баҡтиһәң, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында булған икән Дүшәмбе табиптары юлыҡҡан хәлгә тартым берҙән-бер осраҡ. Миномет минаһы һалдаттың тәненә ҡаҙалған, ләкин шартламаған. Ҡанатлы ҡойроғо күренеп торғас, уны тиҙ зарарһыҙландыра алғандар һәм яралыны ҡотҡарып ҡалғандар. Бер кем дә зыян күрмәгән. "Уникаль хәл. Алыҫтан тороп беҙ бер нисек тә һеҙгә ярҙам итә алмайбыҙ. Шуға үҙегеҙ ҡарағыҙ инде, нисек мәсьәләне сисергә, кешеләрҙе хәүеф аҫтына ҡуймаҫҡа", - тип тамамланы һүҙен профессор.

- Граната запалына саҡ ҡына ҡағылһаң, шунда уҡ детонация буласаҡ. Снимокта ул ҡыйшайған һымаҡ та әле - бынынһы бигерәк насар, - сапер офицерҙың был һүҙҙәре былай ҙа көсөргәнешле мөхит хөкөм һөргән консилиум йыйылған кабинеттағы дөйөм кәйефте тағы ла ҡырҡыулаштырҙы.

Ирҙәрҙең хәүеф уйылып ятҡан уйсан йөҙҙәре үтә лә ҡырыҫ. Ирендәр ҡымтылған. Хәбәрҙе үлсәп кенә әйтәләр, һүҙҙәрҙе ҡарлыҡҡан тамаҡ төбөнән ҡыҫып ҡына сығаралар.

- Операцияны үҙ өҫтөмә алам... Рядовой Ефремов минеке бит... Минең отделениела... - тине Хәсән Хәтип улы, нисектер мәсьәләнең сиселешенә этәргес биреү ниәтендә һөйләшеүҙе башлап.

- Мин ассистент булам майор Айҙашевҡа, - саҡ бер йыл хеҙмәт иткән лейтенант Максимов һүҙ ҡатты, әле һаман фекер туплай алмай аҙапланған иптәштәренең иғтибарын үҙенә йәлеп итеп.

- Та-а-ак... Операция... Һүҙ юҡ, уны эшләргә кәрәк... Эйе, кемдер операция өҫтәле артына ла баҫырға тейеш... Тик нисек?.. Беҙгә геройҙар түгел, ә һөҙөмтә кәрәк. Бер-беребеҙҙе ҡорбан итмәй генә быға өлгәшеү шарт... - подполковник Пушков берәмләп хеҙмәттәштәрен күҙҙән үткәрҙе. - Шартлатмай ғына гранатаны нисек боецтың тәненән алырға - бына төп проблема ҡайҙа, - тип ҡарашын сапер офицерға төбәне.

Хирургтар өсөн махсус инструмент эшләтергә кәрәк ине. Нисек тора, шул килеш, ҡуҙғатмай ғына, гранатаны шул инструмент менән ҡоршап тотоп алырға, тән туҡымаларынан ипләп кенә азат иткәс, тартып сығарырға ғына ҡала. Мәсьәләнең сиселеше шулай ябай ғына һымаҡ та ул. Тик боеприпас һәр даим секунд шартларға әҙер бит. Саҡ ҡына яңылышлыҡтан, тулҡынланыуҙан, көсөргәнештән ҡулдағы скальпелдең яҙа китеүе лә ихтимал дабаһа...

Махсус инструмент һыҙмаһын завод инженерҙары, конструкторҙары менән бергә, һәр үлсәмен ете ҡат тикшереп, ентекле һыҙҙылар. Уның буйынса эшләнгән хирург ҡоралы уңай, бик ышанысды, ҡарап тороуға, күҙҙең яуын алырлыҡ килеп сыҡты.

Бер үк ваҡытта операция өсөн айырым бүлмә йыһаҙланылар. Үҙегеҙ ҡарағыҙ унда, тиһәләр ҙә, Мәскәү һәр аҙымдарын контролдә тотто, хатта, ялынан саҡырып сығарылған министрлыҡтың медицина идаралығы начальнигы Дүшәмбегә үҙе килде. Пушков, операцияға мин торайым, тип әйткәйне, юҡ, бынамын тигән хирургтарың бар, уларға ышаныс күрһәтәйек, тинеләр өҫтәгеләр. Лейтенант Максимовҡа ла рөхсәт булманы, Айҙашевҡа ассистент итеп тәжрибәле Самойловты тәғәйенләнеләр. Әлбиттә, уның ризалығы менән. Былдай яуаплы һәм үтә лә хәүефле заданиеға һуғышта, ғәҙәт булараҡ, тик добровольцтарҙы ғына алалар. Ә Дүшәмбеләге госпиталь - күрше илдә барған утлы алыштың бер яу яланы ул.

- Хәсән, инде нисәнсе көн һуңлап ҡайтаһыңсы... Әллә эштә бер-бер хәл бармы? - ҡатыны Әлфиә бөгөн һорау менән ҡаршыланы уны.

- Яралылар күбәйҙе... Тегеләргә Американан ҙур партия ҡорал килгән, ти... Көсәйҙеләр булыр... - Хәсән Хәтип улы кеше тәнендәге граната, үҙе яһаясаҡ операция тураһында ләм-мин өндәшмәне.

- Эй, Аллам, ҡасан бөтә был һуғыш?.. Осо-ҡырыйы күренгәндәй түгел дәбаһа. Хеҙмәт итмәнең түгел, үҙең әйтмешләй, "йылға аръяғы"нда ла булдың, ут йотторoп беҙҙән. Етәр ул!.. Рапорт яҙ, тыныс яҡҡа күсерһендәр. Башҡортостанға яҡыныраҡ төйәкләнһәк, атай-әсәйҙәр ҡалай ҡыуаныр ине. Малайҙар ҙа иҫ белә башланы тыуған ерҙән ситтә. Яҡшы түгел был... - Әлфиә һуңғы осорҙа уйлап йөрөгәндәрен, ниһәйәт, иренә әйтте бөгөн.

Ул ғаиләһен Афған һуғышына ҡағылышы булмаған, хафа белмәй ҡәҙимге тыныс тормош ҡыуаныстарына төрөнөп йәшәгән, киләсәк тураһында матур хыялдар ҡорған, туйҙар үткәргән, байрам табындарында йырҙар йырлаған, күңел асҡан күпселек Совет иле кешеләре рәтенә сығарыу ниәтенән шулай һүҙ башланы.

Хәсән Хәтип улы ҡатынына ҡапылдан яуап бирмәне. Эйе, ул да - әҙәми заттан һәм уға ла тыныс тормошта етеш һәм туҡ йәшәү теләге ятын түгел. Тик бурыс, выждан, әйткән һүҙгә тоғролоҡ тигән төшөнсәләр ҙә бар бит әле. Уларҙы ҡайҙа ҡуймаҡ... Хәрби хирург үҙен яралы һалдаттар урынына ҡуйып ҡарай ҡайһы саҡ. Ҡулына ҡорал тотоп һуғыша, кешегә тоҫҡап ата алыр инеме икән? Иленә, еренә, йортоңа дошман баҫып инһә, ундай уй төшмәҫ ине башына. Әлеге осраҡта иһә хәл башҡасараҡ бит. Шуға үҙенә биргән һорауына яуабы ла юҡ уның.

- Уйлашырға кәрәк, Әлфиә... Йәнем, мин бит хәрби кеше. Шуны белеп сыҡтың миңә кейәүгә... Сабыр итәйек, Алла бирһә, Башҡортостанға ла ҡайтырбыҙ, - тине ипле генә, ҡатынының күңелен аяп.

Таджикстандың сыҙап торғоһоҙ эҫе август айы. Айҙашев менән Самойловтың өҫтөндә саперҙар кейә торған махсус һаҡланыу обмундированиеһы, баштарын быяла битлекле шлем ҡаплаған. Һәр хәрәкәт ауырлыҡ менән бирелә. Маңлайҙан шабырлап аҡҡан тирҙе һөртөр әмәл юҡ. Ғәҙәттә, күҙ ҡарашын, ымын һүҙһеҙ ҙә аңлай ассистенттары. Әлеге хәлдә Самойлов әйткәнен дә ҡапылғарай ишетмәй хатта, ә боҫланған быяла битлек аша операция өҫ-

***✓ Аптырағас, ҡорбанлыҡ һарыҡ һатып алып, ике бөртөк ашыҡ төшөрҙөм ҡулыма. Ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтарҙа уйындың киң таралыуын белгәнгә күрә, интернет аша эҙләнә башланым. Таптым, улар менән һатыу итәләр икән хатта.***



тәле, унда ятҡан пациент тоноҡ шәүлә булып ҡына күренә. Юҡ, былай булмай - йөҙөн ҡаплаған быяла битлекте асыу менән өҫкә күтәрҙе. Броня тәҙрә ҡуйылған балкон аша операция барышын күҙәткән Мәскәү вәкиле, ярамай, күтәрмә, тип ишаралап ҡул болғауына иғтибар итмәне Айҙашев. Һәрмәнеп эшләй торған операция түгел бит.

- Скальпель!..

Миллиметрлап бик ипле йөрөттө хирург бысағын Хәсән Хәтип улы. Тән туҡымаларын нисек, күпме, ҡайһы йүнәлештә, ҡайһы тәрәнлектә ҡырҡырға - барыһын да алдан ентекле өйрәнделәр, ҡағыҙға скальпель юлын төшөрҙөләр. Шуны иҫендә тотто ул.

- Разрезды асыңҡыра!.. Булды!.. Инструмент! - гранатаны ҡыҫып алыу өсөн эшләткән ҡулайламаны ошолай ҡыҫҡа ғына итеп атау Самойлов менән икәүһе өсөн аңлайышлы, операцияға әҙерләнгән саҡтан шулай әйтә киләләр.

Иң яуаплы мәл. Майор Айҙашевтың ҡулында өс кешенең ғүмере. Уға яңылышырға ярамай!

Ҡабырға янындағы гранатаның запалын ҡыҫып тотҡан итте инструмент үҙе йырып инергә тейеш. Боеприпасты урынынан ҡымшатырға ярамай. Бер миллиметр... Ике... Тағы биш... Бер сантиметр... Күпме ваҡыт үткәндер, Айҙашев та, Самойлов та уның иҫәбен юғалтҡан. Бәлки, ул туҡтап торғандыр.

Юҡ, туҡтамаған!.. Ер Ҡояш тирәләй әйләнеүен дауам итә. Улар кешелекте мәңгелек аша мәңгелеккә табан алып китеп бара һәм был ғәмәлдәренең, һалған юлдарының, ваҡыт үлсәменең теүәллеге ғәжәп итә. Бөгөнгө көн дә үтер, айҙар, йылдар артта ҡалыр, быуындар алмашыныр, ләкин Ерҙә таңдар тағы һәм тағы атыр... Айҙашев, Самойлов, Ефремов үҙҙәренә тәғәйен тағы бер таңды ҡаршылай алырмы? Улар йәш, уларға йәшәргә лә йәшәргә бит... Һуғыш был өс ир-егетте ошо операция өҫтәле тирәләй осраштырҙы һәм ғүмерҙәрен ҡыл өҫтөнә ҡуйҙы. Һуғыш... Кирегә ҡайтып, Совет ғәскәре дивизияларын 1979 йылдың 25 декабрендә ил сиген билдәләп шашып аҡҡан Амударъя аша Афғанстанға үтеп инергә әйҙәгән бойороҡҡа ҡул һалған ваҡытта дәүләт башлығын туҡтатып булһа, Айҙашев, Самойлов, Ефремов башҡа сүрәттә, башҡа урында йәшәп ятырҙар, бер-береһенең был донъяла булыу-булмауын да белмәҫтәр ине. Тәҡдир ҡушҡандыр Дүшәмбелә хәтәр ошо хәләттә осрашырға уларға.

- Тоттом!..

Шул мәлдә ҡан атылды һәм операция өҫтәлен манма ҡыҙылға буяны.

- Сабыр!.. Ашыҡма зажим менән... Гранатаны тәүҙә!..

Ике ҡуллап тотҡан инструмент менән бергә ярып асылған, ҡанға батҡан тәндән граната ла сыҡты. Хәсән Хәтип улы уны һаҡ ҡына ҡом тултырылған тоҡтар менән ҡамалған ҡумтаға һалды. Ә был ваҡытта Самойлов, үлемес янаған боеприпасҡа иғтибар ҙа итмәй, тамырҙан, кеше тамырынан, урғылып аҡҡан ҡанды туҡтатыу менән мәшғүл ине.

Пациентты тиҙ генә икенсе бүлмәгә күсерҙеләр, унда көтөп торған хирургтар бригадаһы күнегелгән шарттарҙа операцияны урын-еренә еткереп тамамлап ҡуйҙы. Гранатаны иһә саперҙар ҡала ситенә алып китеп шартлатты. Рядовой Ефремов бер айҙан аяҡҡа баҫһа ла, комиссия уны хеҙмәткә яраҡһыҙ тип тапты.

Ике йыл ярымдан, 1989 йылдың 15 февралендә, Совет ғәскәрҙәренең һуңғы колоннаһы баш бирмәҫ тынғыһыҙ Афғанстандан тулыһынса сыҡты. Ҡоралды көстәр алдына ҡуйылған хәрби бурыс үтәлдеме-юҡмы - был һорауға киләсәктә тик тарих үҙе генә яуап бирер. Ҡатмарлы шарттарҙа кеше ғүмерен ҡотҡарғаны өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған һәм погонына тағы бер йондоҙ ятҡан подполковник Хәсән Хәтип улы Айҙашев был ваҡытта Силәбе өлкәһендәге гарнизондарҙың береһендә хеҙмәтен дауам итә ине.

ИЖАДСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# АШЫҠ УЙЫНДАРЫМЫ?

## Ул сослоҡ һәм отҡорлоҡ тәрбиәләй!

**5 - 8 июндә Өфөлә "Әйҙә уйнарға!" II Бөтә Рәсәй уйынсыҡтар һәм уйындар фестивале үтә. Ошо сара айҡанлы билдәле йырсы, алып барыусы, кейеҙ баҫыу оҫтаһы, боронғо халыҡ уйыны "Ашыҡ"ты тергеҙеү буйынса әүҙем эш алып барған Зилә ЛИРАға өс һорау бирҙек.**





**Ашыҡ уйыны онотолғайны бит. Уны тергеҙеү уйы нисек тыуҙы һеҙҙә?**

- "Ашыҡ" тип, уйын тураһында берлектә әйтеү дөрөҫ булмаҫ. Сөнки мин үҙем генә лә бәләкәйҙән уның һигеҙ төрөн беләм. Улар - "Биш ашыҡ", "Ямғыр-ашыҡ", "Хан талаш", "Бәйге", "Өс табан", "Дүрт аҙым", "Ашыҡ атыу", "Түңәрәк". Шуға, "ашыҡ уйындары", тиеү урынлыраҡ. Уйлауымса, уларҙың ҡайһыларын 4-5 йәштәр тирәһендә үк үҙләштергәнмен. Сөнки биш йәшемдә уны өйрәткән, минең менән бергәләп уйнаған өләсәйем был ғүмерҙән үтеп китте. Олатайым оҙағыраҡ йәшәне. Алдына ултыртыр ҙа: "Өләсәйең һиңә ниндәй уйын өйрәткәйне әле. Йә, ҡыҙым, уйнап күрһәт уларҙы", - тиер ине. Бер нисә көн үтәме-юҡмы, тағы ҡабатлана был хәл. Олатайымдың бөтөнләй хәтере юҡ икән, тип уйлай инем үҙем бала аҡылы менән. Ул, уйындарҙы әленән-әле ҡабатлатып, ҡайһыларын яңынан өйрәтеп, уларҙы ошо көндәргә тиклем алып килеп еткереүемде телəгән дә баһа. Быны йылдар үткәс кенә аңланым һәм ныҡ тетрәндем.

Мәктәптән һуң байтаҡ ваҡытҡа ашыҡ уйындарын онотоп торҙом. Мәскәүҙә цирк артистары әҙерләгән училищела уҡығанда, 19 йәшемдә, бер ҡыҙыҡ хәл уны иҫемә төшөрҙө. Яңы йыл ҡаршылағанда, инде куранттар бына-быңа һуға тигәндә, ҡабаланып өҫтәл артына йыйылдыҡ. Ҡаршымда ултырған егет шампан аса. Бөкөһө ҡапыл минең яғыма атылды. Ни ғилләә менәндер инде, мин уны тотоп алдым. Барыһының да, нисек тоттоң уны, тип иҫ-аҡылы китте. Сөнки улар бит спортсылар, сослоҡ менән етеҙлектең нимә икәнен яҡшы беләләр, баһалайҙар. Брюс Ли тип ҡушамат та таҡтылар хатта был ваҡиғанан һуң. Шунда әйттем, мин "Биш ашыҡ" уйнап үҫкән баламын, тип. Ҡыҙыҡһынып киттеләр, өрөк һөйәктәре ярҙамында уйындың асылын төшөндөрҙөм. Жонглерҙар уйнап та ҡараны. Шунда ашыҡ уйындарының ҡырғыҙҙарҙа, ҡаҙаҡтарҙа таралғанын белдем.

Артабан тормоштоң тағы бер мәле үтеп китте. Кейәүгә сыҡтым, улым тыуҙы. Бала саҡтағы мауығыуым тағы онотолдо. Ян улыма 10-11 йәштәр тирәһендә малайҙар араһында фишкалар уйыны килеп сыҡты. Бер көн ул "Әсәй, вис отоп алдым", тип, бер ус "байлығын" күрһәтте. Уның ҡағиҙәләре ябай ғына - фишканы әйләндерә һуҡһаң, ул һинеке. Был уйын нимәнелер хәтерләтә түгелме, тип туҡтап ҡалдым. Олатай-өләсәйем әйтеүе буйынса, элек ашыҡтар һәр баланың үҙенеке булған, отоштарын махсус тегелгән янсыҡтарҙа йөрөткәндәр. Шунда, "Ҡарасы, ашыҡты бөтөнләй онотҡанмын да баһа!", тигән уй һуҡты башыма. Иҫләп, уны таштар менән булһа ла Ян улыма уйнап күрһәттем. Шулай бынан 25 йыл элек ашыҡ уйынын тағы иҫемә төшөрҙөм, блокнотыма белгәндәремде теркәп ҡуйҙым. Был милли уйын тураһында ҡайҙалыр яҙылғанмы икән, тип, "Башҡорт халыҡ ижады" китабын ҡарап сыҡтым. Унда бер нисә мәғлүмәт таптым. Тик яҙылғандарҙан уйындың асылына төшөнөүе бик ауыр.

Асыҡланыуынса, Башҡортостанда, ғөмүмән, боронғо был хазина онотолған. Үҙ ғаиләбеҙҙе генә алғанда ла, әсәйем, һуғыш осоро балаһы, бик үк белеп етмәй ине ашыҡ уйыны серҙәрен, ас-яланғас үҫкән балаларҙа ҡайҙан ғына уйын ҡайғыһы булһын! Башҡа туғандарым да уйнамайҙар, уны белмәйҙәр ҙә, ҡыҙыҡһынмайҙар ҙа.

Тәүге яҙмаларымды тулыландырып, дәфтәргә күсереп ҡуйҙым. Донъя мәшәҡәттәре уны тағы байтаҡҡа онотторҙо. Уйынды тергеҙеү, халыҡҡа сығарыу уйы башыма инеп тә сыҡмай ине ул саҡта. Ябай йырсымын, филармонияла эшләп йөрөйөм, ғөмүмән, тормош үҙ ағышы менән китеп бара. Сама менән ун биш йыл элек "Нишләп ашыҡ уйындарын уйнамайбыҙ, нишләп уларҙы балаларға өйрәтмәйбеҙ?" тип ең һыҙғанырға булдым. Уйынды ысын ашыҡтар менән күрһәтергә, ашыҡтар йыйырға ниәт ҡылдым. Ашыҡ йыйырға ярҙам итегеҙ, тип, дуҫтарыма, туғандарыма мөрәжәғәт иттем. Кәзә-һарыҡ малының артҡы аяҡтарында була улар. Бер баш малдан икәү генә сыға шулай. Тик йә оноталар, йә ул урынды алмайбыҙ, ташлайбыҙ, тигән һылтау менән минең үтенесем үтенес көйө ҡала килде. Аптырағас, ҡорбанлыҡ һарыҡ һатып алып, ике бөртөк ашыҡ төшөрҙөм ҡулыма. Ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтарҙа уйындың киң таралыуын белгәнгә күрә, интернет аша эҙләнә башланым. Таптым, улар менән һатыу итәләр икән хатта. Аҙаҡтан Ҡаҙағстанда 100-әр һумға һатып ултырғандарын үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. 2020 йылда интернет аша 150 ашыҡ яҙҙырып алдым һәм оҫталыҡ дәрестәре үткәрә башланым.

Тәүге бәләкәй генә ярышты Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатта үткәрҙек. Шунан чемпионат тураһында уйлана башланым. Бөтөн донъя күсмә халыҡтар уйындары программаһына "Биш ашыҡ" һәм "Ашыҡ атыу" инә. Унда ҡатнашыу өсөн ашыҡ уйындарын тәүҙә үҙебеҙҙә үҫтерергә тейешбеҙ бит. Аллаға шөкөр, былтыр беренсе чемпионатыбыҙ үтте. Быйыл ул икенсе тапҡыр була һәм 2026 йылға ла планлаштырғанбыҙ. Иң көслө уйынсыларҙан команда туплап, киләһе йылдың сентябрендә ҡаралған VI Бөтөн донъя күсмә халыҡтар уйындарында ҡатнашыу ниәтебеҙ.

**Ашыҡты нисек уйнайҙар? Уны ниндәй уйын төрҙәренә индереп була, әйтәйек, етеҙлек талап иткәнме, бәлки, зирәклектер?**

- Ашыҡ уйындарының ултырып ҡына уйнай торғаны, хәрәкәт талап иткәне бар. "Ашыҡ атыу" менән "Өс табан"ды, мәҫәлән, малайҙар уйнай. Ә "Биш ашыҡ" менән "Ямғыр-ашыҡ" күберәк ҡыҙҙарға ятышлы. "Бәйге" менән "Хан талаш" ҡартына ла, йәшенә лә бара. Әйткәндәй, ашыҡ уйнағанда мейенең ике ярымшары ла эшләй, шуға ул деменция, альцгеймер кеүек ауырыуҙарҙы профилактикалауға булышлыҡ итә. Балаларға иһә ваҡ моторика өсөн яҡшы, етеҙлек, сослоҡ, мәргәнлек, күҙ алымы кеүек сифаттарҙы үҫтерә. "Биш ашыҡ" уйынын уйнар өсөн иң беренсе биш ашыҡ алырға кәрәк. Уларҙың берәүһе төп һөйәк - "ат" була. Биш ашыҡты ла уйын майҙансығына бәреп ебәрәбеҙ. "Ат"-ты алабыҙ, шунан уны өҫкә сорғотаһың һәм шул ваҡытта икенсе ашыҡты уйын майҙансығынан алып өлгөрәһең. Шулай итеп дүрт ташты алып бөтәһең. Ашыҡтарҙы, икешәрләп, шунан өсәрләп һәм дүртәрләп һалып, тағы алып сығаһың... Шунан дүрт ашыҡты кәртәгә индерәһең. Барлығы 14 этап. Иң һуңында мәрәй тотаһың. Кем беренсе булып 100 мәрәй йыя, шул еңә. Уйын балаҫ өҫтөнә ултырып уйнала. "Биш ашыҡ" уйыны ҡул-бармаҡтарға, күҙҙәргә гимнастика бирә, сослоҡ, таһыллыҡ, алдан күҙаллай белеүҙе талап итә. Ашыҡты сойорғотоп ебәргәс, уның усҡа килеп төшөү мәлен алдан иҫәпләй ҙә белергә кәрәк.

**"Әйҙә уйнарға!" Бөтә Рәсәй уйынсыҡтар һәм уйындар фестивале тураһында һеҙҙең фекерҙәрегеҙ...**

- Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа ғәмәлгә ашырылған өс проект шул тиклем күңелемә яҡын минең. Уларҙың береһе - "Башҡорт аты", икенсеһе - "Әйҙә уйнарға!", өсөнсөһө - "Китап байрамы". Шул тиклем бай мәғәнәле, эстәлекле саралар. Башлап ебәреүселәренә, инешендә тороусыларға мең-мең рәхмәт! Ә инде ашыҡ уйындарын халҡыбыҙға кире ҡайтарыуҙа ғәйәт ҙур ярҙамдары өсөн Республика Халыҡ ижады үҙәге етәкселегенә һәм "Атайсал" мәҙәни үҙәгендә бергә эшләгән коллегаларыма оло рәхмәтемде белдерәм.

**Моталлап БАЙГИЛДЕ**
**яҙып алды.**

✓ Төрлө кеше көтһә, малдың да ҡылығы үҙгәреүсән, сөнки береһе аҡыра-баҡыра көтөүҙең артынан ҡыуа. Икенсеһе тыныс ҡына көтөү алдынан бара. Көтөүлектә мал кәмеүенең сәбәбенең береһе лә бит көтөүсе булмағанлыҡтан.



ИНТЕРНЕТТАН



# ГҮЗӘЛ ЗАТТАР... ниндәй көндә сәләмәт?

■ Бер косметик фирма хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һуң йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Шаршамбы 15.00-16.00 сәғәткә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

■ Илау сәләмәтлек өсөн файҙалы, тип белдерә табиптар. Күҙ йәше илаусыларҙың хәлен күпкә яҡшыртырға мөмкинлек бирә, әммә бар нәмәлә лә сама кәрәк. Тик нисек "дөрөҫ" иларға һуң? Күҙ йәше менән организм үҙен ауыртыу һәм стрестарҙан ҡотҡара. Әгәр ҙә кеше тойғоларын сығармай һәм күҙ йәштәренә ирек бирмәй икән, был тиҙ ҡуҙғып барыусанлыҡҡа, ярһыусанлыҡҡа килтерә. "Эмоциональ көсөргәнеш менән бергә организмда химик матдәләр ҙә үҫешә һәм күҙ йәштәре менән бергә сыға. Әгәр ҙә көсөргәнеш менән көрәшмәһәң, был йөрәк өйәнәге хәүефен арттыра, баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәренә зыян килтерә", - ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Уильям Фрэй. Статистикаға ярашлы, илап алғандан һуң кешеләрҙең 88,8 процентының хәле күпкә яҡшыра. Күҙ йәштәрендә пролактин тигән гормон бар, ул эмоциональ көсөргәнеште юҡҡа сығара һәм иммунитетты нығыта. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа ирҙәргә ҡарағанда пролактин күберәк, ә ауырлы саҡта ул тағы ла күбәйә. Шулай итеп, илау - бик файҙалы. Тик йыш илау шулай уҡ дөрөҫ түгел. Эмоцияларҙы нормала тотоу өсөн аҙнаһына бер тапҡыр илап алыу ҙа етә.

■ Инглиз ғалимдары D витамины етешмәүе тиҙ ҡартайыуға килтерә, тип иҫбатлай. Улар фекеренсә, D витамины дефициты һәр өсөнсө кешелә бар. Был витаминды "ҡояш витамины" тип йөрөтәләр, сөнки организм уның 90 процентын ҡояш тәьҫиренән ала. Шуға ла ҡояш аҫтында йышыраҡ булырға һәм D витаминына бай аҙыҡ-түлек ашарға (балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары) тырышырға кәрәк. Әгәр ҙә асыҡ һауала булғандан һуң тирегеҙ һиҙелерлек алһыуланһа, тимәк, организм 20000 ЕД D витаминына байыған. Тик нисек зыян килтермәҫлек итеп дөрөҫ ҡыҙынырға һуң? Тәүҙә ҡояшта 10 минут самаһы ғына ҡыҙынығыҙ һәм көн һайын был ваҡытты 1-2 минутҡа арттыра барығыҙ. Тап ошолай итеп ҡыҙынғанда ғына һаулыҡты нығытырға була. Бигерәк тә яҙғы ҡояш аҫтында һаҡ булығыҙ, был осорҙа тирегә бигерәк зыян килеүе бар. Шулай ҡояш нурҙары аҫтында оҙаҡ булыу тире яман шешенә килтереүе бар, онкологтар фекеренсә, солярийҙарға йөрөү ҙә тире яман шешенә килтерә. Ҡайһы бер үләндәр һәм дарыуҙар тиренең ҡояшҡа тәьҫирен көсәйтеүен онотторға ярамай. Был исемлеккә һары мәтрүшкә, йөрәк ауырыуҙарынан дарыуҙар (кордарон), бөйөр өҫтө биҙе гормондары инә.

ЗАМАН ХӘЛДӘРЕ

**Көтөүсе муҡсаһының нимә икәнлеген һәр кем белә. Ул - көтөүсе ҡуллана торған махсус сумка йәки тоҡсай. Унда аҙыҡ-түлек, кәрәк-яраҡ, ҡайсы, бау кеүек кәрәкле әйбер йөрөтәләр. Борон был муҡса, ғәҙәттә, оҙаҡ ваҡытҡа сыҙамлы ныҡлы туҡыманан тегелһә, хәҙер тоторға ла, арҡаға аҫырға ла уңайлы рюкзак йөрөтәләр.**

# КӨТӨҮСЕ МУҠСАҺЫ.

## Унда нимәләр бар?

Бөгөн көтөүсе һөнәре бармы ни ул, тип һорарһығыҙ. Юҡ шул. Бына шуға ла һуңғы йылдарҙа ауыл тирәһендә ҡарауһыҙ йөрөгән мал күбәйҙе. Шул сәбәпле күрше күршеһе менән әрләшеп бөттө. Берәүһенең малы икенсеһенең баҡсаһына инеп зыян иткәне өсөн генә түгел. "Һин көт тә мин көт... Ул көтмәгәс, мин көтмәйем", - тип, көтөү көтөргә сығыу сираты менән риза булмағандар араһында бәхәс күп тыуа. Ауыл биләмәләре башлыҡтарының теңкәһенә тейгән проблемаларҙың да береһе ул көтөүсе юҡлығы. Заманса алымдар менән эш иткән ауыл хужалыҡтарында мал ашатыуҙы автоматлаштырыу сәбәпле, малсы-көтөүсегә ихтыяж кәмеһә лә, ауылдарҙа, эре һәм ваҡ мал, шулай уҡ йылҡы тотҡан ерҙәрҙә улар әле лә кәрәк.



Көтөүсе, һис шикһеҙ - бик яуаплы һәм ауыр һөнәрҙәрҙең береһе. Көтөп ҡарамаған кешегә генә мал көтөү еңел кеүек күренә. Юҡҡа ғына берәү яратмаған кешеһенә "Ирең көтөүсе булһа ғына ярар ине", тип теләмәгәндер. Был эштең ауырлығын үҙ елкәһендә татығанға шулай тигәндер. Көтөүсе иртә таңдан кискә тиклем мал артынан йөрөй, уларҙы ҡарай, һаҡлай, ашата, һыу эсерә, ауырығанын айыра, юғалғанын эҙләй, быҙаулата, уны алып ҡайта. Ямғыр, ел, һыуыҡ, эҫе - бөтәһен дә үткәрә. Уның бурысы - ауыл халҡының күҙ төбәп торған байлығын һаҡлау.

- Көтөүсе эше еңел түгел шул. Шуға ла бөгөн ялланып көтөргә теләгән кеше юҡ. Уйлап ҡараһаң, эш хаҡы арыу ғына бит уларҙың. Мал башы һанына ҡарап, уртаса 60-70 мең һумға тиклем барып етә. Борон ауыл көтөүен бер-ике кеше алмашлап көтә торғайны. Ауыл халҡы уларҙы үҙе һайлап ҡуя ине. Ашатырғамы-юҡмы, күпме түләргә, ҡайҙа йоҡлатырға һөйләшеп, барыһын да сходта хәл иттеләр, сөнки көтөүсе, ғәҙәттә, ситтән килеп яллана торғайны, ауыл кешеһен хужалыҡта эш ҡулы етмәй тип, колхоз ебәрмәне. Беҙҙең ауылда, мәҫәлән, ҡаланан бер сулаҡ килеп көттө, - ти Дәүләтҡол ауылынан Ғәйнулла Рахманғолов.

Ғәйнулла ағай үҙе заманында сусҡа ла, ауыл көтөүен дә көткән кеше. Уның әйтеүенсә, сиратлап көткәнгә ҡарағанда, ауыл халҡына ғына түгел, малға ла яҡшы бер генә көтөүсе булыуы. Төрлө кеше көтһә, малдың да ҡылығы үҙгәреүсән, сөнки береһе иртәнән кискә тиклем аҡыра-баҡыра көтөүҙең артынан ҡыуа. Икенсеһе тыныс ҡына көтөү алдынан бара. Көтөүлектә мал кәмеүенең сәбәбенең береһе лә бит көтөүсе булмағанлыҡтан. Миҫалға Рассвет ауылын ғына алайыҡ. Быйыл унда шәхси ҡуралиарҙан тиҫтәгә яҡын ғына баш һыйыр "электр көтөүсе"һенә тапшырыла.

"Көтөүсе бисәһе төндә биҙәнә" тигәндән, көтөүсе эшенә тура бәйле башҡа махсус әйтем булмаһа ла, башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре араһында мал, хеҙмәт, тырышлыҡ тураһында бик күп тапҡыр һүҙҙәр бар. Мәҫәлән, "Малсыһы булмаһа, малың да булмаҫ". Шулай инде, көтөүсе булмаһа, малыңды ла бөтөрәһең. Бына тағы: "Мал көткәндең малы артыр, эшләгәндең даны артыр". "Көтөүсе йоҡлаһа, мал таралыр". "Малсыһы тырыш булһа, малы туҡ булыр". Был мәҡәлдәр көтөүсе эшенең яуаплылығын, тырышлығын һәм ауыл тормошонда мөһимлеген сағылдыра.

Район ауылдарының береһендә байтаҡ йылдар элек дүрт йыл рәттән ҡустыһы менән алмашлап көтөү көткән Рәфил ағай Бикмырҙин әйтеүенсә, уның муҡсаһында аҙыҡ-түлек, тәмәке менән шырпы ғына түгел, тәбиғәт һәм кешеләр мөнәсәбәте тураһында бер нисә томлыҡ тормош һабағы ла ята.

- Малға ғына түгел, ҡайһы бер кешеләргә лә көтөүсе кәрәк. Минең күҙәтеүҙәр буйынса, кешеләр өс төргә бүленә. Шуларҙың икәүһе тураһында фекерем менән бүлешкем килә. Береһе - ҡоро тауыш. Эше лә юҡ, аҡылы ла юҡ, ҡоро тауыш ҡына. Ундайҙарҙың башы уйлап өлгөргәнсе теле барыһын да ярып һала. Һарыҡ һымаҡ. Сусҡаға оҡшағандар бар. Бер ҡасан башын күтәреп, һинең күҙеңә ҡарамай улар. Һинең күҙеңә түгел, күккә лә, ҡояшҡа ла ҡарамай. Ундайҙар бөтә нәмәне үҙенең ҡарашы төшкән тиклем генә кимәлдән баһалай. Көтөү көткәндә бына шундайҙарҙан этлекте күп күрҙем. Йә уларҙың ғына һыйырының һөтө булмай, йә елене бысранып, дегәнәккә һырып ҡайта, йә иртә алып сығаһың, тип һуҡрана, йә - киреһенсә, һуңға ҡалаһың, тип маҙаға тейә. Иң ғәжәбе - был хаҡта үҙе әйтмәй, ә кеше аша, аҫтыртын рәүештә еткертә.

Яңыраҡ бер танышым ошоға оҡшаш тағы бер осраҡ тураһында һөйләне. Бер тапҡыр ғаиләгә нисәлер көн рәттән көтөү көтөргә тура килгән. Уларҙың ауылында ла бер ваҡытта ла көтөүсенән риза булмаған бер әбей йәшәй икән. Тәүге көн көтөү көткәндән һуң был танышымдың улы, йоҡоһо бөткәс, атаһы янына көтөүлеккә китеп барһа, теге әбей осрай. Ул, ғәҙәтенсә, малайға дәғүәһен белдерә. Йәнәһе, бөгөн уның һыйырының һөтө аҙ булған. 10 йәшлек малай ҙа юғалып ҡалмаған: "Кисә беҙ ашатҡан һыйырҙарҙың һөтө иртәгә генә буласаҡ, шулай булғас, дәғүәне беҙҙән алда көткән күрше бабайға белдерегеҙ", - ти ҙә ары китә.

Ошондай кешеләрҙең малы ла йүнһеҙ була. Мал эйәһенә оҡшай, тигән әйтем дә бар бит халҡыбыҙҙа. Ысынлап та, шулай. Мәҫәлән, хужаһы тыныс булһа - малы ла тыныс, ә әүҙем, шаян кеше малын да шундай итеп тәрбиәләй. Халыҡта: "Мал үҙ эйәһенә оҡшамай буламы?" - тип әйтәләр. Был әйтем кешеләрҙең тәбиғәте, тәрбиәһе, мөнәсәбәте малдарға ла күсә тигәнде раҫлай.

Муҡсаға кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Хәҙерге ваҡытта замана бәләһенә әйләнгән талпанға ҡаршы көрәш саралары ла урын табырға тейеш унда. Совет власы осоронда йәй һайын халыҡ араһында "кукурузник" исеме алған АН-2 самолетынан иген баҫыуына гербицидҡа ҡушып талпанға ҡаршы махсус ағыу ҙа һиптеләр. Хәҙер ҡалала йәшәгән "йәшелдәр", тәбиғәтте бөтөрәһегеҙ, тип лаф ора, ә власть уларҙан ҡурҡыуын йәшереү өсөн, ағыу бик ҡиммәт, ти. Әйтерһең, кеше ғүмере арзан. Кемдән-кемдән, бына ошо көтөүселәрҙән һораһындар ине, сөнки улар кис һайын кейемmenән тиҫтәләгән талпан йыя, шуға күрә моҡсайҙа, беренсе сиратта, һыу менән бер рәттән, талпандан һаҡланыу саралары ла булыуы мотлаҡ...

**Көтөүсе муҡсаһы тураһында һөйләнек һөйләүгә, әммә көтөүсе хеҙмәте аҡсалы һәм бик кәрәкле булһа ла... юҡҡа сыға бара бит. Заман парадокстарының тағы береһе ошо булалыр инде.**

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

БАҠСАСЫ КӘҢӘШЕ

# ИХ, ЕЛӘККӘЙҘӘРЕ!



Ергә ни тиклем күберәк эйелһәң, уңышты шул тиклем күберәк алаһың, тип иҫәпләй һәүәҫкәр баҡсасы Тәнзилә Батталова. Шулай ҙа ошо кәңәштәрҙе лә тотоғоҙ, ти ул:

- Баҡса еләге сәскә атҡан осорҙа айырыуса иғтибар талап итә. Был ваҡытта еләккә дөрөҫ ҡарау мул уңыш алыу өсөн бик мөһим. Иң беренсе, сәскә атҡан саҡта еләкте аҙ-аҙлап, әммә даими рәүештә һыуларға кәрәк. Тупраҡтың өҫкө ҡатламы ҡоро булмаһын, әммә һыуҙа ла ултырмаһын. Сәскәгә һыу эләкмәһен өсөн һыуҙы еләк төбөнә генә ҡойоу яҡшыраҡ.

Сәскә атҡан ваҡытта еләк тирәһендәге сүп үләндәрен даими утап торорға кәрәк, сөнки улар туҡлыҡлы матдәләрҙе үҙенә ала һәм еләк үҫемлегенә зыян килтерә. Шулай уҡ был осорҙа еләккә органик йәки минераль ашлама өҫтәргә мөмкин, тик ашламаны артыҡ күп итеп ҡулланырға ярамай. Сәскәләрҙе насар һауа шарттарынан - һалҡындан йәки көслө ямғырҙан - һаҡлау өсөн өҫтөн еңел материал менән ҡаплап ҡуйыу файҙалы.

Дөрөҫ тәрбиә еләк сәскәләренең яҡшы үҫеүен, һуңынан тәмле һәм ҙур емештәр биреүен тәьмин итә. Еләк тәрбиәләүҙең бөтә нескәлектәрен үтәһәң, мул уңыш алырһың!

Сәскә атҡан ваҡытта баҡса еләген иң яҡшыһы - калий һәм фосфорлы ашламалар, мәҫәлән, суперфосфат йәки калий сульфаты менән ашлау. Азотлы ашламаларҙы был осорҙа артыҡ күп һибергә ярамай, сөнки ул япраҡ үҫешен генә көсәйтә, ә емешкә файҙаһы аҙ.

✔ *Әгәр күпме йәшәрегеҙҙе белгегеҙ килһә, үҙегеҙҙең ата-әсәләрегеҙгә ҡарағыҙ. Генетик нәҫел ғүмерҙе фаразлауҙа төп әһәмиәткә эйә. Кем 60 йәшкә тиклем йәрәк өйәнәгө кисергән, ул үҙе лә шул уҡ сир менән яфаланасаҡ.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ШАТЛЫҠЛЫ СПОРТ СӘНҒӘТЕ

**Күптәр шахматты ике кеше ҡапма-ҡаршы ултырып уйнай торған ябай уйын тип ҡабул итә. Уйынсыларҙың береһе, яҡшы йөрөш эшләп, комбинация үткәрһә, ситтән ҡарап тороусыларҙа был ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ләкин шахматсының көсөн уйын һөҙөмтәһе генә күрһәтә.**



Шахмат - ул спорт сәнғәте. Ул бик күп иждад шатлығы килтерә. Үҙ эсенә спорт, сәнғәт һәм фән элементтарын гармоник рәүештә алған был уйын кешегә һәр яҡлап тәьҫир итә, характерҙың иң күркәм сифаттарын тәрбиәләй, аҡыл һәләтен, сәнғәт зауығын үҫтерергә булышлыҡ итә. Башҡа практик уйындарҙан айырмалы, шахмат композициялар, йәғни мәсьәләләр төҙөү, уны сисеү һәм этюдтар эшләү өсөн киң мөмкинлектәр аса. Ә композиция, сәнғәт булараҡ, шахмат идеяһын тормошҡа ашыра һәм сағылдыра.

Нимә һуң композиция? Ул - мәсьәләләр, этюдтар рәүешендә яһалма барлыҡҡа килтерелгән позиция, унда шахматтың төп идеяһы үткәрелә. Яһалма рәүештә тыуҙырылған мәсьәләләр, этюдтар һис бер ваҡыт шахмат ярыштарында, уйындарында осрамаясаҡ. Әммә ысынбарлыҡта композицияға тик шахмат уйыны ғына йән өрә ала. Мәсьәләләрҙә сикләнгән кимәлдәге йөрөштәр ярҙамында мат ҡуйыла.

Мин үҙем композициялар менән мауығам, шахмат һөйөүселәргә шахматта композицияның ниндәй роль уйнауын, уның нимә икәнлеген һәм төп идеяһын асып бирәм. Төрлө баҫмалар һәм шулай уҡ Белорет районының "Урал" гәзите менән тығыҙ бәйләнештәмен. Тәүге иждад емешем, Бөйөк Еңеүҙең 40 йыллығы хөрмәтенә "40" һанын һынландырған ике йөрөшлө мәсьәләм, 1985 йылда "Башҡортостан пионеры" гәзитендә донъя күргәйне. Шатлыҡтарымдың иге-сиге булманы, ул ваҡиға миңә ҙур этәргес көс бирҙе.

Тыуып үҫкән төйәгемде ҡалдырып, Белорет районына күсеп килгәс, "Урал" гәзитендә барған шахмат конкурсын күреп, ғәжәп иттем. Республика кимәлендә бай тәжрибә туплаған кешегә район гәзитендәге мәсьәләләр тиҙ һәм еңел бирелде. 1986 йылдан алып мине ҡолас йәйеп ҡаршы алған "Урал" гәзитенән бөгөнгәсә айырылғаным юҡ. 1987 йылда Бөйөк Октябрҙең 70 йыллығы айҡанлы "70" һанын һынландырған ике һәм өс йөрөшлө мәсьәләләрем баҫмала донъя күрҙе. Шул уҡ йылда "Совет Башҡортостаны"нда өс йөрөшлө мәсьәләм баҫылып сыҡты. Шулай итеп, мин гәзиттәрҙә үткәрелгән шахмат конкурсты мәсьәләләрен сисеү генә түгел, ә улар өсөн мәсьәләләр төҙөү өҫтөндә лә әүҙем эшләй башланым. Был минең "композиция - шахмат поэзияһы"на килеп инеүем һәм унда иждад емештәрен татыуым ине.

1996 йылда район гәзите "Урал" үткәргән шахмат конкурсы мәсьәләләре бик етди һәм ауыр булды. Шул мәлдә һөйөклө әсәйем мәрхүмә булып ҡалды. Аҙнаун көнгә тыуған яҡтарыма ҡайтып килергә тура килде. Мәсьәләләр сисеүҙе бер аҙға кисектерергә булдым. Шулай ҙа конкурста бирелгән һигеҙ мәсьәләне сисеп ебәрә алдым. Берҙәнбер көндө әсәйем төшкә керәп: "Улым, минең өсөн ҡайғырма, мәсьәләләреңдең сиселеше дөрөҫ һәм еңеү һиндә булыр", - тип әйтте. Был һүҙҙәргә ышанырғамы-юҡмы тип йөрөгәндә, ысынлап та, гәзиттә конкурсҡа йомғаҡ яһалды һәм мин еңеп сыҡтым.

Шулай итеп, республика кимәлендәге шахмат конкурсында ҡатнашыуыма өс тиҫтәләп йыл үтеп киткән икән. Еңеүҙәр ҙә, еңелеүҙәр ҙә кисерергә тура килде. Үкенескә, хәҙер Рәсәй һәм республика кимәлендәге гәзит биттәрендә шахмат мәсьәләләре баҫылмай. Нишләп уларҙы яңынан бирә башламаҫҡа? Ни өсөн шахмат сәнғәтенә битарафлыҡ барлыҡҡа килде бөгөн? Элек шаулап торған "шахмат державаһы" юҡҡа сыҡты. Быға нимә сәбәпсе? Мин уға-быға ҡарамайынса, Белорет һәм Салауат районларының "Урал" һәм "Йүрүҙән" гәзиттәре биттәрендә, шахмат мәсьәләләрен тергеҙеп, уларҙы сисеү конкурсы алып барам. Ошо баҫмаларҙа ғына шахматты тергеҙҙем, тип әйтә алам. Шахмат таҡтаһы артында мин татыған ҡыуаныслы кисерештәрҙән киләһе быуындарҙы нишләп мәхрүм итәбеҙ? Шахмат - кешеләргә шатлыҡ өләшеүсе спорт сәнғәте икәнен онотмайыҡсы, тип кенә әйтмәксе инем.

**Франгил ҒӘЛИЕВ.**
**Межгорье ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

### Утыҙ етенсе хат: "Сәнғәт ҡомартҡылары ансамблдәре"

Һәр ил - ул сәнғәт ансамбле. Советтар Союзы ла ғәжәйеп мәҙәниәттәр йәки мәҙәниәт ҡомартҡылары ансамбле булып тора. Советтар Союзындағы ҡалалар, бер-береһенә ни тиклем оҡшаш булмаһалар ҙа, бер-береһенән айырымланмаған. Мәскәү һәм Ленинград бер-береһенә оҡшамау ғына түгел, улар бер-береһенә ҡапма-ҡаршы килеп тора, тимәк, бер-береһенә йөгөнтолары бар. Юҡҡа ғына улар шул ҡәҙәре тура тимер юлы менән тоташмағандыр ҙа, хатта поезда төн буйы боролоштарһыҙ ғына һәм тик бер урында туҡталып юл үткәс, Мәскәүҙә йәки Ленинградта вокзалға барып төшәһең һәм кискеһен генә һеҙҙе оҙатып ҡалған вокзал бинаһын күрәһең; Ленинградтағы Мәскәү вокзалы һәм Мәскәүҙәге Ленинград вокзалының фасадтары бер төрлө. Әммә вокзалдарҙың бер төрлө булыуы ҡалаларҙың оҡшашһыҙлығын тағы ла асығыраҡ итеп күрһәтә, был оҡшашһыҙлыҡ бер-береһен тулыландырып килә тәслә.

Хатта музейҙарҙы сәнғәт әйберҙәре лә һаҡланып ҡына ҡалмай, ә ҡалаларҙың һәм илдең дөйөм тарихына бәйле ниндәйҙер мәҙәни ансамблдәргә берләшә. Музейҙар составы һис тә осраҡлы түгел, хатта уларҙың тупланыу тарихында осраҡлыҡтар күп булған хәлдә лә. Юҡҡа ғына, мәҫәлән, Ленинград (хәҙерге Санкт-Петербург - тәрж.иҫк.) музейҙарында голланд (был Петр I), шулай уҡ француз рәсем сәнғәте өлгөләре (был XVIII һәм XIX быуат башындағы Петербург дворянлығы) күп түгел.

Башҡа ҡалаларҙы ҡарағыҙ. Новгородта иконаларҙы ҡарарға була. Был ҙурлығы буйынса Боронғо Русь рәсем сәнғәтенең өсөнсө үҙәге.

Кострома, Горький (хәҙерге Түбәнге Новгород - тәрж.иҫк.) һәм Ярославлдә XVIII һәм XIX быуатҡа ҡараған урыҫ рәсем сәнғәтенә күҙ һалығыҙ (был урыҫ дворянлыҡ мәҙәниәте үҙәге), ә Ярославлдә тағы ла XVII быуаттың "Волга буйы" сәнғәте лә айырыуса яҡшы көүҙәләндерелгән.

Әгәр инде бөтә илебеҙҙе алып ҡараһағыҙ, һеҙ ҡалаларҙың төрлөлөгөнә һәм үҙенсәлектәренә, уларҙа һаҡланған мәҙәниәттәргә хайран ҡаласаҡһығыҙ: музейҙарҙа һәм шәхси йыйынтыҡтарҙа, хатта урамдарҙа ла, сөнки һәр тиерлек иҫке йорт - хазина. Ҡайһы бер йорттар һәм тотош ҡалалар үҙҙәренең ағастағы семәрҙәре менән (Томск, Вологда), икенселәре ғәжәйеп планировкаһы, йылға буйҙарындағы бульварҙары менән (Кострома, Ярославль), өсөнсөләре - таш йорттары, дүртенселәре - үҙенсәлекле сиркәүҙәре менән.

Әммә уртаҡлыҡтар ҙа байтаҡ. Урыҫ ҡалаларына хас бер һыҙат - йылғаларҙың бейек ярҙарында урынлашыуҙары. Ҡала алыҫтан күренеп тора һәм йылға ағымына ҡушылып киткәндәй тойола: Бөйөк Устюг, Волга һәм Ока буйындағы ҡалалар. Бындай ҡалалар Украинала ла бар: Киев, Новгород-Северский, Путивль.

Былар Боронғо Русь йолаһы - Рәсәй, Украина, Белоруссия, ә аҙаҡтан Тобольск һәм Красноярск булған Себер барлыҡҡа килгән Русҭән...

Бейек яр башындағы ҡала мәңге хәрәкәттә. Ул йылға эргәһенән "ағып үтә". Был да Русь иленә хас тыуған яҡ киңлектәрен хәтерләтә. Илдә халыҡ, тәбиғәт һәм мәҙәниәт берлеге бар.

Ҡалаларыбыҙҙың һәм ауылдарыбыҙҙың төрлөлөгөн һаҡлап ҡалыу, уларҙағы тарихи хәтерҙе, уларҙың дөйөм милли-тарихи үҙенсәлеген һаҡлау - ҡала төҙөүселәребеҙҙең иң мөһим бурыстарының береһе. Бөтә ил - ҙур бер мәҙәни ансамбль. Ул үҙенең ғәжәйеп байлығы менән бергә һаҡлап алып ҡалынырға тейеш. Һине үҙеңдең ҡалаң йәки ауылыңдағы ғына түгел, ә дөйөм алғанда илеңдең тарихи хәтере тәрбиәләй. Хәҙер кешеләр тик үҙҙәренең "пунктында" ғына түгел, ә тотош илдә, тик үҙенең быуаты менән генә түгел, ә тарихтарындағы бар быуаттар менән бергә йәшәй.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

ОЛО ЙӘШТӘГЕЛӘР ҠОЛАҒЫНА



# БӘХЕТЛЕ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ,

## тәүҙә үҙең кемделер бәхетле ит!

**Йәшәү рәүешендә матурлыҡҡа, именлеккә, сәләмәтлеккә ҡороу буйынса Бразилия онкологы, медицина буйынса Нобель премияһы лауреаты Драузио Варелла фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

● Ғүмерҙең өсөнсө осоро рәсми рәүештә 60 йәштә башлана һәм 80-дә тамамлана, тип фаразлана.

● Дүртенсе осор, йәғни ҡартлыҡ, 80-дә башланып, 90 йәштә бөтә.

● Оҙон ғүмерлелек 90 йәштән алып, кеше үлгәнсе дауам итә.

● 50 йәштән һуң бер кем дә сәләмәт булмай, әлбиттә. Йәштәр имен-һауҙар, ә ҡарттарҙың йәше буйынса һәр ваҡыт бер йә бер нисә сире була. Сәләмәт ҡартлыҡ шулай була тип ҡуҙаллана.

● Әгәр күпме йәшәрегеҙҙе һәм нисә йәшкә етерегеҙҙе белгегеҙ килһә, үҙегеҙҙең ата-әсәләрегеҙгә ҡарағыҙ. Генетик нәҫел ғүмерҙе фаразлауҙа төп әһәмиәткә эйә. Кем 60 йәшкә тиклем яман шеш йә йөрәк өйәнәгө кисергән, ул үҙ гендарын балаларына "тапшырасаҡ" һәм шул уҡ сирҙәре менән үҙе лә яфаланасаҡ.

● Шуға күрә, әгәр сәләмәт ҡартайырға теләһәгеҙ, 50 йәштән алып туҡланыуығыҙға ныҡлап иғтибар итә башлағыҙ, "химия" ашамағыҙ, артыҡ майҙар ҡулланыу ҙа кәрәкмәй. Һәйбәт иртәнге һәм төшкө аш, еңелсә киске аш - бына һеҙҙең эске балансығыҙ өсөн аҫыҫс.

● Диетағыҙҙа кәрәкле нәмә - эсемлектәр. Бөтөн татлы, газлы эсемлектәрҙе онотоғоҙ, уларҙы хатта йәштәр ҙә һирәклән кенә тәмләргә тейеш. Бөтөн был шыйыҡсаларҙа натрий карбонаты, шәкәр һәм кофеин бар. Яңы һығылған һуттарға өҫтөнлөк бирегеҙ. 50 йәштән һуң алкоголдә самалап ҡына ҡулланығыҙ.

● Өлкән кешенең төп бәләһе - яңғыҙлыҡ. Йыш ҡына өлкәнәйгән парҙар бергә ҡартайыу мөмкинлегенән мәхрүм. Уларҙың береһененң тол ҡалыуы ғаиләләре өсөн ауырлыҡ һалырға мөмкин. Шуға күрә лә, балаларығыҙ йә өйәндәрегеҙгә мәшәҡәт тыуҙырмаҫ өсөн дуҫ йәштәштәрегеҙ менән араны өҙмәҫкә тырышырға кәрәк, улар менән йышыраҡ осрашығыҙ һәм аралашығыҙ.

● Уильям Шекспир әйткән: "Үҙенде һәр ваҡыт бәхетле итеп той!" Беләһенме, ни өсөн? Сөнки инде бер кемдән бер ни ҙә көтмәйһең. Көтөү һәр ваҡыт яза һымаҡ ул.Проблемалар мәңгелек түгел, уларҙың хәл итеүҙ юлдары бар. Күп ваҡыт беҙ үҙ проблемаларыбыҙҙа үҙебеҙ ғәйепле. Дарыуы булмаған берҙән-бер нәмә - ул үлем.

● Бәхетле булғығыҙ килһә, тәүҙә үҙегеҙ кемделер бәхетле итегеҙ. Кемдәндер нимәләр алыр өсөн тәүҙә үҙегеҙ ни ҙә булһа бирегеҙ. Үҙегеҙҙе яҡшы күңелле, ихлас һәм ҡыҙыҡлы кешеләр менән уратып алығыҙ һәм шуларҙың береһе булығыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ауыр минуттарҙа, күҙегеҙҙән йәштәр аҡҡанда ла, баҫылығыҙ ҙа йылмайырға көс табығыҙ һәм әйтегеҙ: "Бөтәһе лә һәйбәт, сөнки бөтәһе лә Аллаһ ҡулында".

✓ *Шулай уҡ ҡуҙғалаҡты ауырлы саҡта, бөйөр шеше ауырыуы, юғары кислоталы гастрит, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге яман шеше ауырыуҙары осрағында ҡулланырға ярамай. Ҡуҙғалаҡ кальций матдәһен үҙләштереүҙе ауырлаштыра.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЙОНДОҘ ФӘНЕ НИСЕК АТАЛА?




**21-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ашына. **Ураҡсин.** Күрмәксе. Әсәйем. Ҡойма. Ерек. Тартюф. Краб. Лабрадор. Милл. Аҡыҡ. Терпуг. Аэвит. Ағуна. Авар. Таня. Аушев. Етер. Ыҙан.

**Вертикаль буйынса:** Ҡатлама. **Кейекбаев.** Аксалата. Урам. Вәлиев. Әрем. Шкалик. Ҡарта. Уғры. Еткер. Уңыш. Азия. Емца. **Сәйетбатталов. Марат.** Йорт. Морфология.

ЙӘШЕЛ ДАУА

## ҠУҘҒАЛАҠ



Ҡуҙғалаҡ флавоноид, липид, аҡһым, минераль тоҙҙар, органик кислоталар (алма, ҡуҙғалаҡ, лимон кислоталары), каротин, В1, В2, С, К, РР витаминдарына бай.

Ҡуҙғалаҡ аш һеңдереү процесын, эсәк, үт ҡыуығы, бауырҙың эшен яҡшырта. Шулай уҡ был үлән колит ауырыуы төрҙәрен, ашҡаҙан-эсәк юлы ауырыуҙарын, геморройҙы дауалауҙа ҡулланыла. Ҡуҙғалаҡ түлһеҙлектән дә ярҙам итә.

Рецебы бик ябай: 1 ҡалаҡ ҡуҙғалаҡҡа бер стакан эсе һыу ҡойорға, һүрән утта 1 минут ҡайнатырға, һыуынғансы төнәтергә. Стакандағы төнәтмәне өскә бүлеп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Ҡуҙғалаҡты бешкәнсе ҡайнатырға ярамай, был осраҡта ҡуҙғалаҡ кислотаһы барлыҡҡа килә.

Шулай уҡ ҡуҙғалаҡты ауырлы саҡта, бөйөр шеше ауырыуы, юғары кислоталы гастрит, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге яман шеше ауырыуҙары осрағында ҡулланырға ярамай. Ҡуҙғалаҡ кальций матдәһен үҙләштереүҙе ауырлаштыра.

## УКРОП



**Ҡолаҡ шаулағанда.** Кипкән укропты тотошлай, һабағы һәм орлоҡтары менән ваҡларға. Термосҡа бер ус үләнгә 0,5 л ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ярты стакан ҡуләмендә эсергә.

**Ҡара ҡылау, глаукома ауырыуҙары.** Укроптың һутын һығып алырға. Көнөнә бер нисә тапҡыр бинтты ошо һутҡа манып, 15-20 минутҡа күҙгә һалырға. Дауалауы осоро сикләнмәгән.

**Мочекислый диатез, нефрит.** Укроп орлоҡтарын ҡайнатып һыуытылған һыуға 1:20 нисбәтендә төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1 стакан эсергә.

**Сиҡәклау.** Сиҡәклауҙы туҡтата алмаған осраҡта, 1 балғалаҡ укроп орлоғон 1 стакан ҡайнар һыуҙа 30 минут төнәтергә. Көнөнә өс тапҡыр ярты стакан төнәтмә эсергә.

**Атеросклероз.** 1 ҡалаҡ укроп орлоғон 1 стакан ҡайнар һыуҙа 1 сәғәттән ашыу төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ күләмендә ҡулланырға.

**Метеоризм, глисты.** 1 ҡалаҡ укроп орлоғон 250 мл һөткә һалып, 5-10 минут ҡайнатырға. Йкегә бүлеп, йылы көйөнсә генә эсергә.

Йыш һәм күп ҡулланған осраҡта укроп **ҡан баҫымын түбәнәйтә**, ҡан тамырҙарын киңәйтә.

**Рим ӘХМӘДОВтан.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 июнь "Ваня ағай"** (А.Чехов, С.Пектеев). 16+

**9 июнь "Әкиәт илендә мажаралар"** (В. Коростылев, Ф. Ғарипов), әкиәт. 6+

**10 июнь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

**11 июнь "Ете быуын. Йәштәр"** (Р. Харисова). 16+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 июнь "Играем Пушкина: Царевна-Лебедь"** (А. Пушкин, О. Мусина), әкиәт. 9:30. 6+

**6 июнь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев, М. Күлбаев), әкиәт. 11:30. 0+

**7 июнь "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (К. ДиКамилло, А. Абушахманов), мөхәббәт тураһында әкиәт. 10:30. 6+

**10 һәм 11 июнь "Волшебник изумрудного города"** (А. Богачева, М. Күлбаев). 10:30. 6+

**12 июнь "Сказание о семи батырах"** (Д. Юсупов, Р. Хакимов), фэнтези. 09:30. 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**6, 7 һәм 8 июнь "Чем пахнут одуванчики"** (В.Щербакова). 12:00 һәм 15:00. 0+

**7 июнь "Муха Цокотуха"** (К. Чуковский). 15:00. 0+

**8 июнь "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 15:00. 0+

**10 июнь "Урал Батыр эҙҙәре буйлап"**, интерактив квест. 11:00. 6+

**11 июнь** Ҡурсаҡ театры буйлап сәйәхәт. 11:00. 0+

**11 июнь "Шесть чувств"**. 18:00. 12+

**12 июнь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12:00 һәм 15:00. 0+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**10 июнь "Строки в большом городе"**, фәлсәфәүи-психологик спектакль. 12+

**12 июнь "LICARBX & ANJELINA"**, концерт. 16+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**9 һәм 10 июнь "Светофория - волшебная страна"**, мауыҡтырғыс юл ҡағиҙәләре. 6+

**10 июнь "Муха Цокотуха"** (К. Чуковский), әкиәт. 0+

### А. Мөбәрәков исемендәгет Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**10 июнь "Тынлыҡ өҙөлгән урын..."** (З. Усманова), драма.. 16+

**11 июнь "Доктор"** (М. Икрамова, Д. Нурғәлин), лирик комедия. 12+

Спектаклдәр Сибай концерт-театр берекмәһе сәхнәһендә үтә.

### БР Милли музейы

**10 июнь "Ҡурсаҡ менән Рәсәй буйлап - ҡурсаҡтар әйлән-бәйләнә"** күргәҙмәһен асыу. 11:00. 0+

**11 июнь "Символдың барлыҡҡа килеүе"** күргәҙмәһен асыу. 14:00. 6+

**12 июнь** Тамбур сигеүе буйынса оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+

ПРЕМЬЕРА!

# КИЛЕГЕҘ, КҮРЕГЕҘ, БАҺАЛАҒЫҘ!

**Тормошобоҙҙо миҙгелдәргә бүлеп йәшәйбеҙ. Мәҫәлән, йылды дүрт миҙгелгә бүлгәндә уңайлыраҡ, йәй менән ҡыштың, яҙ менән көҙҙөң үҙҙәренә генә хас сифаттары сағыуыраҡ күренә. Бала сағыбыҙҙы үҫмер йылдары менән бутамайбыҙ, һәр осорҙоң үҙ йәме.**



Театр ҙа эшмәкәрлеген ижади миҙгелдәр мыҫҡалына һалып үлсәй, ул йәйге ялдарҙан алда тамамлана ла, көҙ яңы миҙгелде асыуҙан башлана. Ябыу осоронда һығымталар яһалһа, яңыһын башлағанда дәртле өмөттәр уяна, пландар ҡабул ителә. Әле Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры үҙенең 94-се (!) Ижади миҙгелен ябыу мөҙҙәтенә еткән мәле. Был айҡанлы 10 июндә Сибай концерт-театр берекмәһе сәхнәһендә режиссер Залина Усманова ҡуйған "Тынлыҡ өҙөлгән урын" спектакленең премьераһы буласаҡ. Һәр премьера театр өсөн һынау ғына түгел, көс-кимәлен сағылдырыусы күрһәткес тә. Залина Вилким ҡыҙынан буласаҡ спектаклдең йөкмәткеһе, формаһы тураһында һораштыҡ:

- Театрҙағы эшмәкәрлегемдән тыш, Камил Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжында театр бүлегендә уҡытҡас, студенттарым менән спектаклдәрҙең яңы формалары тураһында йыш һөйләшәбеҙ. Шәхсән үҙем Мәскәү, Питер театрҙарының тормошон күҙәтеп барам, Ҡаҙан театрҙары ла ситтә ҡалмай. Был үҙ ҡаҙанында ҡайнамау өсөн бик тә ҡулай әсул. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, шул саҡта ғына үҙеңдең бер урында тапана башлауың күҙгә ташлана. Студенттарымдың ана шул бер төрлөлөктән ҡараштары тоноклана башлауын һиҙгәс, Театр эшмәкәрҙәре союзының яңы ижади проекттар бүлегенә ғариза биреп, театрыбыҙҙа айырым актерҙар менән эшләп, айырым спектакль сығарыу мөмкинлеге алдым. 26 октябрҙә яңы башлаған эшебеҙҙең дебюты булды, актрисалар Айгөл Ғөбәйҙуллина менән Сәлимә Кинйәбаевалар ҡатнашлығында әҙәби-поэтик спектакль сығарҙыҡ.

Актерҙарға дәрестәр үткәргәндә, тренингтар мәлендә бәләкәй-бәләкәй генә сценарийҙар яҙыла. Шул ҡыҫҡа ғына әҫәрҙәрҙе ҡулланып, моноспектаклдәр барлыҡҡа килә. Был шөғөлөбөҙ бик тә оҡшап ҡалды, беҙ уны байытып, сәхнә әҫәре кимәленә еткереп, тамашасы хөкөмөнә сығарырға булдыҡ. 9 декабрҙә тәүге премьерабыҙ бәләкәй залдағы сәхнәгә сыҡты. Ҙур сәхнәгә сығыр алдынан шул моноспектаклдәрҙе бер епкә теҙеп, бер бөтөн итеп туплау зарурлығы барлыҡҡа килде. Сценарий буйынса йәш режиссер үҙе ҡуясаҡ спектаклгә материалдар эҙләй. Шул саҡта ул Умберто Эко исемле фәйләсүфтең матурлыҡ һәм әшәкелек тураһындағы уйланыуҙарына тап була һәм үҙ-үҙенә һорау ҡуя: нимә ул - матурлыҡ, әшәкелек нимә ул? Тышҡы матурлыҡ эсендә йәмһеҙлек булыуы ла ихтимал бит, киреһенсә, тышҡы ҡиәфәте ҡурҡыныс булып та, кешенең эске тормошо яҡты булыуы бик ихтимал бит!

Шулай итеп, социаль селтәрҙәрҙән эҙләп, тормоштан алып, әлеге мәлдә тулы кимәлдәге сәхнә әҫәре барлыҡҡа килде. Нимә тураһындамы? Спектаклдә дүрт тарих бирелә: беренсеһе ен ҡағылып, аңы томаланған ҡатын тураһында, икенсеһе сибәрлеге арҡаһында михнәт сиккән матурҡай хаҡында. Өсөнсө тарихта ҡанундар төрмәһендә үҙен яңғыҙ тойған йәш ҡыҙҙы күрерһегеҙ. Дүртенсе тарих ир кешенең иҫерткес эсемлектәргә бәйлелеге хаҡында. Вербатим, импровизация, драма жанрҙарын бергә ҡушып, һәр тамашасыбыҙҙың спектаклдән уйланып ҡайтыуын теләйбеҙ. Ябай, ғәҙәти, ҡанға һеңгән күренештәрҙән ситләшергә тырыштыҡ. Күпмегә ситләшеүебеҙҙе килегеҙ, күрегеҙ, баһалағыҙ. Премьера 10 июндә!

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТ АЛҺАҢ...

## ауылың менән кәңәш ит

Ағай-эне аты уҙғансы, күршеңдең тайы уҙһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ауылда бер ғашиҡ егет йәшәгән. Ул ғашиҡ булған ҡыҙға тирә-яҡта матурлыҡ буйынса тиңләшеүсе булмаған һәм ул да ошо уҡ ауылда йәшәгән. Ауылдағы бар егеттәр ошо ҡыҙға ғына ғишыҡ тотҡан. Ләкин ҡыҙ үҙенең матурлығы менән артыҡ ныҡ маһайған һәм ғорурланған, шуға ла ауылдағы бер егетте лә күҙенә лә элмәгән, яҡынлатмаған да. Сараһыҙлыҡтан ни эшләргә белмәгәс, баяғы ғашиҡ егет көслө һәм ҡыйыу яугир булырға ҡарар итә. Күкрәге тулы орден-миҙалдар таҡҡан хәрби кейемдәге яугирҙе был ҡыҙ, моғайын, үҙ итер, уға кейәүгә сығыр, тип уйлай ул һәм ҡалаға һалдат хеҙмәтенә китә. Ул күп кенә һуғыштарҙа ҡатнаша, офицер дәрәжәһе ала һәм ауылына герой булып әйләнеп ҡайта. Ләкин әле һаман үҙенең йәрен һайламаған ҡыҙ егет яғына боролоп та ҡарамай.**

**Былай ҙа ҡыҙҙың иғтибарын йәлеп итә алмағас, егет инде хәҙер бай кеше булырға ҡарар итә. Ҡыҙ уның ҡимmәтле бүләктәре алдында иреп төшәсәк, тип уйлай ул. Ул бер бай кешегә тән һаҡсыһы булып эшкә урынлаша, унан бик күп нәмәләргә өйрәнә. Оҙаҡламай үҙ эшен асып, байып китә. Һәм бына ғашиҡ егет бай кеше булып, үҙенең тыуған ауылына ҡайтып төшә. Ләкин ҡыҙ уның бүләктәрен һалҡын ғына ҡабул итә, башҡа егеттәр килтергән бүләктәрҙе сығарып күрһәтә, бүләк ташыусылар һинән башҡа ла етерлек, йәнәһе.**

**Шунан инде егет аҡыл эйәһе булырға ҡарар итә. Ғаиләһенә барлыҡ байлығын ҡалдыра ла, донъя уйлап аҡыл йыйырға сығып китә. Бер нисә йылдан ауылына аҡыл эйәһе булып ҡайтып төшә. Ләкин был юлы инде ул баяғы ҡыҙҙың янына бармай, ә аҡыллы менән бүлешеп, үҙ өйөндә тыныс ҡына ғүмер итә башлай.**

**Ваҡыт үтә. Хәҙер инде матурлығынан яҙа башлаған ҡарт ҡыҙ һаман, минә тиң ир юҡ, тип, яңғыҙы йәшәй бирә. Ләкин ул көҙгөгә ҡараған һайын үҙенең ҡартая барғанын тоя. Хәҙер инде уны берәү ҙә кәләш итеп алырға теләк белдермәй. Уның сикһеҙ тәкәбберлеге бар егеттәрҙе ҡурҡытып бөткән була. Яңғыҙы ҡалыуҙан ҡурҡыу тойғоһо ҡарт ҡыҙҙы аҡыл эйәһенә алып килә һәм ул унан "Һин мине кәләш итеп алыр инеңме?" тип һорай. Аҡыл эйәһе ризалаша. Ауылдаштары был хәлгә бик аптырай. "Ниңә өйләнәһең уға, ул бит хәҙер убырлы ҡарсыҡҡа әйләнде һәм һиңә бик күп яуызлыҡтар ҡылды", тип белдерә ҡайһы берәүҙәре. Аҡыл эйәһе йылмая һәм шулай ти: "Ә мин уның тарафынан эшләнгән изгелекте генә беләм. Ул булмаһа, мин бер кем дә булмаҫ инем..."**

ТЕЛҺӨЙӘР

# МӘРД ЕГЕТ

**Өфөнөң баҡса-парктарында йыл һайын муҙыйға ҡаршы саралар ойошторола. Ошо һөйләмдәге "муҙый" тигән һүҙ, моғайын, бәғзеләргә аңлашылмаҫ. Тәүҙә уға туҡталайыҡ.**

**Муҙый.** Йоғошло ауырыу таратҡан бөжәктәр шулай атала. *Муҙыйға ҡаршы ағыу ҡулланыу. Муҙыйҙан һаҡланыу өсөн прививка яһайҙар.*

**Мөсәй** - ул өмәселәрҙе һыйлағанда өләшләп таратылған ит, өләш, мөсә һөйәге. *Мөсәй таратыу. Мөсәй бүлеү. Мул мөсәй.*

**Мунау.** Әрсеп юныу, өҫтән һыҙырып юныу була мунау. *Ағасты мунау. Йүкә ҡайырыһын мунау.*

**Мунда.** Аттың ҡулбашы өҫтөндәге ҡалҡыу урын. *Мундаһы бейек ат. Батыр һыҡҡан бүрене аттың мундаһы аша һалған.*

**Мәрд, мәрдән.** "Ҡыйыу, батыр ир; ысын ир" мәғәнәһен еткергән һүҙҙәр. *Мәрд егет. Ир баланы мәрдән итеп тәрбиәләү.*

**Шулай итеп, илдә мәрдәндәр артһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# САЛАУАТ ЙЫЙЫНЫНА...



**14 июндә Салауат районында "Салауат йыйыны" республика фольклор байрамы үтә. Сара башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың тыуыуына 271 йыл тулыуға арнала.**

Был проект йәш быуында Салауат Юлаев образы аша үҙ халҡына, тарихына милли ғорурлыҡ тойғоһон, мәҙәни-тарихи һәм әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлау маҡсатында ойоштоола.

Байрамда "Оран" сувенирҙар конкурсы, "Салауат бәйгеһе" милли спорт бәйгеһе, "Көрәш" турниры, тирмәләр һәм ихаталар конкурсы буласаҡ.

Салауат Юлаев - башҡорт халҡының милли геройы, сәсән, шағир-импровизатор, Крәҫтиәндәр һуғышы (1773-1775) полководецы, Емельян Пугачевтың көрәштәше. Уның тормошо һәм эшмәкәрлеге батырлыҡ һәм илһөйәрлек символы булып тора.

Герой хөрмәтенә Башҡортостан Республикаһының иң юғары дәүләт наградалары булдырылған: Салауат Юлаев ордены, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы.

Ойоштороусылар: Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Салауат районы хакимиәте.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25022

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
5 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2857
Заказ - 1072